ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 май (һабанай)
2026
№17 (1212)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:**


**Ни өсөн "яһалма зиһен"?**



6

**"Хәл килһә, французса белгән яҡшы..."**



8-9

**"Егәрленең аты ла арымаҫ"**



11

**Улар өлгөһөнә ихтыяж бар**



12


@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!** ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә 2026 йылдың икенсе ярты йыллығына 1124 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана. Һәр ваҡыттағыса, гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур башҡорт китаптары менән бүләкләнер.*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

### *1 Май - Яҙ һәм хеҙмәт байрамы. Ә һеҙ физик эш менән дуҫмы, ниндәй шөғөлдән ҡәнәғәтлек алып йәшәйһегеҙ?*

***Наил ЮЛДАШБАЕВ, Ейәнсура районы, башҡорт теле уҡытыусыһы:*** Минең үҙемдең баҡсам бар, күберәген бәрәңге, кишер, ҡыяр-помидор, сөгөлдөр кеүек йәшелсәләр үҫтерәм. Эш, ҡәҙимгесә, апрель-май айҙарында башлана. Баҡсаны ниндәйҙер килем өсөн тотмайым, ер эше минең өсөн күңелемә ял. Ерҙең еҫе, йылыһы, ҡояш нурҙары, ҡоштар һайрауы - үҙемә ысынлап та оҡшаған мөхит. Бала саҡта атайым менән бергә йәшелсәемешкә һыу һибеп башлағанмын был шөғөлдө, шул ваҡыттан бирле, ҡайҙа ғына йәшәргә тура килмәһен, иң тәү сиратта баҡса яғын хәстәрләйем. Элегерәк, балалар бәләкәй саҡта, баҡсаны уларға хеҙмәт тәрбиәһе биреү, ер ҡаҙыу, сүп үләндәрен утау, һыу һибеү аша эшкә өйрәтеү маҡсатында ҡуллана инем. Хәҙер улар таралышып, үҙаллы булып бөттөләр, ә баҡсаны үҙемә рухи ҡәнәғәтлек алыу өсөн тотам.

Яҙ көнө бар донъя уяна, шул ваҡытта һин ерҙе ҡаҙып, орлоҡ сәсеү менән бергә үҙеңдең күңеленә лә рухи орлоҡтар ултыртаһың, уларҙың ҡайһыларынан шунда уҡ яңы идеялар шытып сыға, ҡайһылары шул көйөнсә ҡала ла, бик күп ваҡыт үткәс кенә тормошҡа аша.

Йәйге ваҡытта, иртүк тороу менән, тәүҙә үҙем һыуыҡ һыу менән ҡойонам, унан баҡсама һыу һибәм. Эш менән булғанда башыңа йыш ҡына төрлө фәлсәфәүи уйҙар килә: кеше һәм тормош, кеше һәм ер, мәңгелек хаҡында осо-ҡырыйы булмаҫтай фекерләүҙәргә сумаһың. Ошо ергә бер кем дә мәңгелеккә килмәгән: миңә тиклем булғандар, минән һуң да ҡалырҙар.

Йомғаҡлап әйткәндә, баҡса тотоуҙың маҡсаты күп яҡлы: беренсенән, үҙең рухи ҡәнәғәтлек табаһың, икенсенән, балаларға тәрбиә бирәһең, өсөнсөнән, хеҙмәтеңдең уңышы - алдағы көндәреңдә тамаҡ туйҙырыр матди файҙа. Шулай уҡ, алдыңа маҡсат итеп алмаһаң да, һин күрше-күлән, ауылдаштарың өсөн өлгө булып тораһың бит.

## БАЙРАМ УҢАЙЫНАН

# КЕШЕЛЕК БИТ ХЕҘМӘТТӘН БАШЛАНА!




**Боронғо дини риүәйәттәргә ярашлы, әҙәми заттар ер йөҙөндә тереклек итә алһын өсөн уларға бер шарт ҡуйыла: ул да булһа - ейер ризыҡ табыу маҡсатында маңлай тирен түгеп, төрлө эштәр башҡарыу.**

Ошо күҙлектән ҡарағанда, мәҫәлән, Тәүрат тәғлимәтендә, кешенең хеҙмәт менән йәшәргә мәжбүр ителеүе уға бирелгән яза, тип тә аңлатыла. Әгәр хеҙмәт яза ысулы икән, кеше унан ҡурҡырға, яфаланырға, ғазапланырға тейеш бит. Ә ысынбарлыҡта кешеләрҙең күпселеге үҙҙәре һайлаған, теләп башҡарған эш-шөғөлдәренән ҡәнәғәтләнеү таба, уның һөҙөмтәләрен күреп ҡыуана, хатта ләззәт тойғоһон да кисерә.

**(Дауамы 7-се биттә).**

## КӨН ТЕМАҺЫ

# САЛАУАТЫБЫҘ ҺӘЙКӘЛЕ ТУРАҺЫНДА



**Үткән аҙнала республика Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә Башҡортостандың милли геройы Салауат Юлаевҡа һәйкәлде реставрациялау барышын ҡараны һәм Башҡортостан юлдаш телеканалына биргән интервьюһында монументты реставрациялау барышы хаҡында һөйләне, уны тергеҙеү варианттарын билдәләне.**

- Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау барышын тағы бер тапҡыр иғтибар менән ҡарарға булдым, - тине Радий Фәрит улы. - Бөгөн минең менән бергә реставряциялау цехында ҙур комиссия эшләне, һәм мин, һәйкәлде реставрациялау тураһында ҡарарҙы ваҡытында ҡабул иткәнбеҙ, тип әйтергә теләйем. Ни өсөн? Сөнки һәйкәл бик ҡатмарлы, хатта хәүефле хәлдә. Шуға күрә, һәйкәлде яңыртыу кәрәклеге тураһындағы ҡарарыбыҙ бик дөрөҫ булды. Беҙ һәйкәлһеҙ ҡалыр инек. Барыһы ла ваҡытҡа ғына бәйле булған. Шуға күрә халыҡтың да, йәмәғәтселектең дә беҙҙе хуплауҙары өсөн рәхмәт.

Икенсенән. Һәйкәлдең торошо бик насар. Мин быны беҙгә был эшкә ҡеүәт өҫтәү кәрәклеген аңлар өсөн һөйләйем. Уның менән бик етди шөғөлләнергә кәрәк. Ниндәйҙер деталдәрҙе яҡындан ҡараһаҡ, мәҫәлән, ҡойроҡтан киҫәктәр ҡубып төшөп бара тиерлек. Ҡулы ла, һәйкәлдең аҫҡы өлөшө лә бик ҡатмарлы хәлдә. Ә эстә барыһы ла, әйтеүебеҙсә, сереп бөткән.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**1 Май – Яҙ һәм хеҙмәт байрамы. Ә һеҙ физик эш менән дуҫмы, ниндәй шөғөлдән ҡәнәғәтлек алып йәшәйһегеҙ?**

***Рәйсә МӨФТИЕВА, Әлшәй районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** 94 йәшкә тиклем йәшәгән әсәйем һуҙҙәре менән әйткәндә, өлкәнәйә килә, ҡан баҫымы күтәрелә, аяҡ-ҡулдар ойой башлай, ә эшкә әүрәп, йәштәр ыңғайына йүгереп йөрөһәң, тормоштоң йәмен тойоп йәшәйһен, заман менән бергә атлағандай булаһың. Быйылғы яҙ иҫ китерлек матур килә: йәшел үләндәр сыҡты, ҡояш балҡып тора, шул форсаттан етмеш бройлер тауығы алғанмын, уларҙы йылы ояға урынлаштырып, тәрбиәләп торам. Унан башҡа утыҙ баш йорт тауығы ҡыш сыҡты, йомортҡалары үҙебеҙгә лә, күрше-тирә менән бүлешер өсөн дә етерлек, Аллаға шөкөр.

Беҙҙең ағинәйҙәребеҙ бөтәһе лә ауыл ерендә ғүмер итә, барыһы ла эш менән мәшғүл, милли йолаларыбыҙҙы тергеҙеүҙә әүҙемдәр. Гөлсәсәк апай Сәйетғәлиева беҙгә үҙебеҙҙең Дим буйы башҡорттарына хас кейемдәр тегеп, ерене еткереп һаҡлаҡашмауҙар эшләне. Балаҫ һуғыу - беҙҙең бренд, ә Зәкирә Воронцова беҙҙең районда иң оҫта балаҫ һуғыусы тиһәң, һис тә арттырыу булмаҫ. Үткән йылды ғына башҡорт балаҫына патент алып ҡайттыҡ. Шул уҡ ваҡытта ул гөрләтеп донъя көткән, ейән-ейәнсәрҙәрен ҡараусы яғымлы өләсәй ҙә. Ә милли биҙәүестәр эшләү оҫтаһы Фәнүрә Нәжметдин ҡыҙы бик күп оҫталыҡ дәрестәре үткәрә. 78 һигеҙ йәшен тултырған ағинәй Гөлнур Хаммат ҡыҙы, Ҡармыш ауылынан Люция Зәйнулла ҡыҙы - бик оҫта умартасы ҡатындар. Фәнүрә Зәкирйән ҡыҙы - быйма баҫыу, кейеҙҙән төрлә әйберҙәр: балаҫ, мунсаҡтар, хатта түбәтәйҙәр эшләүсе алтын ҡуллы ағинәй. Улар барыһы ла совет тәрбиәһе алған, ҡул ҡаушарып ултыра белмәгән, хеҙмәттән тәм тапҡан, күнелдәре менән йәш булып ҡалған, абруйлы апайҙар. Унан һуң, Әлшәй районының һәр бер ауылында ағинәйҙәр бергә тупланып, МХО-ла ил тыныслығын һаҡлаусы һалдаттарыбыҙға билбауҙар, тыуған еребеҙҙә үҫкән үләндәрҙән сәйҙәр әҙерләп, һаҡ селтәрҙәре үреп ебәреп торалар.

Минең үҙемдең шөғөлдәремә килгәндә, февраль айы етеү менән миндә йыл һайын "үҫентеләр ауырыуы" башлана. Әле тәҙрә төптәре тулы болгар боросо, помидорҙар гөрләп үҫеп килә. Ялпа, юл буйҙарына сығарып ултыртыр өсөн йәйелеп үҫә торған бик күп төрл сәскә үҫентеләре үҙ ваҡытын көтә.

Үҙемдә электән алып ер эшенә мөкиббән киткән баҡсасы тип иҫәпләйем, шуғалыр ҙа, ихатамды йыл һайын емештәре менән ҡыуандырып торған энәлек, абрикос, ирга, ике төр слива кеүек бик күп ағастар уратып алған. 1987 йылда ултыртҡан ете алма ағасының өсөүһе әле һаман яҙҙарын ап-аҡ сәскәгә күмелә. Ағастар мул уңыш бирһен өсөн көҙҙән ҡороған ботаҡтарын киҫеп, ҡойолған япраҡтарын даими тырматып, яҙ көнө олондарын аҡлап, ҡырмыҫҡа баҫмаһын өсөн махсус елем һөртөп торһаң, ҡыҫҡаһы, тейешле кимәлдә тәрбиәләһәң, улар һине лә шатландырасаҡ. Мәҫәлән, энәлектең йыйылып, эшкәртелмәй ҡалған емештәренән ҡоштарға ла өлөш сыға, улар һыйланған һайын һинә лә сауап яҙыла бит. Был гүзәл донъяға шатланып, изге ниәтле булып, хеҙмәт тәмен татып йәшәһәң генә күңел тынцлығы табып булалыр, тип уйлайым.

---

## РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# БАЛАЛАР ТЫУЫП ТОРҺОН!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең һәм Стратегик башланғыстар агентлығының "Башҡортостанда ғаиләгә, тыуымға һәм күп балалыҡҡа булышлыҡ итеү, демография сәйәсәтен камиллаштырыу" проект-аналитик сессияһында ҡатнашып, демография өлкәһендә даими пропагандалау системаһын формалаштырыу буйынса әүҙем эш башланыуын белдерҙе.**

"Республикабыҙҙа тыуым һәм үлем кимәлен сағылдырған күрһәткестәрҙең мөһимлеген аңлайбыҙ. Улар төбәк менән идара итеү һөҙөмтәлелегенең төп индикаторҙары булып тора. Беҙҙә демографик хәл ҡатмарлы. Ҡайһы бер күрһәткестәр бала табыу йәшендәге ҡатын-ҡыҙҙар араһында тыуым кимәленең кәмеүен күрһәтә. Был проблема етди иғтибар һәм етди ҡарарҙар талап итә. Хәлгә йоғонто яһаған меңләгән сәбәп бар, әммә мөһимдәренең береһе - тыуымдың кәмеүе. Оҙайлы һәм индивидуаль эш көтөлә. Кешеләр нормаль ғаиләләрҙә, уңайлы мөхиттә йәшәргә теләй. Иҡтисади тотороҡлоҡ, эш булыуы, социаль инфраструктура - мәктәптәр, балалар баҡсалары, һаулыҡ һаҡлау - быларҙың барыһы ла халыҡты үҫтереү өсөн төп шарттар булдыра. Әүҙем йәштәр йәшәү һәм үҫеш өсөн уңайлы шарттар булдырылған төбәктәрҙә ҡала", - тине Радий Хәбиров.

Уның һүҙҙәренсә, ҡатын-ҡыҙҙар консультацияларының инфраструктураһына ла иғтибар итергә кәрәк. Һуңғы ике йылда республикала 15 ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы асылды. "Ғаилә" милли проекты ярҙамында төбәктә перинаталь үҙәктәр яңыртылды. Яңы тыуған балаларҙы ҡарау буйынса алдынғы технологиялар индерелде. "Һәр учреждениеның яҙмышын өс нәмә хәл итә: беренсеһе - кадрҙар, икенсеһе - ошо кадрҙарҙың эш процесы, өсөнсөһө - уларҙың пациенттар менән аралашыуы. Перинаталь үҙәктәр яҡшы эш башҡара, был сабыйҙар үлеме күрһәткестәрендә лә сағылыш таба. Хәҙер ул элеккегә ҡарағанда дүрт тапҡырға кәмерәк. Башта күрһәткестәр юғары ине", - тине Радий Хәбиров.

Әйткәндәй, бөгөн Башҡортостанда 74 меңдән ашыу ишле ғаилә йәшәй. Республикала 200 меңдән ашыу балалы ғаилә 50-гә яҡын ярҙам сараһы ала.

# ИНФЛЯЦИЯ НИСЕК БУЛДЫ?

**Башҡортостанда инфляция февралдән бирле үҙгәрмәгән. Мартта йыллыҡ инфляция февраль айындағы кеүек үк ҡалған - 6,1 процент, ә айға 0,5 процент өҫтәлгән.**

Мартта республикала хаҡтар февралдәгегә ҡарағанда әкренерәк арткан. Шул уҡ ваҡытта йыллыҡ инфляция үҙгәрмәгән тиерлек һәм 6,1 процент кимәлендә булған, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Милли банкынан. Яҙ башында инфляцияның әкренәйеүенә республикала ял итеүгә хаҡтарҙың түбәнәйеүе нык йоғонто яһаны. Көндәрҙең аномаль йылы тороуына бәйле тау саңғыһында шыуыу миҙгеле иртә тамамланды.

Ғөмүмән, яҙҙың беренсе айында хеҙмәттәр аҙыҡ-түлеккә һәм аҙыҡ-түлеккә ҡарамаған тауарҙарға ҡарағанда нығыраҡ ҡиммәтләнде. Трамвай һәм троллейбуста йөрөү хаҡы һиҙелерлек артты. Тарифтарҙы индексациялау ташыусыларҙың сығымдары артыуына бәйле. Йомортҡа, шәкәр хаҡы ла юғары. Шул уҡ ваҡытта һөт етештереүҙең артыуы аҡ майға һәм һөт продукцияһына хаҡтарҙың түбәнәйеүенә килтерҙе. Һорауҙың кәмеүе арҡаһында эре көнкүреш техникаһы арзанайҙы. Смартфондар, ноутбуктар, компьютерҙар, кереһенсә, ҡиммәтләнде. Компоненттарҙың етешмәүе тәьҫир итте: етештереүселәр ресурстарҙы яһалма интеллект технологияларын үҫтереүгә йүнәлтте.

Дөйөм алғанда, ил буйынса йыллыҡ инфляция 5,9 процент тәшкил итте. Хаҡтарҙың артыуына юл ҡуймау өсөн һорау тауарҙар һәм хеҙмәттәр тәҡдим итеү мөмкинлектәренә тағы ла ныҒыраҡ тап килергә тейеш. Рәсәй банкы фаразы буйынса, 2026 йылда илдә йыллыҡ инфляцияның 4,5-5,5 процентҡа тиклем, ә 2027 йылда маҡсатлы 4 процентҡа тиклем төшөүе көтөлә.

# БЕҘҘЕҢ ЕГЕТТӘР!

**Өфөнән билдәле боксер Артур Собханғолов донъя чемпионы титулына дәғүәсе булды. Ул баш ҡала үткән 12 раундлыҡ ауыр алышта Тажикстандан донъя чемпионатының бронза призеры, Олимпиадала ҡатнашыусы Баходур Усмановты нокаутка ебәрҙе.**

Хөкүмәт кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров спортсыға Салауат Юлаев орденын тапшырҙы. Ә фехтование буйынса Рәсәй чемпионатында алтын миҙал һәм икенсе урын яулаусы Аделина Заһиҙуллина менән Владислав Журавлев республика Башлығының Маҡтау ҡағыҙына лайыҡ булды.

Төбәк етәксеһе спортсыларға уңыштары өсөн рәхмәт белдерҙе. Олимпия уйындары чемпионы Аделина Заһиҙуллина республика Башлығына үҙенең Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылына арналған "Башҡортостан спорты тураһында" исемле китабын бүләк итте. "Беҙ һеҙгә спорт объекттары төҙөләүе һәм беҙҙең заманса Фехтование үҙәге өсөн рәхмәт белдерәбеҙ. Ул Рәсәй төбәктәрендә иң яҡшыларҙан һанала. Унда күнекмәләр үткәреү, һаулыҡты нығытыу өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған. Беҙ республиканың ярҙамын тоябыҙ", - тине Аделина Заһиҙуллина.

# КҮПМЕ ҮҘГӘРТЕРГӘ БУЛА!

**Федерация Советында мәктәптә ун йыллыҡ уҡыуға күсеү тураһындағы имеш мимештәрҙе кире ҡаҡтылар. Был хаҡта Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова белдерҙе.**

- Мәктәптә уҡыуҙы ҡыҫҡартыу инициативаһы әлегә иртә, сөнки ул төҙөлгән белем биреү стратегияһын емерергә мөмкин, тине ул. 11 йыллыҡ уҡыуға күсеү ҙә үҙ ваҡытында ауыр булды, әммә ил уны кисерҙе. Хәҙер мәғарифты үҫтереү стратегияһы әҙерләнгән һәм эшләй, унда бөтә алымдар һәм маҡсатлы күрһәткестәр яҙылған. Беҙ берҙәм тәрбиә-белем биреү киңлеген, дәреслектәрҙең берҙәм системаһын булдырҙыҡ, белем биреүҙең мәктәпкәсә, мәктәп, һөнәри баҫҡыстары бар. Шуға күрә системаны ватыу күпкә ҡиммәтерәк буласаҡ, - тип аңлата Лилиә Ғүмәрова.

Бынан алда Йәмәғәт палатаһында Рәсәй Фәндәр академияһы башлығы Геннадий Красников СССР-ҙа ун йыллыҡ уҡытыу системаһы ғәмәлдә булыуын белдереп, 10 йыллыҡ уҡытыуға ҡайтыу, шул иҫәптән беренсе баланың уртаса тыуыу йәшен кәметеү исулы тураһында тәҡдимдәр менән сығыш яһағайны. Әммә Рәсәйҙең Мәғариф министры Сергей Кравцов ведомствоның уҡыу ваҡытын үҙгәртеү буйынса планы юҡлығын, 11 йыллыҡ программа оптималь тип иҫәпләнеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Лилиә Ғүмәрова әйтеүенсә, һәр үҙгәреш ентекле әҙерлек талап итә, ә хәҙер бөтә көс башланған реформаларҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән.

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Башлығы Хакимиәтендә Өфө мэры Ратмир Мәүлиевтың ҡулға алыныуына аңлатма бирҙеләр. Ул вазифа вәкәләттәрен арттырыуҙа һәм ҙур күләмдә ришүәт алыуҙа ғәйепләнә. Республика Башлығы Өфө хакимиәте етәкселегә тирәләй барған хәл-вакиғалар тураһында белә. Хоҡуҡ һаҡлау органдары процессуаль ғәмәлдәр комплексын үткәрә, уларҙың һөҙөмтәләре буйынса ҡаралған эштең шарттарына һәр яҡлап һәм объектив баһа биреләсәк.

✓ Өфө ҡала Советы рәйесе Марат Вәсимов 29 апрелдә бишенсе саҡырылыш ҡала округы Советы ултырышында баш ҡала бүлексәләренең штат режимында эшләүе хаҡында хәбәр итте. "Әлеге ваҡытта хоҡуҡ һаҡлау органдары ҡала хакимиәте етәкселегенә ҡарата процессуаль ғәмәлдәр башҡара - уларҙың һөҙөмтәләре буйынса объектив хоҡуки баһа биреләсәк, - тине ул. - Хәҙер иң мөһиме - ҡала идаралығының тотороҡлоғон һаҡлау. Бөтә бүлексәләрҙең урынбаҫарҙарына һәм етәкселәренә штат режимында эшләргә, ҡала халҡы алдындағы бурыстарҙы аныҡ үтәргә кәрәк".

✓ Башҡортостанда "Йәшәү өсөн инфраструктура" милли проекты сиктәрендә быйыл 12 популяр туристик объектҡа юлдар ремонтлана, тип хәбәр иттеләр республиканың Транспорт министрлығынан. Шул иҫәптән "Абҙаҡ" тау саңғыһы курортына, Атыш шарлауығына һәм Көньяҡ-Урал ҡурсаулығына илткән Өфө - Инйәр - Белорет трассаһының 6 километрына. Шулай уҡ был миҙгелдә Красноусол шифаханаһына, һыу сығанаҡтарына һәм Богородица-Табын ҡатын-ҡыҙҙар монастырына бара торған Талбазы - Красноусол юлының 7,5 километрын; Верхотор баҡыр иретеү заводына илткән Ишембай - Воскресенск - Мәләүез юлының 1,5 саҡрымын төҙөкләндереү планлаштырыла.

✓ Башҡорт дәүләт педагогия университеты - Рәсәйҙә ҡырғыҙ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары әҙерләгән берҙән-бер юғары уҡыу йорто. Ошо көндәрҙә бында Рәсәйҙең һәм Ҡырғыҙстандың мәғариф системаһы хеҙмәткәрҙәренең практикумы асылды. Практикумдың төп маҡсаты - педагогтарҙың профессиональ үҫешенә ҡағылышлы мөһим мәсьәләләрҙе тикшереү. Уны асыу тантанаһында ҡунаҡтарҙы Аҡмулла университеты ректоры Салауат Сәғитов сәләмләне. "Беҙ Ҡырғыҙстан, Төньяҡ Кавказ республикалары менән даими хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Әммә был тәжрибә айырыуса үҙенсәлекле, сөнки унда абруйлы ҡунаҡтар - Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцовтың һәм Ҡырғыҙстандың мәғариф министры Догдуркул Кендирбаеваның килеүе көтөлә", - тип билдәләне ректор.

***✓ Был ҡарарҙы ҡабул итеүҙе үҙ өҫтөмә генә алмаясаҡмын. Һәйкәл барыбыҙға ла бик ҡәҙерле. Шуға күрә бында, минеңсә, беҙҙең белгестәр ҙә, кешеләр ҙә, йәмәғәт ойошмалары ла үҙ фекерҙәрен еткерергә тейеш.***



КӨН ТЕМАҺЫ

# САЛАУАТЫБЫҘ ҺӘЙКӘЛЕ ТУРАҺЫНДА



**(Башы 1-се биттә).**

Өсөнсөнән. Әлбиттә, һәйкәлде тергеҙәсәкбеҙ. Быны мотлаҡ эшләйбеҙ. Әммә барыбыҙға ла хәҙерҙән үк һәйкәлде ҡарарға тейеш буласағыбыҙ тураһында уйларға кәрәк. Һәр һәйкәл тәрбиә талап итә, һәм был эш менән ниндәйҙер коммуналь структура шөғөлләнергә тейеш түгел. Беҙ әле күҙәткән бөтә хаталарҙы аңлап, киләсәктә уны тәрбиәләү менән махсус компания шөғөлләнергә тейеш.

Артабан иң ҡатмарлы һорауҙар тыуа. Был һәйкәл менән шөғөлләнеүселәрҙең барыһы ла, әлбиттә, уның ысын шедевр булыуынан сығып эш итә. Бына беҙ аттың башы эргәһендә үк торабыҙ һәм бөтә деталдәрҙе күрәбеҙ. Ә Салауат Юлаевтың йөҙөнөң һәм тотош образдың ентекле эшләнешенә иғтибар иткәндә уның тулыһынса кителеп төшкәнен һәм уны йәбештереп кенә ҡуйғандар икәнен абайлайбыҙ. Бында ла эш ваҡыт менән генә бәйле булған, сөнки иретеп йәбештерелгән урын коррозияға дусар була. Суйындың сифаты бик яҡшы булмаған, һәм бында ҡот осҡос бер ни ҙә юҡ. Һәйкәлдең ниндәй ваҡытта ҡойолоуын иҫкә төшөрәйек. Республикабыҙ халҡы Сосланбәк Тавасиевҡа беҙгә ошондай шедевр бүләк иткәне өсөн һәр ваҡыт рәхмәтле буласаҡ. Башҡа заман, ҡатмарлы осор булыуға ҡарамаҫтан.

Артабан нимә эшләүебеҙ тураһында. Һәйкәлдең торошо беҙ уйлағандан насарыраҡ. Шуға күрә бында төплөрәк ҡарар талап ителә. Артабан ни булыуы мөмкин? Ике вариант бар. Беренсе вариант, беҙ һайлаған юл - һәйкәлде нисек бар, шулай реставрациялау. Әммә әле беҙҙең контракт сиктәрендә эшләгән реставраторҙар, нигеҙҙә, һәйкәлдең тышҡы ҡатламының яҡынса 60-70 проценты яңынан ҡойоласаҡ, тиҙәр. Тотош һәйкәл, ғөмүмән, 60-тан ашыу элементтан тора. Хәҙер күҙ алдына килтерегеҙ: төп өҫкө ҡатлам деталдәре яңынан ҡойола. Был яңы суйындан яңы деталдәр алып килеп, уларҙы йыясаҡбыҙ, тигән һүҙ. Эс яҡтан тотоп торған бөтә нығытмаларҙы тиерлек болттар менән яңыртырға кәрәк, был да аңлашыла. Был эш ваҡытында була торған хәл, бөтә реставрациялар шулай башҡарыла, һәм был йәһәттән бер ниндәй ҙә һорауҙар юҡ. Һәм был юл быға тиклем булған һәйкәлде тергеҙеүебеҙгә килтерәсәк. Был һәйкәлде ҡуйһаҡ, әлбиттә, шәхсән минең өсөн барыбер хәүеф тыуҙырасаҡ. Мин артабан нимә булыры өсөн яуаплы. Беҙ уны йыябыҙ, әммә иҫке суйын ҡала бит. Мин һеҙгә уның бар урында ла тиерлек сатнауын күрһәттем. Ә әгәр ул онталһа? Бер осраҡ та етә. Ә һәйкәл иҫ киткес урында, тау битләүендә урынлашҡан һәм даими рәүештә төрлө елдәргә дусар.

Шуға күрә ниндәй вариант бар? Бронзанан тап шундай уҡ яңы һәйкәл ҡойоу һәм уны һәйкәлдең элекке урынына ҡуйыу. Нигеҙҙә, беҙ бөтә документтарҙы ҡалҡыттыҡ. Мин һәйкәл ҡуйылғанға тиклем 20 йыл элекке тиерлек 1947 йылғы документты күрҙем. Һәйкәлде бронзанан эшләргә ниәтләгән булғандар. Бронза - коррозияға бирешеп бармаған, ныҡлыраҡ материал. Нигеҙҙә, бындай масштабтағы төп скульптуралар бронзанан эшләнә. Бына был урында материалдың ҡалынлығы 2,5-3 сантиметрға етә, ә ҡайҙалыр 0,8 сантиметр ғына Ә ул осраҡта бар ерҙә лә тигеҙ була, белгестәр әйтеүенсә, яҡынса 1 сантиметр. Шуға күрә һәйкәлде бронзанан ҡойоу яҡшы буласаҡ. Һәм ныҡлығы буйынса ул 100, 200, 300 йылға иҫәп тотола.

Ул саҡта был һәйкәлде нимә эшләтергә? Был мәҙәни мираҫ объекты. Ул да йыйыла һәм һаҡлана. Әммә уның һәр төрлө ел, климат, температура режимдарына нығыраҡ бирешеүен иҫәпкә алып, Өфөлә ниндәйҙер урында ҡуйырға һәм матур быяла ябыу менән ҡапларға тигән вариант бар. Был осраҡта кешеләр уның янына килә һәм яҡындан күрә аласаҡ.

Был тәҡдим булараҡ тыуған ҡараш, фараздарҙың береһе. Был ҡарарҙы ҡабул итеүҙе үҙ өҫтөмә генә алмаясаҡмын. Ғәҙәттә, мин һәр ваҡыт үҙем ҡарар ҡабул итәм. Әммә һәйкәл барыбыҙға ла бик ҡәҙерле. Шуға күрә бында, минеңсә, беҙҙең белгестәр ҙә, кешеләр ҙә, йәмәғәт ойошмалары ла үҙ фекерҙәрен еткерергә тейеш.

Тағы бер тапҡыр әйтәм: һәйкәлдең насар хәлдә булыуын аңлай инек. Әммә ул беҙ уйлағандан күпкә хәүефлерәк. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе ҡотҡарҙы һәм уны урынынан ваҡытында алыуға йүнәлтте. Юғиһә, беҙ һәйкәлһеҙ ҡалыр инек, һәм ул киҫәктәргә таралып төшөр ине.

Шуға күрә уйларға кәрәк. Минең был хаҡта халыҡҡа еткергем килде, сөнки бик мөһим, бик кәрәкле тема. Нигеҙҙә, беҙ сроктарҙы билдәләнек, һәм ошо ваҡыт сиктәрендә эш итергә ниәтләйбеҙ. Һүҙ 2027 йылдың апреле тураһында бара.

Беҙ бит биләмәне лә яңыртырға тейешбеҙ. Яңы һәйкәл ҡуябыҙ, постамент торған ҡалҡыулыҡты нығытабыҙ. Тотош биләмәне лә шулай уҡ тәртипкә килтерергә кәрәк. Шуға күрә беҙ унда хәҙерҙән аҡса бүләбеҙ һәм, нигеҙҙә, әкренләп майҙанда, фонтан урынында айырым эштәрҙе башлайбыҙ, инженер коммуникацияларын күсерәбеҙ һ.б.

Бына ошондай хәл. Һәйкәл өсөн ниндәйҙер бик дөрөҫ һәм уның яҙмышын хәл иткес, тип әйтер инем, ҡарар ҡабул итергә кәрәк. Был халыҡ символы, Өфө символы, Башҡортостан символы. Ул бик ҡәҙерле.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ЙӘШТӘР - ХӘРБИ УҠЫУҘАРҘА



**Өфө фән һәм технологиялар университетының хәрби уҡыуҙар үҙәгендә "Пилотһыҙ осоу аппараты операторы" белгеслеге буйынса уҡыуҙар дауам итә.**

"Пилотһыҙ авиация системалары" милли проектының "Пилотһыҙ авиация системалары өсөн кадрҙар" федераль проектына (федеральный проект "Кадры для беспилотных авиационных систем" национального проекта "Беспилотные авиационные системы") ярашлы, студенттар төрлө типтағы пилотһыҙ осоу аппараттарына идара итергә һәм дрондарҙы хеҙмәтләндерергә өйрәнә. Был хаҡта республиканың Сәнәғәт һәм энергетика министрлығынан хәбәр иттеләр. Программа комплекслы уҡыуҙы тәьмин итә: студенттар төрлө типтағы пилотһыҙ осоу аппараттарын идара итергә өйрәнеп кенә ҡалмай, уларҙы шулай уҡ ялан шарттарында хеҙмәтләндерергә өйрәнә. "Программа баштан алып тулыһынса, хәрби хәрәкәттәр тәжрибәһен һәм осоу буйынса белемен иҫәпкә алып, эшләнгән. Быға тиклемге вазифам самолетта штурман булды, шуға күрә программаны төҙөгәндә барлыҡ үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алдым", - тип хәбәр итте Өфө фән һәм технологиялар университетының радиоэлектроника ҡорамалдары кафедраһы уҡытыусыһы Павел Морозов.

Уҡыу үҙәгендә FPV дрондар һәм разведкалау, күҙәтеү өсөн пилотһыҙ осоу аппараттары бар. Курсты тамамлағас, август аҙағында пилотһыҙ осоу аппараттары операторы таныҡлығын аласаҡтар. Ошонан һуң белгестәр Рәсәй Оборона министрлығының мобилизациялау резервына алынасаҡ. Алынған белемде граждандар өлкәһендә - ауыл хужалығында, төҙөлөштә һәм авария-һәләкәттәрҙән ҡотҡарыу хеҙмәтендә - файҙаланып буласаҡ.

Әйткәндәй, студенттар, академик отпуск алып, контракт төҙөй ала. Уларға хеҙмәте тамамланғас, кире бюджет нигеҙендә уҡырға ҡайтыу хоҡуғы бирелә. БПЛА операторҙары өсөн башҡа яугирҙарға тәғәйен кеүек үк, түләүҙәр, льготалар, социаль гарантиялар ҡаралған. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер өҫтөнлөктәр ҙә бар. Контракт бер йылға, йәки унан күберәк ваҡытҡа төҙөлә. Күрһәтелгән мөҙҙәт тамамланғас, хеҙмәттән китергә йәки уны оҙайтырға мөмкин. Оборона министрының бойороғона ярашлы, хәрби хеҙмәткәрҙе уның ризалығынан тыш пилотһыҙ осоу аппараттарына идара итеүгә бәйле булмаған башҡа һөнәргә йәки икенсе ғәскәр төрөнә күсереү тыйыла.

Контрактта билдәләнгән аҡсаға өҫтәп, дошман позицияһына, техникаһына уңышлы һөжүм иткән өсөн 50 меңдән 500 мең һумға тиклем аҡсалата премия яҙыла. Әйтәйек, Leopard, Abrams, Challenger танкыларын юҡ итеү 500 мең һум премия менән баһалана.

Хеҙмәткә 18 йәштән 35 йәшкә тиклемге ир-егеттәр алына. Шулай уҡ 45 йәшкә тиклемге йәштәгеләр водитель, сапер, ашнаҡсы кеүек хәрби һөнәр буйынса ҡарала. Әлбиттә, физик яҡтан һәм һаулыҡ торошо буйынса хәрби хеҙмәткә яраҡлы булыу мотлаҡ.

Контракт төҙөү өсөн үҙең йәшәгән урын буйынса хәрби комиссариатҡа, йәки Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пунктына (Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156) мөрәжәғәт итергә мөмкин. Шулай уҡ "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында ғариза ҡалдырырға була.

**Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Үткән дүшәмбелә Мәскәүҙе ҡар баҫҡан. Апрель аҙағында илдең баш ҡалаһына йәнә ҡыш килде, ҡар яуҙы. Башҡортостанда ла тәбиғәт үҙенең көйһөҙлөгөн күрһәтерме, тип борсола республикала йәшәүселәр. Башгидрометүҙәк синоптиктары тынысландырырға ашыға - төбәктә ҡар яуыуы көтөлмәй. "Мәскәүҙә һауа торошон билдәләгән циклон Көньяҡ Уралға килеп етмәй, төньяҡ-көнсығышҡа китә", - тине Башгидрометтың метеофараздар бүлеге етәксеһе Гөлназ Заһитова.

✓ 24 апрелдә Рәсәй банкының директорҙар советы төп ставканы йылына 14,50 процентҡа тиклем кәметергә хәл итте. Эске ихтыяж динамикаһы тауарҙар һәм хеҙмәттәр тәҡдимен киңәйтеү мөмкинлектәренә яҡынлашты, тип билдәләнә. Шул уҡ ваҡытта хаҡтарҙың тотороҡло үҫеше күрһәткестәре әлегә кәмемәй һәм, Рәсәй банкы баһаһы буйынса, бер йылға иҫәпләгәндә 4-5 процент тирәһендә ҡала. Шул уҡ ваҡытта тышҡы шарттар һәм бюджет сәйәсәте параметрҙары яғынан билдәһеҙлек һаҡлана. Рәсәй банкы киләһе ултырыштарҙа төп ставканы артабан кәметеүҙең маҡсатҡа ярашлылығын баһалаясаҡ.

✓ Башҡортостандан МХО-ла ҡатнашыусы шәфҡәт туташы Ләйсән Ергизова хәрби хәрәкәттәр ваҡытында күрһәткән батырлығы өсөн дәүләт наградаһына тәҡдим ителде. Билдәле булыуынса, хәрби хеҙмәткәр шәфҡәт туташы булып эшләй. Медицина батальонының кесе сержанты Ергизова дошман сираттағы тапҡыр утҡа тотҡанда үҙенең посын ҡалдырып итмәй һәм яраланған яугирҙарға хирургик ярҙам күрһәтә.

✓ Башҡортостандың Тәтешле районы муниципаль район советы ҡарары менән Солтанов Денис Айрат улы контракт буйынса район хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем ул район хакимиәтенең эштәр идарасыһы булып эшләне. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика етәксеһе Радий Хәбиров белдерҙе.

✓ Башҡортостанда "Еңеү диктанты" халыҡ-ара акцияһы быйыл 8-се тапҡыр ойошторолдо. Акцияны ойоштороусылар - "Берҙәм Рәсәй" партияһы, Рәсәй тарихи һәм Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте, "Еңеү ирекмәндәре" хәрәкәте һәм башҡалар. Республика Башлығы ни өсөн диктантта ҡатнашыуҙың мөһим булыуын аңлатты. "Тәү сиратта диктант - 1945 йылда Еңеү яулаған ветерандарыбыҙға, киләсәк быуындар өсөн ғүмерен ҡорбан иткән ата-бабаларыбыҙға хөрмәт билдәһе, - тине Радий Хәбиров. -Илебеҙҙең героик үткәнен, яҡташтарыбыҙҙың ҡаһарманлығын хәтерләйбеҙ. Һәм бер ҡасан да онотмаҫбыҙ".

✓ *Рәсәйҙә 1 майҙан коммуналь хеҙмәттәр өсөн иҫәп-хисап йәһәтенән асыҡлыҡты көсәйтеү, торлаҡ хужалары менән идарасы компаниялар мөнәсәбәттәрен көйләү һәм ресурстарҙы ғәҙел бүлеү мәсьәләләренә контроль көсәйтелә.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЯУГИРҘАР ХӘСТӘРЛЕ

**МХО-ла һәләк булған яугирҙарҙың тол ҡатындары вузға бушлай уҡырға инергә мөмкин. 2026 йылдың 25 апрелендә Рәсәй Президенты Владимир Путин ошо турала законға ҡул ҡуйҙы.**

Рәсәй Федерацияһының Мәғариф тураһында федераль законындағы үҙгәрештәр МХО-ла һәләк булған яугирҙарҙың тол ҡатындарына (тол ирҙәренә) ҡағыла - хәҙер улар имтиханһыҙ айырым квота буйынса бушлай юғары йәки урта махсус белем алыу хоҡуғына эйә. Әйткәндәй, был хоҡуҡтан ҡабаттан никахҡа инмәгән тол ҡатындар ғына файҙалана ала. "Башланғыс һәләк булған МХО яугирҙарының, Донбасс ополченецтарының һәм башҡа дәүләттәрҙең биләмәләрендә хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусыларҙың ҡабаттан кейәүгә сыҡмаған ҡатындарына ҡағыла", - тине Федерация Советының социаль комитеты башлығы урынбаҫары Дарья Лантратова.

Закон Махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың һәм уларҙың ғаилә ағзаларының хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәттәрен тәьмин итеү буйынса төркөм сиктәрендә әҙерләнде. Инициатива авторҙары һүҙҙәренсә, һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ҡатындары социаль яҡтан ауыр хәлдә ҡала: ҡараусыны юғалтыу эшкә урынлашыуҙы күҙ уңында тота, бының өсөн тейешле белем һәм әҙерлек талап ителә.

**Һәм тағы.** Башҡортостанда етем бала статусына эйә булған Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға сиратһыҙ фатир бирелә. Был законды депутаттар Дәүләт Йыйылышының 32-се ултырышында икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа раҫланы. Закон ике форматты күҙ уңында тота: социаль ҡуртым килешеүе буйынса торлаҡ майҙандарын биреү йәки торлаҡ һатып алыу йәки ипотеканы ҡаплау өсөн аҡса түләү. МХО зонаһында бурыстарҙы үтәгән, шулай уҡ сик буйындағы биләмәләрҙә һөжүмде кире ҡаҡҡан яугирҙар өҫтөнлөккә эйә.

**Әйткәндәй...**

Башҡортостанда йәшәүселәргә БПЛА һөжүм иткән урынды фотоға һәм видеоға төшөрөү, таратыу закон менән ҡәтғи тыйылыуы тураһында иҫкә төшөрҙөләр. Бындай материалдар дошман өсөн разведка мәғлүмәттәре булыуы ихтимал. "Фактчекинг по-башкирски" ТГ-каналы хәбәр итеүенсә, дошман дрондарының Өфөгә һөжүменән һуң ҡайһы бер "һары" телеграм-каналдар террор һөжүме урындарынан видео һәм фотолар һалды. Кадрҙарҙы тиҙ арала ЦИПСО-ның мониторинг ресурстары күҙ уңына алды. Ошо мәғлүмәттәр буйынса дошман пилотһыҙ осоу аппаратының ҡайҙа төшөүен, уны ниндәй система бәреп төшөрөүен күҙәтеп бара, һөжүмдең һөҙөмтәлелеген баһалай. "Махсус хоҡуҡи режим ғәмәлдә булған шарттарҙа был дошманға разведка мәғлүмәттәре тупларға ярҙам итеү тип баһалана", - тиелә баҫмала. Бының өсөн административ штраф һалыу ҡаралған: граждандарға - 3000-5000 һум, вазифалы кешеләргә - 10 000-30 000 һумғ, ойошмаларға - 100 000-500 000 һум. Рәсми мәғлүмәттәрҙе Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы, Оборона министрлығы, хоҡуҡ һаҡлау органдары, төбәк һәм муниципаль властар ғына тарата, тип иҫкә төшөрә белгестәр. Әгәр һөжүмгә шаһит булһағыҙ, фотоға, видеоға төшөрмәгеҙ һәм интернетҡа һалмағыҙ. Телефондағы геолокацияны һүндерегеҙ, тәҙрәнән ситкәрәк китегеҙ һәм махсус хеҙмәттәргә хәбәр итегеҙ.

*БЫЛ АЙҘА*

**Һөйөнсө! Нурлы, байрамлы, ағымлы май - Бөйөк Еңеү айы, тыныс хеҙмәт айы - һабанай килә! Юғиһә, бөгөн беҙ һөйөнсөләргә, ҡыуанырға, шатлыҡ таратырға онотоп та барабыҙ түгелме, йәмәғәт? Ә бит бик тә һөйөнөп, май ҡояшылай көлөп-йылмайып йәшәге килә. Туҡтауһыҙ борсолоуҙар, әсәләрҙең күҙ йәштәре, хәүеф-хәтәрҙән тетрәп тороуҙар, иртәгәһе көнгә ҡурҡып ҡарауҙар арытты, быуынға төштө, күңел төшөнкөлөгөнә этәрҙе. Исмаһам, бөгөнгө көнөбөҙгә, ҡояш яҡтыһына, япраҡҡа төйнәлгән бөрөләргә, тәүге яҙ сәскәләренә, йылы яҡтарҙан ҡайтыусы аҡҡоштарға, һабан турғайына, һайрар ҡоштарға ҡарап йыуанайыҡ: тормош дауам итә, яҙ артынан йәй килә.**

# ҠАУҘЫЛАР ОЯ ҠОРҒАН...



Эйе, яҙҙың һуңғы айы май тәбиғәт уяныуына, яңы, тере тормош башланыуына юл аса, күңелде сафландыра, матур киләсәккә өмөтләндерә. Был айҙа синоптиктарҙың һауа торошон төрлөсә юрауҙарына ла алдан борсолоп тормайыҡ: Хоҙай Тәғәлә ни ҡушһа, шул булыр, бары тик көндәребеҙҙең имен, хәйерле килеүен теләйек. Иң мөһиме, был айҙа киләһе уңышҡа нигеҙ һалына: иген-йәшелсә баҫыуҙарында ла, халыҡтың күҙ терәп торған йорт яны хужалыҡ биләмәләре һәм баҡса участкаларында ла.

***Йәшелсә үҫентеләрен теплицаларына күсереп ултыртыусы һәүәҫкәр баҡсасылар, ғәҙәттә, Ай календары буйынса эш итергә тырыша,*** шуға күрә уларға кәмей барыусы Ай көндәрендә (2-16 май) тамыр аҙыҡтар, картуф, һуған, күп йыллыҡ сәскәләр ултыртыу уңайлы ваҡыт иҫәпләнә. Үҫә барыусы Ай көндәре иһә (16-31 май) помидор, борос, ҡыяр, ҡабак, кәбеҫтә һәм йәшеллек (укроп, петрушка һ.б.) үҫентеләре менән эш итеү хәйерле булыр. Шуныһы ла мәғлүм булһын: астрономдар әйтеүенсә, был айҙа һирәк була торған йыһан күренеше: ике тапҡыр - 1 һәм 31 майҙа тулған айҙы күҙәтеү мөмкинлеге буласаҡ. К.Э. Циолковский исемендәге институт ғалимы аңлатыуынса. "Ай Ер тирәләй 27,3 тәүлек эсендә әйләнә. Ә Ерҙең Ҡояш тирәләй әйләнеүен иҫкә алғанда, әлеге 27,3 тәүлек 29,5 көнгә тиклем оҙая. Шулай итеп, майҙағы 31 календарь көндә тәүге тулы Ай - 1-енә, икенсе тулған Ай 31-енә тап килә."

***Был айҙа беҙҙе ниндәй яңылыҡтар, үҙгәрештәр көтә?*** Иң тәүҙә күп балалы ғаиләләр өсөн һөйөнөслө хәбәр: 22 майҙан бындай ғаиләләрҙә йән башына килем йәшәү минимумынан 10 процентҡа тиклем артығыраҡ булған хәлдә лә, улар берҙәм пособиеға хоҡуҡтарын һаҡлап ҡала ала. Элек иһә ошо сәбәпле пособиенан мәхрүм ителгән осраҡтарҙың барыһы ла ҡайтанан ҡараласаҡ. Бының өсөн ғаиләләргә ғариза яҙыу кәрәкмәй, мәсьәлә автоматик рәүештә башҡарыла. Майҙа шулай уҡ ауыл хужалығында 25 йыл эшләгән пенсионерҙарға һәм хеҙмәткә һәләтһеҙ ғаилә аҫрауында булған уның ағзаларына түләүҙәр ҡайтанан иҫәпләнәсәк.

***Йәшәйешебеҙгә ҡағылышлы тағы бер яҡшы хәбәр:*** Рәсәйҙә 1 майҙан коммуналь хеҙмәттәр өсөн иҫәп-хисап йәһәтенән асыҡлыҡты көсәйтеү, торлаҡ хужалары менән идарасы компаниялар мөнәсәбәттәрен көйләү һәм ресурстарҙы ғәҙел бүлеү мәсьәләләренә контроль көсәйтелә, тип вәғәҙәләнә. Киләһе яңылыҡ фатирында йәшәмәгән кешеләрҙе үҙенең "резина" торлаҡ майҙанында теркәү менән шөғөлләнгән фатир хужаларына ҡағыла. Хәҙер бындай фиктив теркәүҙәрҙе юҡҡа сығарыу тәртибе ябайлаштырыла һәм судлашыу талап ителмәйәсәк. Май айынан башлап банк карталарын шикле схема буйынса аҡса күсереүселәрҙән, рәсми теркәлмәгән бизнес маҡсаттарҙа файҙаланыусыларҙан был аҡсаларҙың сығанағы тураһында документтар талап ителеүе ихтимал. Туғандарға аҡса ебәреү, магазинда хисаплашыу, банкоматтан акса алыу кеүек ваҡ операциялар, ҡулаҡса ҡулланыу тәртиптәре элеккесә ҡала.

***Быйылғы май тағы ла байрамдарға бәйле оҙайлы ялдары менән һөйөндөрә:*** тотош Рәсәй буйынса 1-3 һәм 9-11 май - ял көндәре булһа, **Башҡортостан халҡы Ҡорбан байрам хөрмәтенә тағы бер көн - 27 майҙа ла ял итәсәк:** ғаилә менән файҙалы ваҡыт үткәреү, баҡса-хужалыҡ эштәре менән мәшғүл булыу, тәбиғәт ҡосағында ял итеү яңы эш көнөнә көс һәм дәрт бирер. Тик бына Роспотребнадзорҙың тәбиғәттә сыҫҡандарҙан һәм талпандан һаҡ булырға өндәмәһе хаҡында ғына онотмайыҡ - һөйөнөстәр көйөнөскә әйләнмәһен! [printed: "әүерелә күрмәһен!"]

***Әйтер һүҙҙе тағы ла ҡоштар темаһы менән тамамлағы килә:*** Башҡортостанға ҡауҙылар эйәләй башлаған икән, хәйерлегә булһын! "Бәпес алып ҡайта торған" был ҡоштарҙың ғаилә символы ла икәнен беләбеҙ. Былтыр улар Иглин районында оя ҡорған. Социаль селтәрҙә таралған хәбәрҙәргә ҡарағанда,

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 32-се ултырышында депутаттар икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа Башҡортостан Республикаһының Опека һәм попечителлек органы хеҙмәткәрҙәре көнө булдырыу тураһында закон ҡабул итте. Ул йыл һайын 12 мартта билдәләнә. Билдәләнеүенсә, 1891 йылдың тап ошо көнөндә Рәсәй империяһында опека һәм попечителлек институтына нигеҙ һалған "уллыҡҡа алынған һәм законлаштырылған балалар тураһында" закон ҡабул ителә.

✓Рәсәйҙең Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, уҡыусыларҙың йәйге каникулдары 27 майҙа башлана һәм 31 августа тиклем дауам итә. Мәғариф министры Сергей Кравцов билдәләүенсә, балалар тулы ҡеүәткә ял иткәндән һуң яңы көс менән сентябрҙә парта артына ултыра. "Беҙҙең бурыс - һәр бала йәйҙе күңелле һәм файҙалы үткәрһен өсөн шарттар булдырыу", - тип уның һүҙҙәрен килтерә ведомствоның матбуғат хеҙмәте. Мәғариф министрлығы йыл һайын төбәктәргә тәҡдим ителгән каникул көндәрен ебәрә. Шул уҡ ваҡытта мәктәптәрҙең графикка төҙәтмәләр индереү хоҡуғы һаҡлана.

✓Республикала 2026 йылдың беренсе кварталында - 51 меңдән ашыу хеҙмәткәр эшенә бәйле медицина тикшереүе, 435 меңдән ашыу кеше, йәшенә ҡарап, диспансеризация үткән. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, диспансеризацияға йәки иҫкәртеү тикшереүенә Дәүләт хеҙмәттәре порталы, MAX-та чат-бот, "Табипҡа" мобиль ҡушымта, берҙәм республика медицина порталы, шулай уҡ Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының бәйләнеш үҙәге телефоны буйынса (122, өҫтәмә 2), поликлиниканың теркәү бүлегендә йәки инфоматтар аша яҙылырға мөмкин.

✓Әбйәлил районы хужалығынан Ҡытайға бер мең тоннанан ашыу арпа оҙатылған. Был хаҡта республиканың Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр иттеләр. Башҡортостанда 2025 йылда арпа биләгән сәсеүлектәр майҙаны 91 мең гектарға яҡын тәшкил иткән. Барлығы 200 мең тоннанан ашыу уңыш йыйып алынған. Быйыл арпаны сәсеү майҙанын тағы ла 2,2 процентҡа арттырыу ҡарала, тип белдерҙе белгестәр.

✓Мәсетле районының Оло-Ыҡтамаҡ ауылы эргәһендә Әй йылғаһы аша күперҙә ремонт быйыл тамамлана, тип хәбәр итте транспорт министры Любовь Минакова. 300 метр оҙонлоҡтағы күпер көн һайын 3,5 меңгә тиклем машинаны үткәрә. Ремонт ваҡытында хәрәкәт бер һыҙаттан ойошторолған. Күпер Башҡортостанды Свердловск һәм Силәбе өлкәләрен менән тоташтырыусы Кропачево - Мәсәғүт - Әчит трассаһында урынлашҡан.

ҡауҙылар быйыл да ошонда осоп ҡайтҡан, был бик яҡшы, изге күренеш. Легенда буйынса, бала, ғаилә генә түгел, мул уңыш һәм бәхет билдәһе лә икән улар. Ә бына баш ҡалабыҙ Өфөләге һәр кемгә яҡшы таныш Уралсиб бинаһы башында күп йылдар йәшәгән сапсан-ыласындар шулай уҡ ғаилә арттырырға йыйына: ояларында тәүге йомортҡалар пәйҙә булған. Ҡоштар тыныс урынды һайлай. Илгә именлек, тыныслыҡ ҡайтһын, ғаиләләребеҙҙә бәхетле сабыйҙар тыуһын, тормошобоҙ ыңғайға йүнәлһен, тип юрайыҡ был тәбиғәт күренештәрен.

***Был айҙағы байрам һәм һөнәри көндәр:*** Яҙ һәм хеҙмәт байрамы. Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө **(1)**, Совет ғәскәрҙәре тарафынан фашистик Германияның баш ҡалаһы Берлинды алған көн (2 май, 1945 йыл), Рәсәйҙә баҡсасылар көнө **(2)**, Бөтөн донъя матбуғат азатлығы; Бөтөн донъя Ҡояш **(3)**, Совет матбуғаты, Халыҡ-ара кендек инәһе; Халыҡ-ара инвалидтар хоҡуғы өсөн көрәш **(5)** көндәре, Радио һәм бөтөн элемтә тармаҡтары хеҙмәткәрҙәре; Элемтәсе һәм РФ Хәрби-Диңгеҙ Флотының радиотехник белгесе; Рәсәй Ҡораллы Көстәре булдырылған **(7)** көндәр, Икенсе донъя һуғышында һәләк булғандар иҫтәлегенә бағышлау һәм килешеү **(8 һәм 9)**; Рәсәй енәйәт-башҡарыу системаһының оператив хеҙмәткәрҙәре көндәре, Еңеү көнө. Рәсәйҙең хәрби дан көнө.1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында совет халҡының Еңеү көнө **(9, 1945)**, Халыҡ-ара әсә көнө **(10)**, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. Совет ғәскәрҙәренең Ҡырым һөжүм операцияһын еңеү менән тамамлаған көнө **(12,1944)**, Халыҡ-ара шәфҡәт туташтары; Экологик белем көндәре **(12)**, Рәсәйҙең Ҡара диңгеҙ Флоты (13) көнө, Халыҡ-ара климат; Халыҡ-ара ғаилә **(15)** көндәре, РСФСР пионерҙар ойошмаһы булдырылған **(19)** көн, Бөтөн донъя бал ҡорто (Умартасы) **(20)**, Рәсәйҙең Тымыҡ океан Флоты **(21)** көнө, Славян яҙмаһы һәм мәҙәниәте **(24)**, Филолог; Халыҡ-ара юғалған балалар **(25)** көндәре, Рәсәй эшҡыуарҙары **(26)** көнө, Ҡорбан байрам **(27)**, Ил сиге һаҡсылары **(28)**, Рәсәй адвокаттары; Химиктар; Бөтөн донъя тәмәкеһеҙ **(31)** көндәр.

***Һабанайҙа тыуғандар:***

**1 -** композитор, ауыҙ-тел ижады белгесе, педагог, башҡорт профессиональ музыка сәнғәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе **Солтан Ғәбәшиҙың** (Ғәбәши Солтан-Әхмәт Хәсәнғатар улы) **тыуыуына - 135 йыл** (1891-1942).

**3 -** күренекле башҡорт дин эшмәкәре, шәйех, ишан, мәғрифәтсе, яҙыусы **Ғабдулла Сәидиҙең** (Ғабдулла бин Сәид әл-Булғари әл-Бөрйән әл-Һаҡмар, Нурмөхәмәтов Ғабдулла Сәйетбаттал улы) **тыуыуына - 190 йыл** (1836-1914).

**3 -** ҡурайсы, педагог, Халыҡ музыка ҡоралдарында һәм халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың Бөтөн Рәсәй конкурсы дипломанты, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Рауил Хәсәновҡа - 70 йәш** (1956).

**15 -** Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артисы, бейеүсе, Бөтөн союз эстрада бейеүе фестивале лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Зөлфиә Ҡудашеваға - 70 йәш** (1956).

**26 -** композитор, пианист, педагог, З.Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының композиция кафедраһы мөдире, профессор, Башҡортостандың халыҡ артисы **Ләйлә Исмәғиловаға - 80 йәш** (1946).

**27 -** Башҡортостан вокал мәктәбенә нигеҙ һалыусы, педагог, профессор, РСФСР һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, икенсе дәрәжә "Ватан алдындағы хеҙмәттәре" ордены кавалеры, Өфө ҡалаһының почетлы гражданы **Миләүшә Мортазинаға - 100 йәш** (1926).

**27 -** Ейәнсура районы Яңыбай дөйөм урта белем биреү мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы **Ғайса Ишмөхәмәтовҡа - 60 йәш** (1966).

Һабанайҙа шулай уҡ шағир, драматург, тел һәм ауыҙ-тел ижады белгесе, Башҡортостан матбуғатына нигеҙ һалыусы, 1918-1920 йылдарҙа Башҡорт хәрби-революцион комитеты ағзаһы, "Башҡорт", "Башҡорт тауышы", "Башҡортостан хөкүмәтенең теле" гәзиттәре мөхәррире (1918), Яңы башҡорт алфавиты комитеты (1926) етәксеһе **Хәбибулла Ғәбитовтың тыуыуына 140 йыл тула** (1886-1938).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# РУБИКОН ЯРҘАМҒА КИЛӘ



**Үткән аҙнаның һуңғы көнөнә ҡарата РФ Оборона министрлығы шулай тип хәбәр итте: Рәсәй ғәскәрҙәре Украина Ҡораллы көстәре тарафынан файҙаланылыусы транспорт һәм энергетика объекттарын, шулай уҡ пилотһыҙ осоу аппараттарын һаҡлау һәм сығарыу пункттарын утҡа тотто. Рәсәй яугирҙары үҙ позицияларын яҡшыртыуға өлгәште.**

Тағы шундай мәғлүмәттәр: "Төньяҡ" ғәскәр төркөмө яугирҙары дошмандың 195 боевигын һәм 12 автомобилен сафтан сығарған, радиоэлектрон идара итеү станцияһын һәм 14 складты шартлатҡан. "Көнбайыш" төркөмө подразделениелары Украина Ҡораллы көстәренең 210 кешеһен һәм "MaxxPro" һәм HMMWV америка бронемашинаһын, 20 автомобилде һәм 4 радиоэлектрон (РЭБ) станцияны ҡыйратҡан. "Көньяҡ" төркөмө иҫәбендә - 175 боевик, "Казак" бронемашинаһы, шулай уҡ 5 орудие менән 5 склад эштән сығарылған. "Үҙәк" яугирҙары 29 һалдат һәм офицерҙы, БТР машинаһын, 2 орудие менән 2 РЭБ станцияһын ҡыйратҡан. "Көнсығыш" егеттәре иҫәбендә 290 дошман һалдаты, 6 бронемашина, 4 пикап һәм 2 орудие. "Днепр" 50 боевикты, 19 автомобиль һәм 3 РЭБ станцияһын юҡ иткән. Беҙҙең һауа һөжүменә ҡаршы оборона көстәре идара ителеүсе 7 авиабомбаны, 2 HIMARS снарядын, шулай уҡ 530 дронды бәреп төшөргән.

Дрондар һуғышында, ниһайәт, беҙҙең файҙаға һынылыш күҙәтелә. Рәсәй белгестәре Украина Ҡораллы көстәренең һәр төн һайын Рәсәй төбәктәренә һөжүм итеүсе Европа спонсорҙары ебәреп торған самолет рәүешендәге осоусы шартлатҡыс аппараттарына ҡаршы тороу сараһын тапты. Дөрөҫ, беҙҙең һауа һөжүменә ҡаршы оборона саралары һәйбәт эшләй, һүҙ ҙә юҡ, ләкин алыҫ араға алдырыусы С-400 менән С-500 зенит ракета комплекстары, нигеҙҙә, самолет, вертолет, ҡанатлы һәм баллистик ракеталарҙы юҡ итеүгә тәғәйенләнгән. Ә бына бәләкәй дәүмәлле һәм түбәндән осоусы дрондар менән бөтөнләй икенсе эш. Дрондың сағылыусы өҫкө йөҙө коэффициенты ҙур сәптәргә ҡарағанда күпкә бәләкәй, был уларҙы ҡарға һәм себен менән сағыштырыуға тиң булыр ине. "Пушканан турғайҙарға" атыу, өҫтәүенә, айырыуса ҡиммәткә лә төшә. Шуға күрә лә РФ оборона министры Андрей Белоусов бойороғо менән "Рубикон" үҙәге булдырылғайны. Бында дошмандың ауыр дрондарын һауала бәреп төшөрөүсе мини истребитель-дрондар эшләп сығарыла. Һынап ҡарауҙар барышында беҙҙең истребитель-дрондар Европала эшләнгән самолет рәүешендәге ауыр E-300, FP-2, R-15 шартлатҡыс аппараттарҙы еңеллек менән бәреп төшөрҙө. "Рубикон" үҙәгендә шулай уҡ Украина Ҡораллы көстәренең ҡиммәтле техникаһы, шул иҫәптән "Абрамс", "Леопард", "Брэдли" кеүек танктарын эҙәрләүсе дрон операторҙары ла әҙерләнә. Беҙҙең пилотһыҙ осоусы аппараттар расчеттары тәүлек әйләнәһенә эшләй. "Рубикон"дың эш һөҙөмтәләре хаҡында әллә ни асыҡтан-асыҡ белдереп барылмаһа ла, РФ Оборона министрлығы бынан алдараҡ үҙәк дрондарының ҡорал һәм боеприпастар тейәгән украин тимер юл эшелонын юҡ итеү барышын төшөргән видеояҙма тәҡдим иткәйне. Истребитель-дрондарға шул уҡ атама - "Рубикон" тигән исем бирелде.

Евросоюз, ныҡыша торғас һәм Венгрия премьеры Виктор Орбандың властан китеүен файҙаланып, 90 млрд евро күләмендә Украинаға кредит биреү мәсьәләһен хәл иткән. Шул уҡ ваҡытта ЕС Рәсәйгә ҡаршы 20-се санкция пакетын да ҡабул иткән. Ләкин сәйәси күҙәтеүселәр иҫкәртеүенсә, Киев режимына шатланырға иртәрәк әле. Зеленский хәбәренә ҡарағанда, кредиттың тәүге өлөшө май ахыры - июнь баштарына килеп етәсәк, тик шулай ҙа ҡайһы бер эксперттарҙың икеләнеүенсә, Европа был сумманы йыя алырмы? Өҫтәүенә, элек аҡсаның 40 процент күләмен биреп тороусы АҠШ Киевты финанслауҙы туҡтатты, хәҙер Евросоюз спонсорлау күләмен кредит иҫәбенә арттырырға мәжбүр. Хәрби эксперт Владимир Евсеев әйтеүенсә, 90 млрд евро ике йыл өсөн бүленә һәм ул хәрби ихтыяждарға ғына тотонолмаясаҡ: Киев режимына иҡтисад, социаль саралар өсөн дә бюджетты тотоп килергә кәрәк. Тимәк, кредиттың яртыһы ошо маҡсаттарға китәсәк.

АҠШ президенты Дональд Трамптың хәл-әхүәлдәренә килгәндә, үткән аҙнала ул ярһыуынан баҫыла биргәндәй булды, сөнки уға ватандаштарынан Иран конфликтына бәйле байтаҡ ҡына тәнҡит һүҙҙәре ишетергә тура килде. Америка чиновниктары был йәһәттән бик күп ракета тотоноу сәбәпле борсолоу белдерә. 28 февралдән алып Яҡын Көнсығышҡа 1000-дән ашыу "Томагавк", 1500-ҙән алып 2000-гә тиклем зенит ракеталары атылған. Әле килеп АҠШ ошо сәбәпле 2027 финанс йылында 3 203 Patriot PAC-3 MSE ракетаһы һатып алырға ниәтләй. 27 апрелгә ҡарата һуңғы яңылыҡтарҙан күренеүенсә, Иран властары АҠШ-ҡа өс этаптан торған һөйләшеүҙәр тәҡдим итә. Беренсе стадия: конфликтты тамамлау һәм артабан АҠШ-тың Иран менән Ливанға хәрби хәрәкәттәрҙән баш тартыуын гарантиялауы. Икенсе мәсьәлә: Ормуз боғаҙы статусын ҡарау һәм шунан һуң ғына өсөнсө этапҡа күсеп, Ирандың ядро программаһы хаҡында һөйләшеүҙәргә килеү.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Фобос" үҙәге фараздары буйынса, май башында һауа температураһы үҙгәрә. 1 майҙа уҡ республикала көндөҙ температураның +17°С, ә 2 майҙа +20°С тиклем күтәрелеүе мөмкин. Рәсәй Гидрометүҙәгенең оҙайлы фараздары Башҡортостанда йылы, әммә ямғырлы йәй вәғәҙәләй. Температура өс ай буйына "нормаға ярашлы йәки норманан юғарыраҡ" булмаҡсы.

✓Ҡаҙанда фехтование буйынса Рәсәй чемпионаты шәхси беренселектә рапирасылар ярыштары менән башланды. Өфөнән Владислав Журавлев турнирҙа көмөш миҙал яуланы, тип хәбәр итә республиканың Спорт министрлығы. Сирекфиналда Владислав Курск өлкәһенән Павел Пузанковты ышаныслы еңде - 15:6. Ярымфиналда Башҡортостан спортсыһы, ошо төбәктән Матвей Гребенниковты еңеп, үҙенең уңышын ҡабатланы.

✓Баш ҡала хакимиәте мәғлүмәттәре буйынса, 28 апрелдән 11 майға тиклем республика биләмәһендә пилотһыҙ осоу аппараттарын осороуға сикләүҙәр индерелә. Муниципалитетта белдереүҙәренсә, был саралар 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 81 йыллығына арналған байрам сараларын әҙерләү һәм үткәреү менән бәйле.

✓Өфөлә "Барыһы ла фронт өсөн. Барыһы ла Еңеү өсөн!" тигән илһөйәрлек флешмобы үтте. Акция "Ватан" паркында эшкә урынлашыу йәрминкәһе барышынды уҙҙы, тип хәбәр итә "Башҡорт батальоны". Ҡатнашыусылар "Барыһы ла еңеү өсөн!" лозунгылы полотноны, Рәсәй Федерацияһының, Башҡортостан Республикаһының һәм үҙ ведомстволарының флагтарын күтәрҙе. Акция быуындар берҙәмлеген һәм күсәгилешлелеген, илебеҙ геройҙарының батырлығы тураһында хәтерҙе һаҡлауҙарын сағылдырҙы.

✓25 апрелдә Башҡортостан Бөтә Рәсәй өмәһенә ҡушылды. Республикала өмәлә йәмғеһе 95 мең кеше һәм 15 мең предприятие ҡатнашты. Өфөлә өмәгә 50 меңдән ашыу кеше сыҡты. Улар - торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр, предприятиелар һәм ойошмалар хеҙмәткәрҙәре, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, ҡала халҡы, район һәм ҡала хакимиәттәре хеҙмәткәрҙәре. Ихата биләмәләре һәм йәмәғәт киңлектәре тәртипкә килтерелде, тип хәбәр иттеләр баш ҡала хакимиәтендә. Өмә барышында 2,5 мең кубометрҙан ашыу сүп-сар сығарылды.

✓Тажикстандың Somon Air авиакомпанияһы Өфөнән Дүшәнбегә осоштар программаһын асты. Был хаҡта баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. Апрелдә рейс аҙнаһына ике тапҡыр - шишәмбе һәм кесаҙна көндәрендә Boeing 737-800 һауа судноларында башҡарыла. Самолеттар 189 авиапассажирға иҫәпләнгән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Дин күҙлегенән ҡарағанда, Әҙәмде Аллаһы Тәғәлә бар ҡылған, тимәк, зиһен кешегә яратылмыштан бирелгән сифат. Әгәр ҙә кешене лә, машинаны ла зиһенле тип атайбыҙ икән, ысынбарлыҡта зиһенде яһап була, тигән фекер тыумаймы?*



ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Инә ҡорт һөтө

Инә ҡорт һөтө балалар физик яҡтан, аҡыл йәһәтенән артта ҡалғанда, сирлеләр ауыр сир кисергәндән, операциянан һуң, хәлһеҙләнгәндә, ябыҡҡанда, нервылар, организм ҡаҡшағанда, ҡарт-ҡоро ҡартлыҡтан миктәгәндә көс-ҡөҙрәт, дәрт-дарман өҫтәй. Бындай ауырыуҙарҙың, насар туҡланыусы балаларҙың ашау теләге тыуа, ауырлыҡтары арта, күңелдәре күтәрелә, һүлпәнлеге бөтә, тәндәренә төҫ керә. Етлекмәй тыуған балалар үҫә, күркәмләнә. Һөттөң мөғжизәһе менән ололарҙың хәрәкәтләнеүе, хәтере һәйбәтләнә, ҡолаҡтары асығыраҡ ишетә, күҙҙәре яҡшыраҡ күрә. Йәнә, инә ҡорт һөтө енес биҙҙәрен стимуллаштыра, климакс мәлендә ҡатындарҙы тынысландыра, бала имеҙгән инәләрҙең имсәк биҙҙәренән һөт бүленеүен көсәйтә.

Хәҙер медицинала апилак препараттарын ҡан аҙайғанда, ҡан баҫымы түбәнәйгәндә, йөрәк ишемияһы, миокард инфаркты, стенокардия, гипертония, атеросклероз, тромбофлебит, артрит, туберкулез, бруцеллез, шәкәр диабеты, бауыр, ашҡаҙан-эсәк юлы, трахит, ларингит, бронхит, бронхиаль астма ауырыуҙарын дауалағанда ҡулланалар. Астмаға дусарҙар инә ҡорт һөтөн даими ҡабул иткәндә, үпкә көпшәләре ҡаҡырыҡтан тиҙ таҙара, тын алыу яҡшыра. Инә ҡорт һөтө менән псориаз, нейродермит, себорея, экзема, эренле йәрәхәт, пеләшләнеү кеүек тире ауырыуҙарын да дауалайҙар.

Медицина фәне остаздары белдереүенсә, иммун системаһын тергеҙеүгә, һаҡлауға булышыуҙа, айырыуса химия терапияһы, нур терапияһы менән дауалауҙан һуң апилакты ҡулланыу файҙалы. Инә ҡорт һөтөндәге нуклеин кислоталары аҡһымдар биосинтезына, күҙәнәктәр бүленеүенә һәм башҡа барыштарға, күренештәргә йоғонто яһай. Был организм онкологик сирҙән көсһөҙләнгәндә күҙәнәктәрҙең яңырыуы, үҫеше өсөн ифрат та мөһим. Апилактың рак шешенә ҡаршы биологик үҙенсәлектәрен билдәле канад ғалимы Гордан Таунсенд үткәргән ғилми һынауҙар һөҙөмтәләре раҫлай. Ул егерме йыл буйы апилактың рак шеше күҙәнәктәре үҫеүен тотҡарлау, баҫыу мөмкинлеген өйрәнгән. Уның дәлилләүенсә, апилак ярҙамында рактың дүрт формаһын (лейкемия, лимфосаркома, аденокарцинома, Эрлих карциномаһы) туҡтатырға мөмкин. Ҡорт инәһе һөтөнөң рак ауырыуҙарына ҡаршы тәьҫирен уның радиоактив үҙенсәлектәргә эйәлеге менән дә бәйләйҙәр.

Инә ҡорт һөтөнән яһалған таблеткаларҙы, капсулаларҙы тел аҫтына һалып, лайлалы ауыҙ ҡыуышлығы аша ҡанға һеңгәнсе ун-ун биш минут тоталар. Тибет медицинаһы буйынса апилак шыйыҡсаһының бер дозаһы ололарға - ун тамсы, балаларға - өс-алты тамсы. Һөттө бер-ике тамсы балға ҡушып, ун көнлөк курстар һәм ун көнлөк тәнәфестәр менән, сирҙең ҡатмарлылығына ҡарап, өс-ун ике курс туйынырҙан алда көнөнә өс мәртәбә ҡабул итәләр. Ғәҙәттә иһә ун-егерме, утыҙ миллиграмм һөттө ун-егерме көн көнөнә өс тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт элек тел аҫтына һалалар. Профилактик сара өсөн тәүлегенә ике-өс капсула тәғәйенләйҙәр.

Инә ҡорт һөтөнөң аҙ ғына миҡдары ла ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Шуға ла уны тейешенән артыҡ ҡулланырға ярамай. Әгәр бал кешелә аллергия ҡалҡытмай икән, тимәк, уға инә ҡорт һөтө лә килешә. Әгәр ул йүткереү тыуҙырһа, организм күнеккәнсе уның миҡдарын ике тапҡырға кәметергә кәрәк.

Хәҙер апилактан косметик кремдар ҙа әҙерләйҙәр. Сөнки ул күҙәнәктәр алмашыныуын стимуллаштырып, май биҙҙәре секрецияһын яҡшырта, тирене һығылмалы итә, йәшәртә. Инә ҡорт һөтөнөң им, шифа үҙенсәлектәре иҫ китмәле. Ул, ысынлап та, илаһи бал ҡорто мөғжизәһе!

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

**(Дауамы. Башы 1-15-се һандарҙа).**

*ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!*

# НИ ӨСӨН "ЯҺАЛМА ЗИҺЕН"?

**"Яһалма зиһен" тип әйтеү дөрөҫмө? Һүҙмә-һүҙ ҡарағанда, дөрөҫ һымаҡ. Төп нөсхәлә: artificial intelligence. Artificial - "яһалма", intelligence - "фекер йөрөтөү, аңлау һәләте", тимәк, был һүҙ зиһен эшмәкәрлеге менән бәйле, тип аңларға була. Тик беҙ йәш саҡта һүҙҙәрҙе түгел, мәғәнәне тәржемә итергә кәрәк, тип өйрәтә торғайнылар. Шулай булғас, иң тәүҙә "artificial intelligence", йәғни "искусственный интеллект" нимә ул, тигән һорау бирәйек.**



"Artificial intelligence" - термин, заманса технологияның, һуңғы осорҙа бөтөн кешелекте шаҡҡатырған, һоҡландырған һәм хәүефкә һалған технологияның атамаһы. Был технология нисек эшләй? Ул - алгоритм, йәғни ябай ҡағиҙәләр йыйылмаһы. Мәҫәлән: "Йомортҡа бешереү" алгоритмы:

- Сүмескә һыу һалырға
- Һыуға йомортҡаны һалырға
- Сүместе утҡа ҡуйырға
- Һыуҙы ҡайнауға еткерергә
- 7-10 минут бешерергә
- Утты һүндерергә
- Йомортҡаны алырға

Йәғни, алгоритм һәр бер аҙымдың билдәле бер тәртиптә башҡарылыуын аңлата. Һәр аҙым аңлайышлы һәм уны эшләп була. Әлбиттә, был үтә ябай миҫал. Ә хәҙерге системалар иҫте-һушты алырлыҡ ҡатмарлы. Әммә эшләү принцибы шул уҡ.

Тағы бер ябай миҫал: мин бәрәмес ашарға теләйем, ти. Был һүҙҙе әйтеү менән уның тәмен тоям, төҫө, еҫе иҫкә төшә, әсәйемдең уны бешереүе күҙ алдыма килә. Минең тотош тормош тәжрибәм, эске донъя эшкә егелә.

Ә яһалма интеллектҡа "бәрәмес" тип әйтәм икән - ул был һүҙ менән, ғәҙәттә, "рецепт", "эремсек", "ҡамыр" һүҙҙәре бәйле булыуын таба һәм шулар нигеҙендә яуап әҙерләй. Ул бәрәмес теләмәй, бары тик уның тураһында һөйләй белә.

Йәғни, был инструментҡа ғәләмәт күп текст индерелгән, уға шулар араһындағы ҡанун-ҡағиҙәләрҙе табырға һәм урынлы итеп ҡулланырға өйрәткәндәр. Ул минең һорауға йыш осрай торған яуаптарҙы иҫәпләп сығара ла тәҡдим итә. Был системалар: уйламай, ниәттәре юҡ, һиҙеү ағзалары юҡ, әхлаҡ ҡағиҙәләре, намыҫ, выждан юҡ - улар хисаплай, фаразлап яуап төҙөй һәм тәҡдим итә. Эйе, ул уйламай, аңламай. Ул - иҫәпләй.

Ни өсөн бында "интеллект" һүҙе хата? Сөнки кешегә ҡағылышлы интеллект тәжрибә, һиҙеү-тойоу, эске ҡиммәттәр, яуаплылыҡ тойғоһо, аңлау һәләте барлығын күҙ уңында тота. Ә хәҙерге системалар иһә аңлаған һымаҡ тойоу ғына тыуҙыра. Ысынлап та, аҡыллы булыу бер нәмә, аҡыллы булып күренеү - бөтөнләй икенсе нәмә.

Алгоритм "уйламай". Ул хисаплай. Тимәк, "яһалма интеллект" тигән һүҙбәйләнеш - әҙәм мейеһе өсөн тоҙаҡ. Был ике һүҙҙең һәр берәһендә осло ҡармаҡ йәшеренгән:

Яһалма - тимәк кеше уйлап сығарған.

Интеллект - тимәк зиһен, аң, аҡыл менән бәйле.

Беҙҙең мейе шунда уҡ "интеллект" төшөнсәһенә һалынған сифаттарҙы - аңды, ихтыярҙы, ниәтте, яуаплылыҡты - машинаға ла күсерә.

Күреүебеҙсә, атамалағы "интеллект" һүҙе системаның асылына тап килмәй.

Үтә алыҫ китмәгән үткәндәргә күҙ һалайыҡ.

Бер төркөм йәш ғалимдар Artificial Intelligence - Яһалма интеллект тигән терминды 1956 йылда АҠШ-тың Дартмут колледжындағы конференцияла тәүге тапҡыр ҡуллана. Йәш, ҡыйыу һәм дыуамал ғалимдар бындай яңғырауыҡлы исем биреп, үҙҙәренең проектына иғтибар, ҡыҙыҡһыныу һәм, ахыр сиктә, күберәк аҡса йәлеп итергә ниәтләп эшләнгән маркетинг алымы, бик оҫта реклама. Был һүҙбәйләнештә "интеллект " системаның асылын билдәләмәй, ә бары тик метафора ғына. Әммә был метафора - тоҙаҡ һәм бөгөн килеп бөтә кешелектең күпселеге, белгестәрҙең гел иҫкәртеп тороуына ҡарамайынса, был тоҙаҡҡа ҡыуана-ҡыуана килеп ҡапты. "Интеллект" һүҙе шул тиклем көслө, бөгөн дә күптәр алгоритмды инструмент түгел, ә үҙаллы аңға эйә нәмә кеүек ҡабул итә.

Ә беҙ шул метафораны башҡортсаға "зиһен" һүҙе менән алһаҡ?

"Зиһен" - кеше мейеһенең донъяны тойоу, уйлау, фекер йөрөтөү, хисләнеү, хәтер һымаҡ, фән һаман да тулыһынса аңлап бөтмәгән процестарҙы үҙ эсенә алған сифаттар йыйылмаһы.

Зиһен, аң - мәғлүмәтте эшкәртеү генә түгел. Ул аңлауҙы, яҡшы менән яманды айырыуҙы, сама тойғоһон, кешелек ҡиммәттәрен, яуаплылыҡты үҙ эсенә ала. Нимә яҡшы, нимә насар икәнен тойоу, выжданға таянып һайлау, "Ни өсөн?" тигән һорау ҡуйыу - зиһен эше.

Зиһен - инструмент түгел, ул әҙәм балаһының үҙәге, асылы.

Ә "яһалма зиһен" тип алыу башҡорт теле өсөн айырыуса хәүефлеме һуң?

Һәр телдә уның эске философияһын тәшкил иткән төп һүҙҙәр бар. Беҙҙең телдә улар - зиһен, аҡыл, аң. Улар синоним түгел. "Зиһен", "аң", "аҡыл" - кешенең эске донъяһын баһалаған сиктәр: үткер зиһен, тәрән аҡыл, яуаплы аң. Тел ошо айырмаларҙы һаҡлай.

Шуға күрә хисаплауҙы зиһен, аҡыл йәки аң тип атау - кешенең эске донъяһы менән ысынбарлыҡты таныу араһындағы сикте бутай. Йәғни, зиһен һүҙен алгоритмдарҙы атау өсөн ҡулланһаҡ, тәрән фәлсәфәүи һәм дини йөкмәткегә эйә һүҙ техник терминға әйләнеп, ярлылана.

Йәнә бер яғы бар: донъя телдәренән айырмалы рәүештә, башҡорт теле һымаҡ урындағы телдәрҙә терминдар аҙ, ә һүҙҙәрҙең йөкмәткеһе ҙур. Машинаны "зиһен" менән бәйләһәк, кеше менән механизм араһындағы сик юйыла башлай. Ахыр сиктә, тел аңлау менән хисаплауҙы айырыуҙан туҡтай. Был - тағы бер хәүеф.

"Яһалма интеллект" тип алғанда беҙ терминды үҙләштерәбеҙ генә. Ә "яһалма зиһен" тип тәржемә итһәк, ят мәғәнәне үҙ һүҙебеҙгә күсерәбеҙ. Был телдең донъяны танып-белеү ҡеүәһен тарайтырға мөмкин.

Ә башҡа төркиҙәрҙә хәл нисек тора?

Төрөк телендә: yapay zeka - yapay (яһалма), zeka (аҡыл, интеллект). Әммә zeka һүҙе "зиһен"гә ҡарағанда "интеллект" төшөнсәһенә яҡыныраҡ. Йәғни, метафора һаҡлана, әммә ул "зиһен" һымаҡ тәрән тамырланмай.

Ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, әзери, төркмән телдәрендә "интеллект" һүҙен үҙгәртмәй ҡалдырғандар. Улар ят метафораны һаҡлаған - ул ят булып ҡала, шуға күрә телдең эске мәғәнә системаһын ныҡ үҙгәртмәй.

Төрөктәр үҙҙәренең һүҙен ҡуллана, әммә ул да "зиһен" кеүек философик тәрәнлеккә эйә түгел.

Күреүебеҙсә, башҡа төрки телдәр һаҡсылыраҡ: улар машинаны "зиһенле" тип атамай. Улар термин кимәлендә туҡтай, шуның менән үҙ телдәренең эске мәғәнә ҡатламдарын һаҡлай.

Мин бында "яһалма зиһен" тип тәржемә итеүҙең хәүефен тик тел йәһәтенән ҡарап сыҡтым. Әммә төшөнсәнең фәлсәфәүи һәм дини яғы ла бар бит. Дин күҙлегенән ҡарағанда, Әҙәмде Аллаһы Тәғәлә бар ҡылған, тимәк, зиһен кешегә яратылмыштан бирелгән сифат. Әгәр ҙә кешене лә, машинаны ла зиһенле тип атайбыҙ икән, ысынбарлыҡта зиһенде яһап була, тигән фекер тыуmaймы? Был буталыш Алла яратҡан кешене түбәнһетеүгә килтермәйме? Философия, әхлаҡ йәһәтенән дә ошондай һорауҙар тыуа.

Ни өсөн тәржемәләге бер генә һүҙ шул тиклем күңелде ҡырып тора һуң? Йәшерен-батырыны юҡ: быуаттар буйына күсте туплап торған бал ҡорто инәһе һымаҡ, халыҡыбыҙҙы тотоп торған телебеҙ өсөн бөгөн бик ҡатмарлы заман. Ҡатмарлы һәм ауыр. Шуға күрә лә уға ҡарата мөмкин тиклем аяулы, ихтирамлы һәм мөхәббәтле булырға кәрәклеген тойоп, гел әрнеп торған йән сыҙамайҙыр...

**Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА.**

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН

# КЕШЕЛЕК БИТ ХЕҘМӘТТӘН БАШЛАНА!



**(Башы 1-се биттә).**

***Ҡыҙыҡлы бер фекер хасил була: барса хайуандар, ҡош-ҡорттар, хатта бөжәк-һәжәгә лә билдәле бер биологик әүҙемлек һеҙөмтәһендә генә йәшәү, үрсеү әмәлен таба.*** Һәр тере йәндең гендарына һалынған тәбиғәт программаһы һис бер тотҡарлыҡһыҙ ғәмәлгә ашырыла: ҡайһылары үлән, еләк-емеш менән туҡлана, йыртҡыс йәнлектәр, ҡоштар һәм балыҡтар үҙҙәренсә "һунар" итергә лә һәләтле. Тик улар, кешеләрҙән айырмалы, эш башҡармай, тәбиғи инстинкттары һәм үҙҙәренең күнекмәләре ярҙамында йәшәүен дауам итеү мөмкинлеген таба. Шуныһы ҡыҙыҡ: ҡасандыр беҙгә коммунизмдың бер принцибы итеп иғлан ителгән "Кем эшләмәй - шул ашамай" лозунгы, кешеләрҙән бигерәк, хайуандарға хас икән. Ҡыр хайуандары, ҡош-ҡорттар үҙ ғүмерҙәренең ахырына тиклем хәрәкәттә ҡала, улар "эштәре" туҡтау менән йәшәүҙән дә туҡтай.

Кешеләр йәмғиәтен хайуандар донъяһы менән сағыштырыуҙан әллә ниндәй фәтеүә юҡ һымаҡ, әммә уларҙың йәшәү рәүеше ҡай сағында шундай камил булып күренә, әйтерһең дә, ошондай биологик программалар үҙенә күрә бер теүәл һалма интеллект итеп яратылған. Белеүебеҙсә, изге Ҡөрьән-Кәрим китабында "Бал ҡорто" тип аталған сүрә бар. Унда төрлө еләк-емеш ағастарының, хайуандарҙың, бал ҡорттарының кешеләргә файҙа килтереүе хаҡында аяттар бирелә. Тере заттар тәбиғәттән һалынған программаға ҡаршы килмәй, үҙҙәренә тәғәйен "хеҙмәтте" теүәл башҡара.

***Кешелек тарихын кешеләрҙең хеҙмәт тарихы, тип тә нарыҡларға була.*** Ғалим-антропологтар фаразлауынса, иң боронғо, кешеләргә оҡшаш заттарҙың 2,6 миллион йыл элек йәшәүе мөмкин. Ә беҙҙең Homo sapiens (аңлы кеше) тип аталған ата-бабаларыбыҙҙың бынан 200 мең элегерәк хасил булыуы инҡар ителмәй. Нисек кенә булмаһын, аяҡтарына тура баҫып йөрөп, тирә-яҡты танып белә башлаған, көнитмештәрендә эш ҡоралдары ҡулланған кешеләрҙән ҡалған артефакттарға таянып, археологтар кешелек тарихының иң боронғо эпохаларын таш, бронза һәм тимер быуаттарына бүлеп ҡарай. Таштан, бронзанан һәм тимерҙән эшләнгән һалма предметтар һәм, әлбиттә, эш ҡоралдары күпләп табылған һәм өйрәнелгән, улар - кешелек тарихының өнһөҙ шаһиттары.

XIX быуат философы Фридрих Энгельс үҙенең бер яҙмаһында хеҙмәт тураһында бына нисек итеп яҙа: "Хеҙмәт - һәр төрлө байлыҡ сығанағы, тип раҫлай политэкономдар. Ысынлап та, ул тәбиғәт аша шундай, һунһы уны байлыҡҡа әйләндерерлек материал менән тәьмин итә. Әммә ул бынан иҫәпһеҙ зурыраҡ нәмәгә тиң. Хеҙмәт - кешенең бөтә тормошоноң төп шарты булып тора, һәм шундай кимәлдә - беҙ билдәле бер мәғәнәлә шулай тип әйтергә тейешбеҙ: хеҙмәт кешенең үҙен яралтҡан".

***Иң боронғо кешеләр - тәбиғәт балалары. Уларҙың йәшәй алыуы ла, үлеме лә тәбиғәт шарттарының йә уңайлы, йә иһә катастрофик торошо менән бәйле.*** Ошо тәү эпохаларҙы күҙ алдына килтереп булһа, әҙәми заттарҙың төрлө үҫемлектәр, үлән тамырҙары, еләк-емеш йыйып ҡына көн итеүҙәрен күрер инек. Боронғо кеше вегетарианец булған, тип фараз итәйек. Уларҙың көнитмеше хайуандарҙыҡынан әллә ни айырылып тормағанын күҙалларға була. ***Тағы ла бер ҡыҙыҡлы һығымта: үҙҙәре йыйып алып ҡайтҡан үҫемлек орлоҡтарының шытып, үҫә башлауын күҙәтеү, төшөнөү һөҙөмтәһендә кешеләр үҫемлекселек, игенселек менән шөғөлләнә башлаған. Бына нисек бит ул - ауыл кешеләренең төп хеҙмәте булған игенселек, баҡсасылыҡ, еләк-емеш үстереүҙең йөҙәр мең йыллыҡ тарихы бар икән дәбаһа!***

Ваҡыттар үтә килә һунарсылыҡ осоро башлана, ҡырағай йәнлектәрҙе ҡулға эйәләштереү малсылыҡ шөғөлөн хасил итә. Игенселәр, һунарсылар, малсылар - кешелекте йәшәтә һәм үҫтерә алыусы хеҙмәт эйәләре булып китә. Ут табыу серен асыу бронза һәм тимер быуаттарында кешеләргә руда иретеү ысулын уйлап табыу мөмкинлеген бирә, шулай итеп, кешелек үҫешенә яңы, көслө ынтылыш биргән металл иретеүсе һәм тимерсе һөнәрҙәре барлыҡҡа килә.

***Кешелектең һәр бер тарихи эпохаһында, кешеләрҙең аң һәм матди мәҙәниәт үҫеше менән бәйле яңы хеҙмәт итеү ысулдары, бығаса булмаған эш ҡоралдары, хәҙергесә әйткәндә, яңы технологиялар ҡулланыу һөҙөмтәһендә йәҙәрләгән төрлө хеҙмәт төрҙәре лә хасил була.*** Ағас һәм балсыҡтан һауыт-һаба эшләү, тире эшкәртеү, туҡыма туҡыу, өҫ һәм аяҡ кейемдәрен тегеү, торлаҡ төҙөү, бысаҡ, балта, һөңгө, уҡ-йәйә етештереү, ҡырағай атты эйәләштереү, тәғәрмәс һәм арба эшләргә өйрәнеү, ел һәм һыу тирмәндәрен уйлап табыу һәм башҡа шундай меңәрләгән аң һәм хеҙмәт емештәре кешелек тарихының баһалап бөткөһөҙ ҡаҙаныштарын хасил итә.

Йәнә бына нимә мөһим. Матди яҡтан етеш дәүләттәрҙә айырым бер элитар төркөмдәр барлыҡҡа килә - дин әһелдәре, философтар, шағирҙар, рәссамдар, композиторҙар, йыраусылар һәм артистар, уҡытыусы-остаздар, табиптар һ.б. Улар ябай физик хеҙмәттән айырылып торған интеллектуаль хеҙмәт менән шөғөлләнә, ә былар барыһы лә кешелектең ижади ҡеүәһен бермә-бер үҫтерә бара.

Әле иҫкә алынғандар XIX - XXI быуаттарҙа кешелек үҫешенә бығаса хыялға ла инмәгән мөмкинлектәрҙе аса, ә хәҙерге заманда йәшәйешебеҙҙең барса өлкәләрендә лә цифрлы технологиялар киң ҡулланыла башланы, XX быуатта тик фантастик әҫәрҙәрҙә генә күҙалланған робот техникаһы һәм һалма интеллект ысынбарлыҡ күренешенә әйләнеп тә өлгөрҙө.

Техник яҡтан ни тиклем йылдам үҫеш кисергән хәлдә лә, хеҙмәт даирәһе һәр кешенең, бер яҡтан, аң кимәленең юғары, икенсе яҡтан, ҡулдарының, билдәле бер хеҙмәт формаһына ярашлы, теге йәки был эшкә яраҡлы ғәмәлдәр башҡарыуға күнеккән булыуын талап итә. ***Шул уҡ роботтарҙы һәм һалма интеллектты кеше үҙенең аҡылы һәм оҫта ҡулдары ярҙамында хасил итә. Аҡыл һәм ҡул берлеге үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәй, ул балаларға белем биреү һәм тәрбиә процесары аша формалаша. Тимәк, йәш быуындарҙың интеллектуаль үҫеше менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, уларҙы махсус ойошторолған хеҙмәт ғәмәлдәрен башҡарыуға өйрәтеү әле лә бик тә көнүҙәк мәсьәлә булып ҡала.*** Унан һуң, һәр баланың физик һәм интеллектуаль үҫешенә хеҙмәт процестарының ыңғай йоғонто яһауы донъя педагогикаһында иҫбатлауҙы талап итмәгән аксиома булыуы күптән билдәле.

Йәмғиәт тә, дәүләт тә һәр кемдең билдәле бер һөнәргә эйә булыуын талап итә, ә хәҙерге шарттарҙа кешенең бер юлы бер нисә һөнәрҙе башҡара алыуы тормоштағы социаль конкуренция шарттарында уға өҫтөнлөк бирә. XX быуатта философтар кешенең физик һәм интеллектуаль хеҙмәтен камиллаштырыу, уны үҙенә күрә бер гармониялы халәткә индереү тураһында хыялланған. Хужалыҡ итеү, етештереү өлкәләрендә яңы технологиялар ҡулланыу һөнәрмәндәрҙең эш ваҡытын ҡыҫҡарта бара, ә унан ҡалған сәғәттәрҙе "буш", йә иһә бер файҙаһыҙға уҙғарылған ваҡыт, тип ҡарау дөрөҫ булмаҫ ине. Был ял итеү, физкультура һәм спорт менән шөғөлләнеү, мәҙәни саралар ҙа ҡатнашыу, походтарға йөрөү өсөн мөмкинлектәр аса. Әгәр ҙә ки кемдерҙең билдәле бер ижади ынтылыштары бар икән, ул үҙенең әлеге буш тип аталған ваҡытын ижади һәләттәрен асыуға һәм үҫтереүгә сарыф итә ала. Ҡәҙимге хеҙмәт ғәмәлдәрен башҡарыу менән бер рәттән, үҙ тормошонда ижади ҡаҙаныштарға өлгәшкән замандаштарыбыҙ арҭҡандан-арта бара хәҙер.

Хатта ғүмерҙәре буйына ғаиләләренә, иленә, халҡына хеҙмәт итеп, хаҡлы ялға сыҡҡан оло быуын кешеләре лә үҙ телэҡтәренә һәм мөмкинлектәренә ярашлы эштәр башҡара, ысынбарлыҡта улар үҙҙәренә генә хас хеҙмәт юлын дауам итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хеҙмәт - кешенең ғүмерлек юлдашы, унан башҡа тормошобоҙҙо күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Башҡарған эшеңдән ҡәнәғәт булып, өлгәшелгән уңыштарыңа ҡыуанып, унын татлы емештәренән ләззәт табып йәшәүгә ни етә, хөрмәтле замандаштарыбыҙ!**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



**Сергей РУДЕНКО**

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың ризығы

Әсе бал, нигеҙҙә, ҡышҡыһын әҙерләнгән һәм көндәлек түгел, ә туйҙарҙың төп эсемлеге булған. Умартасылыҡ менән шөғөлләнгән ерҙәрҙә был эсемлек һәр урында әҙерләнгән. Умартасылыҡ менән шөғөлләнмәгән Урал арьяғының ялан Башҡортостанында әсе балды икенсе эсемлек - буҙа алмаштырған.

Буҙаны башҡорттар арыш, арпа йәки бойҙайҙан әҙерләй. Ошо шыттырылған иген культураларын киптереп, һуңынан ҡул тирмәнендә тарттыралар. Шулай итеп алынған ҡурға һоло оно ҡушып, эҫе һыу һалып ҡайнаталар һәм ике-өс көнгә әсетергә ултырталар.

XIX быуатта башҡорттар араһында киң таралған көндәлек эсемлек булып "фамильный" (бөртөклө), бик һирәк таҡта сәй торған. Сәйгә һөт һалып эскәндәр, байҙар ҡайһы бер ваҡытта лимон да һалған. Шәкәрҙе бик аҙ ҡулланғандар, йышыраҡ бал менән эскәндәр. Ҡайһы бер урындарҙа, ысын сәй булмағанлыҡтан, ярлы башҡорттар болан уты, мәтрүшкә үләненең япраҡтары һәм сәскәләрен сәй итеп файҙаланған; мәтрүшкәне дауалаусы сара итеп тә ҡулланғандар.

Еләктәр хаҡында һүҙ барғанда, иҫкә алынған ҡаҡ киң таралған десерт булып торған. Уны ялан һәм башҡа еләктәрҙән эшләгәндәр. Еләктәр иләк йәки нығ беше булмаған туҡыма аша һығылған. Бутҡа рәүешендәге һут алдан май йәки ҡаймаҡ менән майланған тигеҙ таҡтаға һалынған һәм ҡояшта киптерелгән. Ике-өс көндән әҙер ҡаҡты таҡтанан алғандар һәм уралған килеш табынға биргәндәр.

Төрлө еләктәрҙән (тарттырылған йәки бөтөн килеш) эшләнгән эслек һалып бешерелгән бәлештәр һәм бөккәндәр ҙә десерт булып торған. Был ашамлыҡтар тотош Башҡортостанда билдәле булған.

Башҡорттар көнөнә өс тапҡыр туҡланған: иртәнге ашты - алты-етелә, төшкө ашты көн үҙәгендә һәм киске аш ашағандар.

## Йорт производствоһы

Ышҡыу ярҙамында ут табыу башҡорттар тарафынан XX быуат башында ла, һәр урында булмаһа ла, ҡулланылған. Бурамаға 8 сантиметр ҡалынлығында ҡоро ҡарағай таҡта ҡағыла, унан 50-60 см алыҫлыҡта ергә ҡоро ҡарағастан бағана ултыртыла. Бағана менән таҡта араһына, уларға һалған бәләкәй уйымдарға диаметры 6 сантиметр булған, ике яҡ осо матур итеп осланған ҡоро имән таяҡ - урғалаҡ урынлаштырыла. Бағананың үргә осон бурамаға ныҡ итеп тарттырып, урғалаҡты бағана менән таҡта араһында ҡыҫалар. Уны ике тапҡыр арҡан менән урағас, ике яҡтан дүртәр кеше арҡанды тартып, урғалаҡты әйләндерә. Ағасты имән орсоҡ менән шулай итеп быраулау осҡон сыҡҡанға тиклем дауам итә. Утты шунда уҡ ҡауға алалар.

Саҡматашлы саҡма һәм ҡыу ярҙамында ут тоҡандырыу шырпы барлыҡҡа килгәнгә тиклем ҡулланылған, ә XIX быуаттың аҙағында күсмә тормош алып барған башҡорттарҙа һәм тауҙарҙа һунар итеүсе һунарсыларҙа ғына осраған.

**(Дауамы бар).**

***✓ Полилингваль гимназиялар асыу башҡорт телен өйрәнеүгә яңы мөмкинлектәр асты. Шулай уҡ республикалағы башҡа телдәрҙе өйрәнеүгә лә быға́са булмаған юл һалынды.***

# ”Хәл килһә,

**...Әһле ислам йоҡлабыраҡ ҡалыр булды,**
**Башҡа милләт алға табан барыр булды.**
**Дошмандарға ҡаршы торор ҡылмаҡ өсөн**
**Яңы ғилемдәр беҙгә зарур булды.**
**Хәл килһә, төрлө фәнде күргән яҡшы,**
**Ғалимдар ҡатарына кергән яҡшы.**
**Русса уҡып-яҙып ҡына түгел белмәк,**
**Хәл килһә, французса белгән яҡшы.**
**Иң әүәл үҙ ғилемеңдә асыҡ бул һин,**
**Ышанысың ҡеүәте таҙа булһын... -**

**тип яҙған мәшһүр Аҡмуллабыҙ үҙенең "Борадәргә" (дусҡа, иптәшкә) шиғырында. Уның был шиғыр юлдарын республикабыҙҙың полилингваль уҡыу йорттарының девизы итеп алырға мөмкин булыр ине.**

**Ысынлап та, Аҡмулла әйткәнсә, күп тел белеүҙең әһәмиәте хаҡында тағы ла бик күп дәлилдәр килтерергә мөмкин булыр ине. 2-се "Смарт" Республика полилингваль күп профилле гимназия директоры Наил Радик улы ӘМИНЕВ, 1-се Республика полилингваль күп профилле гимназия директоры Ришат Марс улы КАМАЛОВ менән шул хаҡта фекер ҡорҙоҡ.**

**Атайымдың апаһы Мәһинур инәйемдең ире, билдәле дин белгесе, теолог Рауил Үтәбай-Кәрими егермегә яҡын телде теоретик яҡтан белеп, шулар-ҙың унлабында иркен аралаша, аудитория алдында сығыш яһай алған инсан, полиглот ине. Уның күп тел белеүгә бәйле был һәләте үҙ-үҙен тотошонда, кешеләр менән мөнәсәбәтендә, яҙған мәҡәләләрендә сағылыш тапты. Икенсенән, уның энциклопедик хәтере һоҡландырҙы. Әйтәйек, берәр мәғлүмәт хаҡында һорашһаң, ул шунсама йылда, шундай журналдың шунсама һанында, шундай авторҙың шундай-шундай яҙмаһында, журналдың, китаптың шунсама битендә шундай-шундай һүҙҙәр яҙылғаны хаҡында һөйләй башлар ине. Хәтеренең хәтәр ныҡ булыуын да мин уның телдәрҙе күп белеүенән килгәндер, тием. Наил Радик улы, Ришат Марс улы, һеҙ полилингваль гимназияларҙың директорҙары булараҡ, кешенең күп тел белеүе уның интеллектуаль яҡтан үҫешенә нисек йоғонто яһай тип уйлайһығыҙ?**

**Наил ӘМИНЕВ:** Хәҙерге айти һәм яһалма интеллект технологиялары ныҡ үҫешкән ваҡытта күп тел белеү нимәгә кәрәк ул, тип әйтеүселәр ҙә бар. Йәнәһе, аппаратураны тоташтырһаң да, теләһә ниндәй тексты теләгән теленә тәржемә иттереп алаһың. Был фекер менән килешеп бөтмәйем. Ҡыҙымды беренсе класҡа уҡырға биргән саҡта беҙ тәүге тел итеп немец телен һайланыҡ. Сөнки бик көслө немец теле уҡытыусыһы булды. Шул саҡ миңә: "Бар донъя инглиз телендә аралашҡанда нинә һин немец телен һайланың?" - тип әйттеләр. Минә ҡыҙымдың башҡорт, рус, немец телдәрен өйрәнгәндән һуң улар арҙамында ниндәй мөмкинлектәре барлыҡҡа килеүе мөһим ине. Маҡсат ысулды аҡлай тиҙәр.

Полилингваль гимназия барлыҡҡа килгәндә уҡ, республикабыҙ Башлығы билдәләүенсә, туған телдәрҙе һаҡлау төп маҡсатарыбыҙҙың береһе булғайны. Иң беренсе нәүбәттә туған башҡорт, туған рус, ике дәүләт телдәрен күҙ уңында тотоҡ. Тел модалы, тел заманса булырға тейеш, тигән һүҙҙәр ҙә әйтелде ул саҡта.

Беҙҙең республикала полилингваль мәғарифты үҫтереү концепцияһы буйынса ике модель бар. 1-се моделгә 100 проценты менән бер милләт вәкилдәре йәшәгән урында асылған мәғариф учреждениеһы ҡарай: мәҫәлән, башҡорттар, удмурттар, татарҙар, мариҙар. 2-се моделгә төрлө милләт вәкилдәре белем алыусы Өфө ҡалаһының беҙ эшләгән гимназиялары инә. Уларҙың барыһы ла башҡорт телен өйрәнмәгән хәлдә лә, башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, сәнғәте менән таныша.

Беҙҙә инглиз, немец телдәрен тәрәнәйтеп өйрәнгән кластар бар. Улар беренсе кластан алып ошо телдәрҙе, шулай уҡ рус, башҡорт телдәрен өйрәнеп, хәҙер республикала һәм федераль кимәлдә үткән олимпиадалар еңеүселәре. Бында шулай һығымтаға килергә була: үҙенең туған теленән тыш, башҡа телдәрҙе лә өйрәнеүселәр тормошта ҙур уңышҡа өлгәшә алалар.

**Ришат КАМАЛОВ:** Мин Наил Радик улы менән килешәм, күп тел белеүҙең әһәмиәте сикһеҙ. Барлыҡ башланғыстарҙың башында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров торҙо, уға ҙур рәхмәт. Полилингваль гимназиялар асыу башҡорт телен өйрәнеүгә яңы мөмкинлектәр асты. Шулай уҡ республикалағы башҡа телдәрҙе өйрәнеүгә лә быға булмаған юл һалынды. Ысынлап та, хәҙерге заман шарттары баланан күп телдәрҙе белеүҙе талап итә. Айти, яһалма интеллект яҡшы, әммә улар барыһы ла интернетҡа бәйле. Әгәр ҙә интернет йә электр уты һүнһә, уларҙың барыһы ла юҡҡа сыға. Ә тел, хәтер, мейе, күңел кешенең үҙендә тороп ҡала һәм был эшмәкәрлек өсөн интернет та, электр энергияһы ла кәрәкмәй. Ул көн-төн тимәй эшләй, уның хатта батарейкаһы ла ултырмай.

Кеше белергә тейешле иң тәүтел - ул туған теле, әсәйең донъяға килтергән, сәңгелдәк йыры йырлаған тел. Беҙҙең гимназияла инглиз, испан һәм ҡытай телдәренә өҫтөнлөк бирәбеҙ. Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙ немец телен өйрәнмәйбеҙ, сөнки уҡытыусы юҡ, юрғанабыҙға ҡарап аяғыбыҙҙы һуҙабыҙ. Кадрҙар барыһын да хәл итеүен иҫәпкә алып, үҙебеҙҙә булған кадрҙарҙан сығып эш итәбеҙ.

Күп тел белеүселәр - улар универсаль кешеләр. Улар үҙҙәрен башҡаса тота, фекерләүҙәре үҙенсәлекле, ҡыҫҡаһы, күп тел белеүсе бала башҡаларҙан айырылып тора. Улар тынысыраҡ та, тыйнағыраҡ та, башҡа милләт вәкилдеренә, уларҙың телдәренә, мәҙәниәтенә ҙур ихтирам менән ҡарай беләләр. Сөнки ундай кеше сит милләттең теле аша уның тарихын, мәҙәниәтен, сәнғәтен үҙләштерә. Әгәр ҙә сит тарафҡа барып, унда йәшәгән кешеләргә уларҙың туған телендә өндәшһәң, ситтәр һине яҡын күреп, үҙенеке итеп ҡабул итә. Һиңә ҡарата яғымлы мөнәсәбәт тә барлыҡҡа килә. Күп тел белеүҙең бер әһәмиәте ошоға ла бәйле. Туған телендән тыш, рус, инглиз телдәре менән генә туҡталып ҡалмаҫҡа кәңәш итер инем хәҙерге йәштәргә.

**Кеше аяғынан һәм мейеһенән башлап ҡартая, тиҙәр. Һәр бер телдә айырым һүҙҙәрҙе ятлау арҙамында өйрәнә башлайһың. Мәҫәлән, туған телендә өйрәнгәндә һүҙҙәрҙе ятлау талап ителмәй. Тимәк, сит тел өйрәнеү хәтерҙе нығытыусы фактор. Хәтере ныҡ кешегә склероз, альцгеймер, деменция янамайҙыр, тип уйланыла. Ошо йәһәттән ҡарағанда, күп тел белеү ғүмерҙе оҙайлы итеүгә лә булышлыҡ итә тип һанай алабыҙмы? Һеҙ быны менән килешәһегеҙме?**

**Наил ӘМИНЕВ:** Двигатель туҡтамай эшләһен өсөн уның туҡтауһыҙ хәрәкәте талап ителгән һымаҡ, мейе эшмәкәрлегендә лә ошондай хәрәкәт кәрәктер. Мәктәпкә барыр алдынан олатайым мәрхүм минә: "Улым, йәки шахмат уйна, йә күп телдәр өйрән", - тигәйне. Ул үҙе шахмат буйынса мастерлыҡҡа кандидат ине, 84 йәшенә тиклем шахмат клубына йөрөнө, өс йыл элек мәрхүм булып китте. Мин дә көнөнә иң кәмендә ун партия шахмат уйнайым. Шуға күрә балаларға был һабаҡты бирергә булалыр: "Йәки шахмат уйнайһың, йәки күп тел өйрәнәһең..." Әгәр ҙә кешенең мейеһе төрлө телдәргә көйләнһә, унда туҡтауһыҙ хәрәкәт проблемаһы хәл ителәләр тип уйлайым.

Мин Сибай ҡалаһында үҫтем, рус телле балалар баҡсаһына йөрөнөм. 1993 йылда ҡалала башҡорт мәктәбе асылғас, башҡортса фекерләргә өйрәнеүе енел булманы. Һунынан Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында эшләгәндә инглиз телен яҡшы белгән уҡыусыларҙың инглиз телендәге йырҙы тыңлап, йыр тексын шундуҡ башҡортсаға әйләндерә алыуына ҡарап һоҡландым. Был гимназияла инглиз телен бик көслө уҡыталар.

**Ришат КАМАЛОВ:** Беҙҙең гимназияға килгән балалар кәмендә ике телде белеп килә. Артабан өсөнсө, дүртенсе телде өйрәнә башлайҙар. Бала бәләкәй сағынан башлап күп телдәрҙе өйрәнеүгә бер өйрәнеп китһә, артабан был механизм автоматҡа әүерелә, йәғни ул артабанғы телдәрҙе еңелерәк үҙләштерә. Был осраҡта уның мейеһе башҡасараҡ үҫешеп, үҙе лә башҡасараҡ фекерләй башлай. Беҙ тыуғанда башҡорт телен генә белә инек, артабан мәктәпкә барғас, рус телен өйрәнә башланыҡ. Хәҙерге балалар ул саҡтағы беҙҙең йәшкә еткәндә өсөнсө, дүртенсе телде өйрәнә башлай. Әгәр ҙә ошоларға тағы ла шашка, шахмат килеп өҫтәлһә, үҫеш тағы ла йылдамлаша.

**Наил ӘМИНЕВ:** Беҙ иһә алты йәштәге балаларға әҙерлек кластарында башҡорт, рус, инглиз телдәрен өйрәтә башлайбыҙ. Балалар 1-се класҡа килгәндә башҡорт телен өйрәнергәме-юҡмы тигән мәсьәлә килеп тыуһаһын өсөн беҙ гимназияла башҡорт теле уҡытыусылары иң шәптәре, башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттары иң яҡшыһы булырға тейеш, тигән бурыс ҡуйғанбыҙ. Һәр хәлдә, Башҡортостанда был шарт талапҡа әйләнергә тейештер тип уйлайым. Ни өсөн шулай? Сөнки байтаҡ ҡына башҡорт ата-әсәләре балаларын башҡорт класына бирергә теләмәй. Әгәр ҙә ғаиләлә ошондай хәл килеп тыуһа, мәктәптәге хәл-торошто үҙ күҙҙәре менән күргән бала, ата-әсәһенең фекеренә ҡаршы барып, башҡорт класында уҡырға теләк белдерһен өсөн кәрәк был шарттар.

2022 йылдан башлап беҙҙең гимназияла эшләүсе биш башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ҡалала, республикала иң алдынғыларҙан һанала, улар "Йыл уҡытыусыһы" конкурсы еңеүселәре. Үткән йыл улар Бүрәт Республикаһында үткән Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашты. Әле грантта еңеп сығып, этнокабинет-тирмә эшләнек. Уны асыуға Бүрәт Республикаһынан, Алтайҙан, Осетиянан ҡунаҡтар килде. Хәҙер башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре ошо тирмәлә үтә.

**Күп телдәрҙе белеүселәрҙең фекерләүе, яҙыуы үҙенсәлекле, бер кемдекенә лә оҡшамаған булғаны ла сер түгел. Миҫалға Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҙмаларын ғына алайыҡ. Ике йәки унан да күберәк тел белеүсе кешенең яҙған мәҡәләһенең, әҙәби әҫәренең үҙенсәлеген аңлар өсөн шундай миҫал килтерәйек. Әйтәйек, беҙ, башҡорттар айыуҙы үкереүенә ҡарап "айыу" тип атаһаҡ, якуттар бабайға оҡшатып "баавгай", рустар бал ашауына ҡарап "медведь" ти. Ошо өс телдә лә белгән яҙыусы айыу хаҡында әҫәр ижад иткәндә был йәнлеккә өс төрлө күҙлек аша ҡарай, образын өс юҫыҡтап сығып тыуҙыра. Йәки булмаһа, беҙ емеше ҡара төҫтә булғаны өсөн "ҡарағат" тиһәк, рустар еҫенән сығып емеште "смородина" (смрад) тип атай. Бындай миҫалдарҙы тағы ла бик күп килтерергә мөмкин булыр ине. Ошоларҙан сығып шундай һығымта яһарға мөмкин булыр ине: өс телдә белеүсе кеше тикшереү проблемаһына өс күҙлектән ҡарап эш итә, уларҙың синтезын барлыҡҡа килтерә, сағыштыра, инҡар итә һ.б. Һеҙҙең уҡыусыларығыҙ араһынан ошондай синтез арҙамында уңышҡа өлгәшеүселәр бармы?**

**Наил ӘМИНЕВ:** 2019 йылда мәктәптә асҡанда беҙҙә инглиз теле кластары барлыҡҡа килде. Ул йылда 1-се класҡа барыусылар хәҙер 7-се класта уҡыйҙар. 3-сө класҡа беҙгә Кәримова Рилана тигән ҡыҙыҡай килде, ул бер йыл уҡығандан һуң 4-се "Л" класына күсте. Инглиз телен яҡшы белә. 8-се кластан алып 5 олимпиадала ҡатнашып, төбәк кимәлендә еңеп сыҡты. Предметтары: инглиз теле, экология, йәмғиәт белеме һәм рус теле. Экологиянан Рилана Рәсәй кимәленә үтте. Республикала ул 111 балдан 107 бал йыйҙы. Башҡортостан Республикаһы командаһы составында 8 бала менән ул Вологда ҡалаһына барып еңеп ҡайттылар. Әле ул ҡыҙ экология дисциплинаһы булған теләгән юғары уҡыу йортона имтиханһыҙ инә ала. Бик уникаль уҡыусыбыҙ ул.

Тағы бер миҫал. Юлдаш Йосоповтоң улы Алтынмәргән беҙҙә уҡый. Ул 2019 йылда беҙгә 1-се класҡа килде. Шулай уҡ "Л" класында уҡый, инглиз, немец телдәрен яҡшы белә. Ул 7-се класта уҡығанда бөтә Рәсәй олимпиадаһында 9-сы класс өсөн сығыш яһап, еңеүгә өлгәште. Алтынмәргән төрлө яҡлап үҫешкән, ул ғилми эш менән шөғөлләнеп, "Башҡортса-русса-ҡырғыҙса" һүҙлек төҙөнө. Әле атаһы менән бергәлән ғәрәп телен өйрәнәләр. Өҫтәүенә, гимназияла "Кәрәсин" тигән рок төркөмө асты. Егет башҡорт мөхитендә үҫеп, башҡорт телен шәп белә, немец, рус телдәрен яҡшы үҙләштерҙе. Беҙҙең "Л" класында уҡыусылар араһында ундайҙар бихисап.

**Ришат КАМАЛОВ:** Полилингваль класта уҡыусылар физика-математика класында уҡығандарға ҡарағанда коммуникация, йәғни аралашыу йәһәтенән әүҙемдәр. Образлы итеп әйткәндә, "физматтар" бер коридор буйлап китеп тик баралар. Әлбиттә, мин бында физика-математика класында уҡыусыларҙы кәмһеткем килмәй. Ә полилингвистар универсаль була алалар, уларҙың күп тел белеүе һәр төрлө ҡатламдарға тиҙ генә үтеп инеү мөмкинлеге бирә.

Беҙҙә лә бер универсаль бала бар. Ул өс тел белә, музыка ағынан да һәләтле, фортепианола, скрипкала уйнай. Күп кенә конкурстарҙа, олимпиадаларҙа урындар алды. Былтыр испан теле буйынса олимпиадала еңеүсе булды, быйыл призерға сыҡты. Руслан исемле тағы бер егет инглиз теленән республикала еңеүсе булды, үҙе спорт менән шөғөлләнә.

**Наил ӘМИНЕВ:** Республикаға ҡараған уҡыу йорто һаналһаҡ та, беҙ муниципаль мәктәп функцияһын да үтәйбеҙ. Ни өсөн тигәндә, бөтә кластар ҙа лингвистик була алмай. Әйтәйек, 1-се

✓ *Мәктәптә балаға ни тиклем күберәк көсөргәнеш һалһаң, уға алдағы тормошонда шул тиклем еңел буласаҡ. Бала сағында ул ни тиклем күберәк эшләп өйрәнһә, тормошонда күпкә өлгәшә ала.*



# ФРАНЦУЗСА БЕЛГӘН ЯҠШЫ...

класҡа 300 бала килә икән, уларҙан 20-25 кенә баланы ошо класҡа алабыҙ. Ҡалғандары дөйөм белем биреү системаһы буйынса уҡый. 5-се кластан һуң медпрофилға, лингвистик профилға бүленәбеҙ, өсөнсө профиль - шайморатовсылар.

"Л" класына килгәндә инде, унда осраҡлы балалар уҡымай. Ундағы балаларға ата-әсәләр тырышлыҡты күп һала. Шундай ҙа хәләр була: бала ялҡау, ығыш, әммә тәбиғәте буйынса һәләтле, аҡыллы. Йәғни "Л" класында уҡыған балаларҙың уңышы уларҙың ата-әсәһенән дә килә. Беҙҙә 1-се "Л" класы инглиз-башҡорт телдәре буйынса махсуслашҡан. Унда "Тирә-яҡ мөхит" дәресе башҡорт, рус телдәрендә, тағы ла аҙнаһына өс сәғәт башҡорт теле, дүрт сәғәт инглиз теле уҡытыла. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бөтән милләт ата-әсәләре балаларын фәҡәт ошо класҡа биргеһе килә. Беҙҙең гимназияла башҡорт теленең популярлығы шунда: 26 баланан торған 1-се "Л" класында башҡорт булмағандары 9 бала. Улар бөгөн башҡорт телен бик яҡшы белә. Уларҙың араһында Алесяның ата-әсәһе рус милләтенән, улар ҡыҙҙарының был класта уҡыуына ҡыуанып бөтә алмай.

▶ **Полилингваль класта уҡыусылар башҡа кластар менән бергә дөйөм дәүләт имтиханын, берҙәм дәүләт имтиханын бирәме? Махсус класта уҡыуҙары был имтихандарға ҡамасауламаймы?**

**Наил ӘМИНЕВ:** Эйе, барлыҡ кластар менән бер рәттән, имтихан бирәләр. Осетияла полилингваль белем биреүҙең Осетия моделы бар. Улар 15 йыл буйына Юнеско кафедраһы менән берлектә ошо моделды әҙерләгән. Уларҙа 1-се кластан 4-се класҡа тиклем барлыҡ предметтар ҙа тик осетин телендә уҡытыла. Шул уҡ ваҡытта гимназияла уҡыусылар 100 проценты менән осетин милләте балаларынан тора. Уларҙың балалары әле 9-сы класҡа килеп етәләр. 4-се класты тамамлағанда балалар имтихандарҙы осетин телендә биргән. Фәҡәт Бөтә Рәсәй тикшереү эшен (ВПР) генә улар рус телендә тапшырған. Шунан нисек килеп сыҡҡан тиһегеҙ? Эйе, барлыҡ предметтарҙы осетин телендә уҡыған балалар имтихандарҙы башҡа мәктәптәргә ҡарағанда күпкә яҡшыға тапшырған. Быйыл ул балалар төп дәүләт имтиханын (ОГЭ) тапшырасаҡ. Һөҙөмтәләрҙе түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ. Осетиндар әлегә шундай һығымта яһай: балалар башланғыс кластарҙа барлыҡ предметтарҙы ла үҙ туған телендә уҡыһа, киләсәктә ул балаларҙың белем алыуҙа проблемалары булмаясаҡ.

Өфө фән һәм технологиялар университетының Сибай институты уҡытыусыһы, тарих фәндәре кандидаты Фуат Мырҙағәли улы Сөләймәнов әйтеүенсә, Йылайыр районының Сәлим ауылынан сығыусылар мәктәптә башҡорт телендә генә уҡығандар һәм кластарынан өс фән кандидаты сыҡҡан. Улар туған телендә уҡып та башҡаларҙан бер ҙә кәм булмаған.

Беҙҙә күбеһенсә ата-әсәләр туған телдә уҡып, артабан балаларының дәүләт имтихандарын уңышлы биреренә шикләнеп ҡарай. Ә бит практика нәҡ бының киреһен һөйләй

**Ришат КАМАЛОВ:** Беҙҙә Төп дәүләт имтиханы, Берҙәм дәүләт имтиханы күрһәткестәре Рәсәй кимәлендә иң юғарыһы. Наилдың гимназияһына ҡарағанда, беҙҙең уҡыу йорто икенсерәк. Сөнки беҙҙең уҡыу йорто урынында элек урта мәктәп булып, шуны икенсе форматҡа әйләндерҙек. Шуға ҡыйынырыҡ тура килде.

Мин шуны ғына әйтер инем: мәктәптә балаға ни тиклем күберәк көсөргәнеш һалһаң, уға алдағы тормошонда шул тиклем еңел буласаҡ. Бала сағында ул ни тиклем күберәк эшләп өйрәнһә, тормошонда күпкә өлгәшә ала. Сөнки хәҙерге ваҡытта мәғлүмәт шул тиклем күп килә, уны ҡабул итеп һәм эшкәртеп өлгәрөп булмай. Был директорға ла, уҡытыусыға ла, ата-әсәләргә лә, уларҙың балаларына ла берҙәй үк ҡағыла. Беҙгә өлгәрөп ҡалырға кәрәк. Мәскәүҙә метрола йөрөгәнегеҙ бармы? Унда аҙерәк кенә туҡталып ҡалһаң, тапап үтеп китәләр.

▶ **Полилингваль мәктәпте тамамлаусы уҡыусыларҙың үҙ карьераларын үҫтереүҙә, сит ил юғары уҡыу йорттарында белем алыуҙа ниндәй өҫтөнлөктәре бар?**

**Ришат КАМАЛОВ:** Беҙ балаларыбыҙҙы сит ил юғары уҡыу йорттарында белем алырға әҙерләмәйбеҙ. Уларға, республикабыҙға, илебеҙгә тоғро булып ҡалырға тейешһегеҙ, тип өйрәтәбеҙ. Был һүҙҙәрҙе һәр бер осрашыуҙа, сарала әйтергә тырышабыҙ. Һуңғы арала сит илгә киткән балалар һаны байтаҡҡа кәмене. Күбеһе үҙебеҙҙең уҡыу йорттарына инеп, яҡын-тирәлә ҡалырға тырыша. Беҙҙә шарттар, уҡыу сифаты бик юғары, юҡҡа ғына беҙҙең уҡыу йорттарына, бигерәк тә Башҡорт дәүләт медицина университетына сит илдәрҙән килеп уҡымайҙар. Өфө нефть техник университе ла ныҡлы белем бирә, әле Евразия кампусы төҙөлә. Шуға балаларыбыҙға үҙебеҙҙә ҡалыу күпкә яҡшыраҡ һәм уңайлыраҡ.

Карьера мәсьәләһенә килгәндә, полилингваль мәктәпте тамамлаусыларҙың универсаль булыуы үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләй. Ундай кеше ҡатмарлы ситуацияларҙан сығыу юлын да тиҙ таба, башҡаларҙы ла үҙенең артынан эйәртә ала.

**Наил ӘМИНЕВ:** Бөтә балалар ҙа Төп һәм Берҙәм дәүләт имтихандарын бирә ала. Теләйбеҙме-юҡмы, ошоға тиклем бер баланың да мәктәптә ултырып ҡалғаны булманы. Күпмелер ваҡыттан һуң уларҙың имтиханда алған билдәләре лә, йыйған балдары ла онотоласаҡ, иң мөһиме - баланың ошо донъяла үҙ урынын табыуы. Бала ғаиләһендә алған ҡиммәттәре, мәптәптә, уҡыу йортонда алған белемдәре ярҙамында тормошта үҙ урынын табырға тейеш. Әгәр ҙә бала беҙҙең полилингваль мәктәптә уҡып, әйтәйек, электрикка уҡып, һөнәрен табып, ғаиләһен ҡороп, хеҙмәте ярҙамында үҙенең ғаиләһен тәьмин итә алһа, беҙ үҙебеҙҙең алда торған бурысты үтәгән булырбыҙ. Әгәр ҙә ул өс йәки дүрт тел белеп, үҙенең ошо миссияһын үтәй алмаһа, беҙҙең бурыс атҡарылмаған булыр.



▶ **Бер кемгә лә сер түгел, туған тел һәм дәүләт теле булараҡ башҡорт телен өйрәнеүҙең билдәле ҡаршылыҡтары, ауырлыҡтары бар. Әммә һеҙҙең уҡыу йорттарының полилингваль тип аталыуы башҡорт телен өйрәнеүгә күпмелер шарттар барлыҡҡа килтергән. Сөнки күп телдәр араһында башҡорт теле лә бар. Шулай түгелме?**

**Наил ӘМИНЕВ:** Документ буйынса беҙ шул уҡ дөйөм белем биреү мәктәбе кеүек. Беҙ бойороҡ буйынса шулай уҡ микрорайон принцибы буйынса ла балаларҙы мәктәпкә алырға бурыслыбыҙ. Ә күп телдәрҙе белеүҙе беҙ ата-әсәләр араһында аңлатыу эштәре алып барып ҡына ойоштора алабыҙ.

▶ **Хәҙерге мәктәптә уҡытыусылар ҙа, уҡыусылар ҙа, балалар ҙа бары бер маҡсат менән йәшәгән кеүек. Ул да булһа - туғыҙҙы бөткәс, Төп дәүләт имтиханын, ун беренсене тамамлағас, Берҙәм дәүләт имтиханын нисек бирергә, тигән хәстәр. Шул уҡ ваҡытта тәрбиә бөтөнләй икенсе планға күскән һымаҡ. Һуңғы ваҡытта мәктәптәрҙә күҙәтелгән күңелһеҙ ваҡиғалар шул турала һөйләй. Был хаҡта һеҙ нимә уйлайһығыҙ?**

**Наил ӘМИНЕВ:** Ришат Марс улы менән беҙ 2019 йылда әле мин эшләгән уҡыу йортон астыҡ. Беҙгә Дим районының 8 мәктәбенән балалар килде. Һайлап алырға тура килде. Төүге ике йылда беҙ тик тәрбиә эше менән булдыҡ. Ул саҡта хатта ҡала кимәлендә олимпиадала ҡатнашыусылар беҙҙән булманы.

Тәрбиәне бәҙрәфкә йөрөргә өйрәтеүҙән башланыҡ. Унда камералар юҡ һәм баланың эске донъяһы тап бәҙрәфтә туранан-тура сағыла. Әгәр ҙә ул урында тәртип булмаһа, тотош мәктәптә тәртип булмаҫы көн кеүек асыҡ булды. Ришат Марс улы менән беҙ актовый залда егеттәрҙе саҡырып алып, тәрбиә эше алып барҙыҡ, урынбаҫарҙарыбыҙ ҡыҙҙарҙы йыйып һөйләште. Артабан барыһының да берҙәм форма кейеүен талап иттек. Беҙгә ниндәй генә балалар килмәне: һигеҙенсе, туғыҙынсы кластарға килделәр. Унынсыға колледжарға уҡырға инә алмаусыларҙы ҡабул иттек хатта.

▶ **Ул ҡараш ҡасан барлыҡҡа килгәндер, ни өсөн ата-әсәләр барыһын да мәктәп эшләргә тейеш тип ҡарай хәҙер, нисек уйлайһығыҙ?**

**Ришат КАМАЛОВ:** Әлбиттә, был дөрөҫ түгел. Әммә шундай тенденция бар хәҙер. Ата-әсәләрҙең барлыҡ проблемаларҙы мәктәпкә ауҙарыуы илебеҙҙә барған башҡа үҙгәрештәрҙең дә һөҙөмтәһелер. Бала мәктәпкә килеп инеп, дәрестәр тамамланып, йортоноң ишеген асып ингәнгә тиклем уның өсөн беҙ яуаплы булып торабыҙ. Был хәлдә мәктәп үҙе генә тәрбиә алмай, бында ата-әсәләр, уҡыусылар үҙҙәре, администрация менән берлектә генә эш итергә тейештер. Тәжрибәмдән сығып шуны ғына әйтә алам: иң еңеле баланың үҙе менән һөйләшеп, мәсьәләне хәл итеүе. Бала менән һөйләшеп килешеп була, әммә ата-әсә менән һөйләшеп килешеүе ауыр. Шулай ҙа адекват ата-әсәләр күберәк.

▶ **Шундай күренеш тә бар: шәхестәр күп осраҡта яҡшы уҡыған, өлгөлө, тәртипле балаларҙан түгел, ә насар уҡыған, ҡанундарҙы һанға һуҡмағандарҙан барлыҡҡа килә. Ошо хаҡта нисек уйлайһығыҙ?**

**Наил ӘМИНЕВ:** Беҙ һәр ваҡыт ниндәйҙер күренеште совет осорондағы мөнәсәбәт, тәртип менән сағыштырып, элек яҡшы булған тип әйтергә яратабыҙ. Хәҙер совет осоро күптән тарихта ҡалды. Ул саҡта етәксе органдар, партия баланың балалар баҡсаһынан алып мәктәптә, уҡыу йортонда, тормошта нисек булырға тейешлеген алдан билдәләгән. Ул заман кешеһенең моделе аңлашылып тора ине: бына ул өлгөлө кешенең әхлаҡи кодексы, бына юғары уҡыу йорто, бына һиңә эш урыны, бына фатир, бына карьера һ.б. Шуға күрә ул ваҡытта өлгөлө булыуы еңел булғандыр. Хәҙер иһә ундай юл булмағас, һеҙ әйткән ҡанундарҙы һанға һуҡмағандарға мөмкинлектәр асылды инде.

Әлеге мәғариф системаһында был стереотип емерелә бара. Сөнки бала, үҫмер коллективта, йәмғиәттә үҙен нисек күрһәтә, артабан да шул юлдан китә. Хәҙер тырышлыҡ, көсөргәнеш һалмайынса, мәғжизәгә ышанып ҡына йәшәп булмай. Сөнки хәҙерге мәктәп төрлө йүнәлешле һәм төрлө яҡлы, унда совет осорондағы кеүек аныҡ юл, йүнәлеш юҡ.

**Ришат КАМАЛОВ:** Килешәм, сөнки һәр бала үҙенең ризығы, юлы менән тыуа. Әгәр ҙә ул тәрбиәле, тырыш булһа, ул юл еңелерәк бирелә.

▶ **Уҡыусыларығыҙға ҡарап, уларҙың киләсәктә кем булырын төҫмөрләй алаһығыҙмы?**

**Ришат КАМАЛОВ:** Төҫмөрләп була. Табиптар кешенең үҙен нисек тотошона, кәйефенә ҡарап, һаулыҡ торошон әйтә ала бит. Ундай һәләт беҙҙә лә бар. Баланың кейеменә, кәйефенә, ғаилә хәленә, эске донъяһына, тегә йәки был хәлгә мөнәсәбәтенә ҡарап уның киләсәктә кем булырын төҫмөрләп була.

**Наил ӘМИНЕВ:** Мин бында күберәк унан кемдер килеп сығыуын теләйемдер ул. Гимназиябыҙҙы тамамлаусыларға аттестат тапшырғанда үҙем мәктәп тамамлаусыларҙың рус теле уҡытыусыһының һүҙҙәрен ҡабатлап: "Киләсәктә кем генә булһағыҙ ҙа, һеҙҙең иң төп бурысығыҙ тормош юлдашын табыуығыҙ. Һеҙҙең киләсәгегеҙ шуға бәйле буласаҡ", - тип әйтәм...

▶ **Ҡыҙыҡлы һәм фәһемле әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт һеҙгә, Наил Радик улы, Ришат Марс улы! Еңел булмаған хеҙмәтегеҙ өсөн уҡыусыларығыҙҙың рәхмәт һүҙҙәре башҡорт һәм башҡа телдәрҙә яңғырауын теләйем.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Бер эшелон тейәлеп, илдән айырылып, киттеләр белмәгән-күрмәгән ерҙәргә. Туҡтауһыҙ барҙылар. Әҙәм ҡырылған ҡара яу ҡырҙарына ла яҡынлаштылар. Украина еренә, Днепр буйына килеп еттеләр.***



**Бөйөк Еңеүгә - 81 йыл**

*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# ҺУҒЫШ ӨЙӨРМӘҺЕНДӘ

*Хикәйә*

1943 йылдың ғинуарында Ҡунаҡбай ауылының ун һигеҙ йәше тулған ун бер егетенә армияға алыныуҙары тураһында ҡағыҙ тотторҙолар. Фуат өсөн был ғәҙәти хәл тойолдо. "Һуғыш сыҡҡан!" тигән яман хәбәр килгәндән һуң ауыл алтмышлаған ир-егетен яу ҡырына оҙатҡайны инде. Көн үтә, ай үтә, һуғыш, әҙәм йотҡан аждаһалай, инде йәшелкенсәкте лә һура. Ауыр ҙа, борсоулы ла мәл. Әммә тәҡдирҙән ҡасып булмай.

Атаһы Фуаттың һалдатҡа алыныуына башҡалар һымаҡ һушы алынып көймәй: "Егет кеше ер кеүек, ул ауырлыҡ күтәрә", - ти ҙә ҡуя. Үҙе дүрт йыл хәрби хеҙмәттә, өс йыл Герман һуғышында йөрөгән. Кавалерист, полк командирының ат тотоусоһы, ординарецы ла булған. Шулай ҙа күҙ ҡараһылай улының бөтөнләй башҡа алышҡа китәсәген уйлап, һиҙҙермәй генә хафалана. Артыҡ мохтажлыҡ күрмәй, ғазап сикмәй үҫкән балаға әрмегә һәм артынса уҡ яуға китеү ау-йәтмәгә эләгеү һымаҡ тойолмаһа, ауыр хис-кисерештәргә дусар ҡылмаһа ярай ҙа... Шуныһы тынысландыра: улы үҙенә оҡшаған, түҙер, бирешмәҫ.

Атай менән инәй шым ғына һөйләшеп, кәңәшләшеп, ғәзиз улдарының өҫ-башын хәстәрләй, юлына аҙыҡ-түлек әҙерләй. Бына хушлашыр мәл дә етте. Фуаттың аяғында - сарыҡ, өҫтөндә - тула сәкмән, ҡулында - кисә генә бәйләнеп бөткән йөн бейәләйҙәр. Өрәңы беше тоҡҡа сохари, ҡаҡланған ҡаҙ, әпәй, бешкән бәрәңге, ҡорот, йәнә ойоҡ, бейәләй, таҫтамал, һабын, ҡәләм, дәфтәр һалынып, ауыҙы ҡыҫып бәйләнгән. Тиҫтерҙәренең өҫтөндә иһә әллә ни юҡ, ризыҡтары ла таҡыр, тоҡсайҙа ғына. Бөтәһе лә етеш йәшәмәй шул. Мәгәр күңелдәре киң. Ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға: "Юлығыҙ аҡ, күңелегеҙ пак булһын!" - тип, хәйерле тараф теләп, оҙатып ҡалды.

Тәүҙә Учалы ауылында йыйылдылар. "Юшалы" күмәк хужалығының дүрт бригадаһынан да Фуат менән утығып үҫкән егеттәр бар. Ҡунаҡбайҙан 110 саҡырым алыҫлыҡта ятҡан Мейәскә һәр ат арбаһына дүрт-биш центнер ашлыҡ тейәп алып барған, ҡайтышлай төрлө хужалыҡ кәрәк-ярағы, кәрәсин алып ҡайтҡан, бөтә юл ғазабын бергә татыған малайҙар. Бер-береһен күреп, күрештеләр, ҡыуаныштылар.

Яйыҡ башынан алынғандарҙың барыһын Түңғатарҙа тупланылар. Бында дүрт-биш егеткә бер егеүле ат һәм оҙатыусы беркеттеләр. Таныш ылау, инде әрме юлынан Мейәс ҡалаһына барып еттеләр. Тимер юл станцияһынан йыраҡ түгел ташландыҡ баракта урынлаштырҙылар. Ни табыла, шуны түшәп, өшөп, кейенгән килеш иҙәндә йоҡлап, аҙна буйы яттылар, нишләргә белмәй зарығышып бөттөләр. Фуат ата-инәһе хәстәрләгән, һарыҡ йөнөнән һуғылып, кейеҙләп баҫылған туҡыманан тегелгән тула сәкмәндең йылыһын, ҡәҙерен бында нығыраҡ тойҙо.

Ниһайәт, сафтарға теҙеп, белешеп, ете һәм унан юғары синыф бөткән алтмышлаған егетте һайлап, вагондарға ултырттылар. Бөтәһененең дә телендә тынғы бирмәгән бер һорау:

- Беҙҙе ҡайҙа алып баралар икән?..

- Тамуҡҡа түгел, ҡурҡмағыҙ, - тине әйҙәүсе көлөп. - Ни бары офицерҙар әҙерләүсе училищеға.

- Ҡайҙа ул училище?

- Бына, әй, һеҙгә барыһын да белергә кәрәк. Барғас күрерһегеҙ...

Яйыҡ егеттәренә исеме ятыраҡ тойолған Быҙаулыҡ тигән ҡаласыҡҡа килеп төштөләр.

- Быҙаулыҡ... Ҡалай ирмәк исем! Бәлки, был яҡта Һыйырлыҡ та барҙыр әле.

- Нимәһе ирмәк? - тине Түңғатарҙан олораҡ йәштәге бер сая егет. - Хәйбулла яҡтарында Таналыҡ йылғаһы ла бар. Наҙанлығығыҙҙы күрһәтмәгеҙ, белмәгәнегеҙҙе һөйләп тормағыҙ!

Ятырға бойорҙолар. Фуат бүҫкәрә биргән тоғон баш аҫтына һалып, шундуҡ күҙҙәрен йомдо. "Подъем!" тип ҡаты ҡысҡырыуға тертләп уянды. Ах, шайтан!.. Төндә тоғон бысаҡ менән телгәндәр, бер нәмәне ҡалдырмай сәлдергәндәр. Был урындағыларҙың ғына эшелер, моғайын, сөнки юлдан килгәндәр арып-талып, барыһы ла үлек һымаҡ йоҡоға талғайны. Ярай әле иртәнән үк ашханаға йөрөтә башланылар.

Хәрбиҙәр килеүселәрҙе төркөмләп әңгәмәләшергә саҡырта башланы. Инеп сыҡҡандар төрлө һорауҙар биреп, белем кимәлдәрен, русса белеү-белмәүҙәрен тикшереүҙәрен әйтте. Әлбиттә, ауыл егеттәре йүнләп русса белмәй. Етмәһә, килгәндә поезд тәгәрмәстәре шаҡылдауы ҡолаҡтарын томалаған. Фуаттың да башы һаман шаулап тора. Һынау тоталамы, юҡмы инде? Сикәләре ағарған оло ғына офицер бик һынсыл ҡарап:

- Когда образована Рабоче-Крестьянская Красная Армия? - тине.

Егет яуап ҡайтарманы. Аптырап ҡарап тик торҙо.

- Тогда скажи мне, кто есть Семен Михайлович Буденый?

Хәрби кейемдәге олпат кешеләр алдында ҡаушап, Фуат алйып ҡалды, бөтөнләй хәтерен юйҙы. Аңра һарыҡ шикелле, һорауҙарының мәғәнәһен төшөнмәй "а-а-а?" тип торғас, уны сығарып ебәрҙеләр. "Туң, наҙан" тигәндәрҙер инде. Ҡайһылай оят, ғәрлек!.. Алтмыш егеттең егермеһен генә училищеға алдылар.

Яҙмыштан уҙмыш юҡ, тип, ҡалғандарға үҙ-ара уфтанышырға ғына ҡалды. Уфылдашҡандарҙы шундуҡ Быҙаулыҡтан да ебәрмәнеләр, дүрт-биш саҡрымдағы йылға буйы әрәмәлегенән яғыулыҡ өсөн ҡороған ағас, ботаҡ-сатаҡ ташырға ҡуштылар. Фуаттың аяғындағы сарығы туҙҙы, сылғауы күренә, сәкмәне йыртыла башланы. Башҡалар ҙа өтәләгән әтәскә оҡшап ҡалды. Бер-береһенә ҡарашып, ирештерешкән, мәрәкәләшкән булалар:

- Әфисәрҙәрме тиһәм, меҫкендәрсе...

- Беҙ, йолҡоштар, телһеҙ байғоштар сыбыҡ-сабыҡ ташырға ғына эшкинәбеҙ шул.

Кемдер төшөнкөлөккә бирелеп, өләсәһенән отҡан бәйетте әйтеп ебәрҙе:

*Тыуған ерҙән айырылып,*
*Йөрөүҙәр бәлә икән,*
*Ошо һуғыш арҡаһында*
*Күрәсәктәр бар икән...*

Бер буранлы төндә уятып, сафҡа теҙеп, атлатып та, йүгертеп тә ҙур ғына ауылға алып барҙылар. Иҫке мәктәп йортонда урынлаштырҙылар. Һалдат кейеме кейҙерҙеләр, отделение, взводтарға бүлделәр. "Йолҡош"тар күҙ алдында танымаҫлыҡ һомғол егеттәргә әүерелде лә ҡуйҙы. Һуғыш ҡоралдары тоттороп, улар менән ҡайһылай эш итергә өйрәтә башлағастары, кәйефтәре тағы ла күтәрелде. Погондар ҡайтанан булдырылып, хәрби дәрәжәләрҙең ни икәнен дә төшөндөрҙөләр. Ашау ғына шәптән түгел. Юҡ-юҡта ауылға сыҡһалар, ҡатындар бәрәңге, икмәк, һөт, ҡатыҡ биргеләй.

1943 йылдың апрелендә йәш һалдаттарҙы ниңәлер Әлкәләге хәрби лагерға ебәрҙеләр. Бер ротаға иҫәпләнгән, ер өҫтөнән аҙыраҡ ҡына ҡалҡып торған бәләкәй тәҙрәле еүеш ер өйгә килтереп индерҙеләр. Ярты йыл ошонда тоттолар. Йомро ағастан балта менән ярып, арлы-бирле ҡоролған өс ҡатлы һикеләр - ял итеү, йоҡлау урыны. Бында ла ҡытлыҡ, егеттәрҙең эсендә бүреләр олой. Бирелгән шәкәрҙе йәшереп йыйып, лагерҙан сыҡҡанда бәрәңге йәймәһенә алмаштырып алғылайҙар. Барыбер күҙҙәр ҙә, ҡарындар ҙа ас. Ҡайнатылмаған мамыҡ майы эсеп, эстәре китеп үлгән һалдаттар тураһында һөйләйҙәр. Әле ҡан ҡатыш эсе киткәс, Вәкил исемле егетте ҡайтарып ебәргәйнеләр. Үлеп ҡалыуын ишетеп: "Нимес менән алышҡа ла барып етә алманы, эй-й, меҫкенкәй", - тип, бик йәлләнеләр. Һәйбәт егет ине.

Асҡаҡлау ниндәй генә хәлгә төшөрмәй, яфаға ҡалдырмай. Ашханаға Фуат менән бәрәңге әрсергә барғанда Миңлеғәле һиҙҙермәй генә өс йөҙ грамм самаһы сей ит алған, сәйнәгән-сәйнәгән, ашай алмаған. Ташлаһа булған да бит... Кеҫәһендә бер-ике көн йөрөгәс, ит һаҫый башлаған. Һиҙеп ҡалғандар. Киске тикшереү мәлендә Миңлеғәлене батальон алдына сығарып баҫтырҙылар. Муйынына фанер таҡта, уның өҫтөнә һөрһөгән итте элгәндәр. Егет башын эйгән, бөршәйгән. "Бирән! Уғры! Һәптән бур!" - тип мәсхәрәләнеләр. Төнөн аҫылынырға маташҡанында иптәштәре саҡ ҡотҡарып алып ҡалды уны. Һалдаттар үҙҙәренсә әсенде:

- Этте ашатҡан һымаҡ та ашатмайҙар, ә мыҫҡылларға беләләр.

- Һуғыш тактикаһын да өйрәтмәйҙәр, өйрәтерлек офицерҙары ла юҡ...

Һуҡыр рәүештә хәрби тәрбиә ысулы, аңһыҙ рәүештә муштралау бик көслө ине был ваҡытта Әлкә лагерында.

Һәр йома һайын берәр-икешәр мәртәбә һигеҙ-ун саҡрымдағы урманға әйҙәйҙәр. Бында казарма төҙөү өсөн имән ҡырҡып, өс-дүрт һалдат бер ағас күтәреп килтерә. Ә иртәләрен физзарядка урынына биш саҡырым араға тимер юл разъезынан кирбес килтерергә йүгерәләр. Йәнә утын яралар, арманһыҙ булып арыйҙар.

Бер көн рота гарнизон буйынса дежурға китте, Фуаттарҙың отделениеһы казармала ҡалды. Ефрейтор Киселев подъемдан бер сәғәт алда Фуатты бик ҡаты төрткөсләп, бәргесләп, торғоҙмаҡсы итте. Тартҡылашҡанда, үҙе лә теләмәҫтән, ефрейторға аяғы менән эләктерҙе. Ул өсөнсө ҡат һикенән иҙәнгә йығылып төштө. Нәҡ шул ваҡытта часть дежуры лейтенант Аверьянов килеп сығып, Фуатты һикенән һөйрәп төшөрҙө лә, боғаҙынан матҡып тотоп, йә стенаға бәрә, йә һикегә ҡуша һуға башланы. Фуат уның күҙҙәре аларып, ҡып-ҡыҙыл булғанын күрҙе.

- Атам, сволочь! - Лейтенант, ҡотороп, кобураһын һәрмәне.

Фуат иһә, ҡото алынып, иҫенән яҙҙы.

- Туҡта! Туҡта! Тыныслан! - тип, старшина ярһыған офицерҙың ҡулынан пистолетын ҡайырып алды.

Фуатты ун көнгә гауптвахтаға ябып ҡуйҙылар. Ул шул хәлгә ҡалғанына ифрат та нык көйәләнде. Дуҫы Дәүләтбай: "Ябылып тороу - бер һынау ғына ул. Юҡҡа борсолма, Иҙел кисмәҫ - ир булмаҫ", - тип, ҡайғыһын уртаҡлашты. Һигеҙ йыл хәрби хеҙмәттә йөрөү дәүерендә был уның тәүге һәм һуңғы язаһы булды. Дәүләтбай иһә башҡаларға ҡарағанда аҡыллыраҡ, иплерәк, йыйнағыраҡ, шуға ла Фуат уны туғанындай яҡын күрә.

Тора-бара яу ҡоралдары менән таныштырҙылар, пулеметсы, минометсы, элемтәсе, артиллерист, сапер һөнәрҙәренә өйрәттеләр. Егеттәр һалдат тормошона тамам күнегеп, ҡоралдарын күҙҙәрен йомоп һүтеп-йыйыу оҫталығына өлгәште. Ошолай йәй үтеп, октябрь аҙаҡтарына кесе сержант званиеһы биргәс, Өфө эргәһендәге осоавиахим лагерында өс аҙна самаһы күнекмәләр үттеләр.

- Һеҙҙең тылдағы һалдат хеҙмәте тамамланды. Етер икмәк серетеп ятыу! Инде - фронтҡа, яуға! - тине командирҙар.

Бер эшелон тейәлеп, илдән айырылып, киттеләр белмәгән-күрмәгән ерҙәргә. Туҡтауһыҙ барҙылар. Әҙәм ҡырылған ҡара яу ҡырҙарына ла яҡынлаштылар. Украина еренә, Днепр буйына килеп еттеләр.

Ноябрь айы аҙағы. Алыҫта тоноҡ ҡына гөрһөлдәгән тауыштар ишетелеп ҡала. Артабан - йәйәү. Ике тәүлеккә аҙыҡ бирҙеләр. Дәүләтбай: "Һуғыш хәлен белеп булмай, дуҫ, кәрәге тейер", - тип, баҡсала тороп ҡалған, туңырға өлгөрмәгән бәрәңге-сөгөлдөрҙәрҙе аҫылмалы тоҡтарға тултыртты. Дәртле генә атлайҙар. Нык ҡына ҡар яуҙы, епшеп ята. Гөрһөлдәүҙәр асығыраҡ ишетелә, төндәрен ҡыҙғылт яҡты булып тора. Арҡаларҙағы ауыр тоҡтар хәлде бөтөрә. Ҡырҡ саҡырымлап барғас, Фуат иптәшенә инәлә башланы:

- Атларлыҡ та рәт ҡалманы, ташлайыҡ бәрәңгеләрҙе...

- Аҙыҡтың ауырлығы юҡ. Түҙ!

- Шулайҙыр ҙа... Әммә, ысынлап та, хәлем ҡалманы.

Иң элек сөгөлдөрҙәрен ырғытты. Бара-бара, аҙ-аҙлап, бәрәңгеләрен дә төшөрөп ҡалдыра торғас, тоғо яртылайға бушаны һәм еңеләйҙе. Ике тәүлеккә бирелгән ризыҡ та бөттө.

**(Дауамы бар).**

*✓ Күргәҙмәгә ҡуйылған бөтөн эштәребеҙ ҙә башҡорт эпостарына ("Урал батыр" ҙа бар), сәнғәт төрҙәренә, халыҡ биҙәүестәренә, биҙәктәренә арналған, шулай уҡ төрлө һөнәр оҫталарын - бейеүсене лә, ҡурайсыны ла һ.б. күрергә була.*



ИЖАДХАНА

**Республиканың Милли музейында "Егәрленең аты ла арымаҫ" тип аталған күргәҙмә асылды. Йылҡы малы башҡорт өсөн ирек һәм тоғролоҡ, алға ынтылыш һәм көс-ҡеүәт символы булып тора. Һынлы сәнғәттә ул айырым урын биләй. Рәссамдар ғаиләһе Светлана Фәрит ҡыҙы һәм Дамир Мәхмүт улы Тархановтарҙың ошо темаға үҙ эсенә алған ижад емештәре тарих менән бөгөнгөнө солғай, һәр бер эш рух күтәренкелеге өҫтәп, әҙәм затына булған ышанысты нығыта. "Егәрленең аты ла арымаҫ" тап ошо мәғәнәне асып бирә лә инде.**
**Ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау, үҫтереү, үҙебеҙҙе ураткан мөхитте, халыҡ йолаларын ҡәҙерләү, ата-бабалар ҡалдырған мираҫты баһалау кеүек изге төшөнсәләргә мөрәжәғәт итә Тархановтар. Шуның менән отошло, яҡын һәм ҡәҙерле уларҙың ижады. Бер үк ваҡытта, һынлы сәнғәттең киң мөмкинлектәрен күрһәтә алыуҙары менән иғтибарҙы үҙенә тарта күргәҙмәгә ҡуйылған эштәр.**

# "ЕГӘРЛЕНЕҢ АТЫ ЛА АРЫМАҪ"

**➔ Күргәҙмәнең исеме бик үҙенсәлекле. Милли музей менән хеҙмәттәшлек нисек башланды?**

**Светлана Фәрит ҡыҙы:** Йылҡы малы төшөрөлгән картиналарыбыҙ күп беҙҙең. Был күргәҙмәбеҙ ғаилә ҡиммәттәренә лә, башҡорттоң айырылмаҫ тоғро юлдашы атҡа ла берҙәй арнала. Ғүмеребеҙҙе һынлы сәнғәткә арнаһаҡ та, үҙебеҙҙе ҙур майҙандарҙа күрһәткәнебеҙ булманы. Милли музей менән хеҙмәттәшлек көтмәгәндә башланып китте, тиһәм дә була. Мин музейға боронғо мари күлдәген бүләк иттем. Бер дуҫымдың әсәһе вафат булып ҡалды ла, ошо ҡомартҡы әрәм булмаһын тип, директор урынбаҫары Михаил Владимировичҡа мөрәжәғәт иткәйнем, ул ихлас риза булды. Республика милли музейында Лилиә Барлыбаева менән таныштым. Унда эшләгән күргәҙмәләр менән танышҡандан һуң, йәш рәссамдар матур ижадтары менән ҡыуандыралар, бәлки, беҙгә, Тархановтарға ла, сәнғәт өлгөләрен күрһәтергә мөмкинлек булыр, тинем. Мин ирем Дамирҙың эштәрен генә күрһәтергә теләгәйнем. Фотоларҙы ҡарап сыҡтылар ҙа, бик ҡыҙыҡһынып киттеләр: "Һеҙ бына ниндәй талантлы ғаилә! Әйҙәгеҙ, ижад емештәрегеҙҙе күргәҙмәгә сығарайыҡ",- тип тәҡдим иттеләр. Эште ҡыҙыу тоттолар, тиҙ генә, йәғни өс аҙна эсендә күргәҙмәне ойоштороп та ҡуйҙылар.

**➔ Дамир Мәхмүт улы, һеҙ төрлө йүнәлештә, төрлө жанрҙа берҙәй уңышлы ижад итәһегеҙ, шулаймы?**

**Дамир Мәхмүт улы:** Мин һөнәрем буйынса рәссам-миниатюрсы. Мәскәүҙә Калинин исемендәге һынлы сәнғәт училищеһын тамамланым. "Ағиҙел" предприятиеһында мастер булып ун йыл эшләнем. Артабан "Геральдика" ижади-етештереү үҙәгендә ун йыл эшләнем. Бөтөн гербтарҙы, символикаларҙы беҙ эшләй торғайныҡ. Аҙаҡҡы егерме йылда мин Ханты-Манси автономия округында мәсеттәрҙе биҙәү менән шөғөлләндем. Көмбәҙҙәрҙе, манараларҙы биҙәкләйем, йәғни гипс менән һырлап биҙәйем. Ханты-Мансиҙа меңдән ашыу квадрат майҙанға шул рәүешле роспись яһаным. Сургутта эшләгән сағымда Ҡаҙандан шамаил менән шөғөлләнгән бер дизайнер килгәйне. Минең эштәрҙе күрҙе лә: "Ҡаҙанда ниндәй генә оҫталар булмаһын, береһе лә был тиклем затлы, сифатлы итеп яһай алмай",- тип һоҡланыуын белдерҙе. Аҙаҡ Төркиәнән бер хәҙрәт килде, дини өлкәлә ғалим. Ул да минең биҙәкләүҙе күрҙе лә: "Һеҙ ҡайҙа уҡынығыҙ, Төркиәләме? - тип һораны. - Дөрөҫөн әйткәндә, Төркиәлә лә был профессияға бик һирәктәр генә эйә", - тине.

Урта Азияла был һөнәр төрө "ганч" тип йөрөтөлә, оҫталар "ганчкор" тип атала. Өфөлә иһә мин ундай һөнәр эйәләрен бөтөнләй белмәйем. Ләлә-Тюльпан мәсете биҙәлгән бит, тиерҙәр. Ләкин унда тик керамика ғына ҡуйылған. Мин Сургутта, Нефтеюганскиҙа, Покачи ҡалаларында өс мәсетте биҙәнем. Алда әйткәнемсә, меңдән ашыу квадрат майҙанды гипс менән эшләпбиҙәп сыҡтым. Ханты-Манси автономиялы округының мөфтөйө Таһир Саматов хәҙрәт шул хеҙмәтем өсөн мине миҙал менән бүләкләне. Минең хыялым - йәмиғ мәсете булмаған хәлдә лә, Өфөлә берәй мәсеткә роспись эшләү. Ә был күргәҙмәлә ижадты шаҡтай тулы күрергә була - миниатюраларҙан башлап, ҙур картиналар ҙа бергә ҡуйылды.

**Светлана Фәрит ҡыҙы:** Күргәҙмәгә ҡуйылған бөтөн эштәребеҙ ҙә башҡорт эпостарына ("Урал батыр" ҙа бар), сәнғәт төрҙәренә, халыҡ биҙәүестәренә, биҙәктәренә арналған, шулай уҡ төрлө һөнәр оҫталарын - бейеүсене лә, ҡурайсыны ла һ.б. күрергә була. Минең үҙемә килгәндә, мин кейеҙ аппликация менән шөғөлләнәм, паннолар эшләйем, картиналар араһына ҡуйып, уларҙы биҙәкләйем. Күргәҙмәлә стилләштерелгән башҡорт биҙәүестәре, шулай уҡ башҡорт тематикаһына биҙәлгән тәрилкәләр бар., Йәмғеһе ҡырҡтан ашыу эшебеҙ ҡуйылған.

Беҙҙең ижадты күрһәтергә киң мөмкинлек булдырғандары өсөн Милли музей директоры Рөстәм Әхмәт улына, Лилиә Мәсәғүт ҡыҙына ҙур рәхмәт! Был беҙҙең тәүге ҙур сығыш булды. Быға тиклем Ҡала мәҙәниәт һарайында үҙемдең эштәремде ҡуйғаным бар ине, унда: "Минең менән бар әле", - тип ирем Дамирҙы саҡырҙым. Шулай итеп, беҙҙе таный башланылар, телевидениенан да күрһәттеләр. Ошолай башланып китте тамашасылар менән осрашыу йүнәлешендәге ижади юл. Мин үҙем әкиәтсе лә бит әле. Башҡортса яҙған һигеҙ әкиәтем "Аманат" журналында баҫылып сыҡты. Ул әкиәттәргә иллюстрацияларҙы ла үҙем эшләнем. 2017 йылда журнал редакцияһы "Иң яҡшы йыл яҙыусыһы" тигән номинацияла мине Аҡмулла премияһы менән бүләкләне.

**➔ Светлана Фәрит ҡыҙы, ә һеҙҙең ижад башы ҡайҙа барып тоташа?**

**Светлана Фәрит ҡыҙы:** Ижад юлым Хәтирә өләсәйемдән башлана. Ул Ишембай районының Ғүмәр ауылында йәшәне, ғүмере буйы тегенсе булды. Күлдәктәрҙе генә түгел, тундарҙы, юрған-мендәрҙәрҙе лә ҡул менән теккән ул. Бөтөн ауыл халҡы өсөн тегеп ултырған. Аҙаҡтан ғына, алтмышынсы йылдарҙа, заказдарҙы машинка менән тегә башлай. Бөтөн бала сағым ошо Ғүмәр ауылында үтте. Нимәгә өйрәндем - бөтәһе лә өләсәйҙән. Дамир иһә бәләкәйҙән рәссам булырға хыялланған. Бала сағында тәсле ҡәләмдәр ҙә, буяуҙар ҙа булмаған, һүрәт төшөрөр өсөн юлдарын үҙе эҙләгән. Иҫке өҫтәл япмаһының (клеенкаһының) тиҫкәре яғына күмер менән һүрәттәр төшөрөр булған. Бына шулай башланған уның рәссамлыҡҡа юлы.











**➔ Быуындар күсәгилешлеге тигән һүҙ ҙә бар бит әле. Өләсәй тип әйткәс, шул һүҙ иҫкә килеп төштө.**

**Светлана Фәрит ҡыҙы:** Беҙҙең улыбыҙ Тимур М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педуниверситетын тамамланы, һөнәре буйынса тәржемәсе, лингвист, инглиз теле уҡытыусыһы. Уның да һынлы сәнғәт менән шөғөлләнеүен теләй инек. Шул теләк бойомға ашты, тип әйтә алабыҙ. Бына ул да биш йыл инде рәсем төшөрә. Ҡайҙалыр уҡыманы, ә үҙаллы өйрәнә. Башлыса, акрил буяуҙар менән эш итә һәм технологияһы буйынса миңә яҡыныраҡ. Беҙҙең һымаҡ уҡ, ул да башҡорт мөхитен данлай, уның тәбиғәтен, кешеләрен тасуирлай. Беҙҙең һәр беребеҙҙең хыялы бар. Дамир Өфөлә берәй мәсетте биҙәү тураһында хыял йөрөтһә, мин инде улыбыҙ өйләнеп, ейән-ейәнсәрҙәре көтөргә хыялланам, уларға үҙ һөнәрҙәребеҙҙе өйрәтеп, тәжрибәбеҙҙе тапшыра алһаҡ, шул ҙур бәхет булыр ине.

**➔ Күргәҙмәлә тамашасылар менән осрашыу эҙһеҙ үтмәгәндер. Иҫтә ҡалған мәлдәр булдымы?**

**Дамир Мәхмүт улы:** "Егәрленең аты ла арымаҫ" күргәҙмәһе берәүҙекенә лә оҡшамаған, тигән фекер иҫтә ҡалды. Сөнки унда беҙ тотош ғаиләбеҙ менән сығыш яһаныҡ бит. Өс кешенең ижадын тәшкил итһә лә, бай йөкмәткеһе менән ун оҫта ҡатнашҡан һымаҡ тойғо уята, тинеләр. Һынлы сәнғәттең ниндәй генә жанрын тәҡдим итмәнек: миниатюра, роспись, һүрәт, панно һ.б. Технология төрлөлөгө менән дә күргәҙмә иғтибарҙы йәлеп итә.

Беҙҙең эштәр артабан Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана, Турахан визит-үҙәгендә лә ҡуйыласаҡ. Ул турала май айында хәбәр итербеҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ Ошо сарала башҡорт теленең лексикографияһына индергән өлөшөн юғары баһалап, башҡорт теленең һүҙлек байлығын үҙ эсенә туплаған Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының лексик картотекаһына Әкрәм Бейештең исемен бирҙе.



ИНТЕРНЕТТАН



# ОЯЛСАНДАР ӨСӨН

■ Япония ашханаларында оялсан кешеләр өсөн махсус өҫтәлдәр ҡуйғандар. Ул урында башҡалар менән бергә ашарға тартыныусылар ултырасаҡ. Оялсандар өсөн тәғәйенләнгән урындар, офистарҙағы кеүек, башҡалар күҙенән ҡаплап тороусы ҡоролмалар менән ҡапланған. Нишләптер, был урындарҙы студенттар үҙ иткән, уларҙың ҡайһы берҙәре хатта ашханаға йышыраҡ йөрөй башлаған.

■ Сент-Эндрюс һәм Лидс университеты ғалимдары кислотаға бирешмәүсе эмаль уйлап табыу өҫтөндә эшләй. Ул тәбиғи эмаль торған кальций фосфатынан ялһаласаҡ. Ғалимдар билдәләүенсә, яңы эмалде тештәргә лазер ярҙамында һиптереп сығырға мөмкин буласаҡ. Был яңы технология 3-5 йылдан барлыҡҡа киләсәк һәм тештәрҙе һаҡлауҙа ҙур ярҙам күрһәтәсәк.

■ Market research company Ipsos MORI тәркөмө белдереүенсә, Европала йәшәүселәр компьютер, смартфон һәм планшеттарынан тыш йәшәүҙе күҙ алдына ла килтермәй. Бигерәк тә Испания халҡы барыһын да уҙҙырып ебәргән, улар социаль селтәрҙәргә һәм башҡа интернет-наркотиктарға көнөнә 8 сәғәт тә 48 минут ваҡыт сарыф итә. Икенсе урында Италиян халҡы тора - 7 сәғәт тә 48 минут, өсөнсө урында Норвегия халҡы - 7 сәғәт тә 36 минут. Был күрһәткес буйынса иң алдынғы ун ил исемлегендә Германия, Швейцария, Венгрия, Швеция ла бар. Барселонала йәшәүсе, яңы технологиялар һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән тайпылыштар буйынса эшләүсе психолог Марк Масип белдереүенсә, үҫмерҙәр ҙә интенетта ваҡытын күп үткәрә. Йәш испандар башҡа илдәрҙә йәшәүсе тиңтерҙәренә ҡарағанда, ике тапҡырға йышыраҡ интернетты гиҙә. Рәсәй кешеһе уртаса тәүлегенә 7 сәғәт компьютер артында ултыра.

■ Норвегия аҡсаһыҙ йәмғиәт төҙөү буйынса эштәр башлаған. Бер нисә йылдан был дәүләт тик электрон аҡсаға күсмәксе. Был тәҡдимде банктар һәм страховкалау компаниялары белдергән. "Ҡағыҙ аҡсаның әйләнештәр сығыуы, иң тәүҙә, талауҙарҙы юҡҡа сығара. Икенсенән, был осраҡта финанс енәйәттәр менән көрәшеүе еңеләләшә, сөнки электрон түләүҙәрҙе күҙәтеүе күпкә еңелерәк. Өсөнсөнән, йәмғиәт был яңылыҡтан отасаҡ ҡына", - ти Finans Norge ойошмаһы директоры Идар Кройцер. Был ойошма үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Норвегия халҡы күптән пластик карталарға өҫтөнлөк бирә, шуға ла ҡағыҙ аҡсалар менән һирәк ҡуллана.

■ Интернеттың йәш ҡулланыусылары араһында элекке концлагерҙар фонында йылмайып йәки гәзәти булмаған берәй поза фото төшөү модаға инә. Инглиз һүҙе "селфи" менән аталып йөрөтөлгән үҙ-үҙенде фотоға төшөрөү шөғөлө шул тиклем популяр. Үлем һәм бәхетһеҙлек фонында үҙҙәрен мәңгеләштерергә яратыусылар хатта махсус сайттарҙа бындай фотоларҙы йыйып бара. Йәмәғәтселек фекеренсә, үкенескә күрә, үҫмерҙәр араһында бындай гәҙәттең көсәйеүе уларҙың күңелендә мәрхәмәтлек һәм йәлләү тойғоларының юҡҡа сығы барыуы күрһәткесе булып тора.

ХЕҘМӘТ ҠАҺАРМАНЫ

**Бөгөн килеп йәмғиәтебеҙҙә шундай ихтыяж тыуҙы: тарихи шәхестәребеҙҙең, төрлө һуғыштар геройҙарының ғына түгел, оло фиҙаҡәрлек, ныҡышмаллыҡ, энтузиазм, батырлыҡ менән шул тиклем ҙур эштәр башҡарған, хөрмәт, дан ҡаҙанған арҙаҡлы хеҙмәт ҡаһармандарының да өлгөһөн, тормош юлын, тәжрибәһен өйрәнеү, бер китап итеп төпләү кәрәк. Киләсәк быуындарға хеҙмәт тигән хазинаның баһаһын, ҡиммәтен, дәрәжәһен тапшырыу өсөн кәрәк был. Өлкән быуындар өлгөһөнә эйәрә алмаған хәлдә лә, уларға тиңләшергә тырышырға тейеш бит бөгөнгө быуын. Әлегә шундай хеҙмәт ҡаһармандарының икеуһенең исемен күптән түгел булып үткән сараларға бәйләп кенә, ҡыҫҡаса ғына телгә алыуыбыҙ. Ә "Хеҙмәт ҡаһарманы" рубрикаһын уҡыусыларыбыҙ менән бергәләп киләсәктә лә дауам итеү фарыз булыр ул.**

# УЛАР ӨЛГӨҺӨНӘ ИХТЫЯЖ БАР

## Әкрәм Бейеш



Бына әле генә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында Әкрәм Бейештең хеҙмәт биографияһындағы бер генә мәлде иҫкә алдылар. Мәҫәлән, телсе, тарихсы, яҙыусы, шағир, тәржемәсе Әкрәм Ғибаҙулла улы Бейешев (1926-2003) башҡорт әҙәби теленең нормаларын булдырыуға, телебеҙҙе тарихта һаҡлап ҡалыуға айырыуса күп көс һала. Ғәмәлдә ҡулланылышта булған башҡорт теленең орфографияһы ҡағиҙәләре ошо шәхес тарафынан эшләнгән. Фонетика, стилистика өлкәләрендә лә байтаҡ ғилми эҙләнеүҙәр башҡарған ул. Уның етәкселегендә фекерҙәш хеҙмәттәштәр тупланып, башҡорт теленең XIX быуат аҙағынан алып донъя күргән башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәренән, ауыҙ-тел ижадынан, фәнни-популяр хеҙмәттәрҙән, һүҙлектәрҙән, матбуғат баҫмаларынан, ҡулъяҙма ҡомартҡыларҙан һәм архив материалдарынан һүҙҙәр һәм уларҙың ҡулланылышын күрһәткән миҫалдар йыйыла. Һөҙөмтәлә 3 млн самаһы лексик берәмекте үҙ эсенә алған картотека барлыҡҡа килә. Был һүҙлек байлығын артабан Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының хеҙмәткәрҙәре эшкәртеп, иң тәүҙә ике томлыҡ башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге (Мәскәүҙә 1993 йылда баҫыла), артабан күп һанлы терминологик һүҙлектәр, 10 томлыҡ "Башҡорт теленең академик һүҙлеге" (2011-2018 йылдарҙа сыға) нәшер ителә. Картотекала урын алған лексик байлыҡ өлөшләтә "Башҡорт теленең машина фонды"на ла индерелгән. Әкрәм Бейешев картотеканы булдырыуҙың фәнни принциптарын билдәләй, картотека өсөн материалдар туплай, башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенең инструкцияһын яҙа, был һүҙлектең яуаплы мөхәррире, айырым өлөштәренең төҙөүсеһе лә була. Иҫ киткес хеҙмәт ҡаһарманлығы өлгөһө был! Институт ғалимдары ошо сарала башҡорт теленең лексикографияһына индергән өлөшөн юғары баһалап, башҡорт теленең һүҙлек байлығын үҙ эсенә туплаған Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының лексик картотекаһына Әкрәм Бейештең исемен бирҙе. Афариндар!

## Фатима Мостафина



Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында үткән "Мостафина уҡыуҙары" форумы республиканың милли мәғариф үҫешенә нигеҙ һалыусы Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафинаға бағышланды. Ул - республиканың мәғариф министрлығын 16 йылдан ашыу етәкләгән берҙән-бер кеше. XVIII быуат аҙағынан алып бөгөнгө көнгә тиклем Рәсәйҙә мәғариф менән идара итеү органдары тарихында бындай ваҡыт арауығы эшләгән бер кем дә юҡ. Замандаштары хәтерләүенсә, Фатима Хәмит ҡыҙы ул саҡтағы республика Хөкүмәтенең иң әүҙем һәм эшлекле ағзаларының береһе була. Халыҡ мөхитенән сыҡҡан кеше булараҡ, ул республика өсөн заманса белем биреүҙең нимә аңлатҡанын, айырыуса ауыл ерендә яҡшы мәктәптәр булдырыу ни тиклем мөһим икәнен яҡшы аңлай, мәктәп реформалары барышына әүҙем етәкселек итә, аҙ комплектлы һәм тулы булмаған урта мәктәптәргә айырыуса иғтибар бүлә. Был йылдарҙа Башҡортостанда сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт эсендә мәктәптәр һәм интернаттар өсөн тиҫтәләгән заманса бинал
ар төҙөлә. Уның ныҡышмалылығы һәм тырышлығы менән республикала төрлө ҡалаларҙа (Өфө, Салауат, Сибай, Күмертау) мәктәптәр, интернаттар һәм педагогия училищелары биналары төҙөлә. 1970 йылдарҙа уның ярҙамы менән Өфөлә тәүге башҡорт мәктәбе - 20-се мәктәп барлыҡҡа килә.

Фатима Хәмит ҡыҙы менән осрашҡан күптәр уның талапсанлығын, ныҡышмалылығын, хеҙмәтен халыҡ һәм республика мәнфәғәттәренә бағышлаған профессионал булыуын билдәләй. Мәскәү чиновниктарының бик әҙҙәре генә уға яңы мәктәптәр төҙөүҙе финанслауҙан баш тарта алған, тиҙәр. Фатима Хәмит ҡыҙына республика мәнфәғәттәрен яҡларға бишенсе саҡырылыш РСФСР Юғары Советы депутаты, дүртенсе, алтынсы һәм етенсе саҡырылыш Башҡортостан парламенты депутаты итеп һайланыуы ла ярҙам итә. Ҙур ҡаҙаныштары өсөн Фатима Хәмит ҡыҙы Ленин һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары (ике тапҡыр), күп миҙалдар менән бүләкләнә. Уға РСФСР мәктәбенең атҡаҙанған уҡытыусыһы, СССР мәғариф отличнигы һәм РСФСР халыҡ мәғарифы отличнигы тигән маҡтаулы исемдәр бирелә. Бына шундай хеҙмәт ҡаһарманлығы күрһәтеп, оло хөрмәт яулаған арҙаҡлы шәхесебеҙ ул Фатима Мостафина.



**Әйткәндәй...**

Ф.Х. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында ошо оло хеҙмәт ҡаһарманына арнап үткәрелгән форумда Өфө фән һәм технологиялар университеты менән берлектә яңы инновацион-методик майҙансыҡ асылды. Унда "Башҡорт гимназияһы шарттарында балаларҙың мәктәптә уҡыуға интеллектуаль әҙерлеген формалаштырыу" исемле проект тормошҡа ашырыласаҡ. Уның төп маҡсаты - мәктәпкәсә әҙерлек төркөмөнә йөрөгән балалар өсөн төрлө фәндәрҙе берләштергән уҡытыу-методик комплекс әҙерләү. Башҡорт гимназияһына уҡырға килергә әҙерләнгән балаларҙың аң-зиһен кимәлен үҫтереүгә ҡоролған бындай комплекс төҙөү тәжрибәһе әлегәсә республикала юҡ ине. Проект сиктәрендә оҫталыҡ дәрестәре, семинарҙар ойоштороу, методик һәм дидактик ҡулланмалар әҙерләү күҙ уңында тотола. "20-се Башҡорт ҡала гимназияһының тәжрибәле башланғыс синыф уҡытыусыларының һәм Өфө университетының билдәле ғалим-методистарының был көнүҙәк проекты уңышлы тормошҡа ашырылыр, киләсәктә республикабыҙҙың башҡа гимназияларында ла хуплау табыр, тигән ышаныстабыҙ", - тип белдерҙе ойоштороусылар.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА**
**әҙерләнә.**

*✓ Ергә талау, байыҒыу өсөн ситтән килгән килмешәктәр түгел, үҙебеҙ хужа булырға тейешбеҙ. Ергә кем хужа - донъяға шул хужа икәнлеген онотоорға ярамай.*



ХӘТЕРЛӘП...

# ӘҘӘБИ МИРАҪ ҠАЛДЫРҘЫ



**Утлы яу яландары үтеп, ғүмере буйы ҡулынан ҡәләм төшөрмәй ижад иткән фронтовик-шағир, прозаик, журналист һәм педагог Әмир Моратовтың исеме ваҡытлы матбуғат дуҫтарына, әҙәбиәт һөйөүселәргә бик яҡшы таныш. Уның күп тиҫтә йылдар буйына гәзит-журнал биттәрендә, төрлө йыйынтыҡтарҙа һәм айырым китаптар булып донъя күргән шиғырҙары, хикәйәләре һәм очерктары халыҡсан оҫта тел менән үтә лә мауыҡтырғыс итеп яҙылыуы менән арбай.**

Йылайыр районында тыуып үҫкән Әмир Фәттәх улы Моратов 1943 йылдың ноябрендә Ҡыҙыл Армия сафына алына һәм хәрби училищеға оҙатыла. Һуңынан артиллерия разведчигы сифатында ул Венгрия, Австрия, Румыния, Югославия ерҙәрендә фашист илбаҫарҙарына ҡаршы барған ҡан ҡойғос һуғыштарҙа ҡатнаша, яуҙарҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн 1-се дәрәжә "Ватан һуғышы" орденына һәм "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ була. Һуғыштан һуң да хәрби хеҙмәтен дауам итә һәм тыуған төйәгенә 1950 йылдың ноябрендә генә ҡайтып төшә. Тыуған яғында бик күп йылдар балалар йортонда һәм төрлө мәктәптәрҙә уҡытыусы, завуч булып эшләй, район мәғариф бүлегендә инспектор-методист, район гәзитендә корреспондент вазифаларын башҡара. Әҙип 2003 йылдың 23 июлендә 78 йәшендә вафат була.

Ә. Моратовтың ижады бай темалы, киң диапазонлы. Шулай ҙа күпселек әҫәрҙәрендә Бөйөк Ватан һуғышы темаһы үҙәккә ҡуйылған. Автор, ул дәһшәтле йылдарҙың шаһиты ғына түгел, ә ҡан ҡойғос бәрелештәрҙең уртаһында ҡайнаған, үҙ күҙҙәре менән күреп-кисереп, йөрәгә аша үткәргән фронтовик яугир булараҡ, әленән-әле хәтирәләргә бирелә, уйлана, фәһемле һығымталарға килә.

*Яҙғандары - һуғыш, фронт, тиеп,*
*Екһенһендәр ҡайны берәүҙәр,*
*Һағынғандан түгел -*
*Онота алмағанға,*
*Онота алмағанға йөрәк һөрәнләй, -*

тип яҙа ул "Йөрәк һөрәне" тигән шиғырында һәм һуғыш темаһына ни сәбәптән ҡайта-ҡайта күтәреүен ярып әйтә:

*Йөрәк тыныс түгел. Сөнки һуғыш*
*Төрлө төҫтә башын күтәрә:*
*Йылан булып ҡайсаҡ ыҫылдай ул,*
*Йә суҡмарҙар топоп киҙәнә.*

*Хәүефләнә йөрәк барыһы өсөн,*
*Хәүефтәрҙе һиҙеп һөрәнләй.*
*Майҙар бөрөп алған йөрәктәрҙе*
*Уятырға теләп оранлай!*
*Һөрәнләмәй йөрәк түҙалмай.*

Бөйөк Ватан һуғышы темаһы, йәшлек хәтирәләре әҙиптең сәсмә әҫәрҙәрендә айырыуса ҙур урын тота. Уның "Яҙмыш менән һөйләшеү" китабы асылда шундай әҫәрҙәрҙән туҡылған. Китаптағы бер очеркын автор "Һуғыш беҙҙе иртә өлгөрттө" тип атаған. Унда фашист илбаҫарҙарының илебеҙгә ябырылыуы тураһындағы хәбәр ауылдың өлкәндәренә генә түгел, пионер йәшендә генә булған шаян-шаталаҡ үҫмерҙәргә лә ауыр тәьҫир итеүе һәм, фронтҡа киткән атайағайҙар урынына эшкә егелгәнлектән, тиҙ үк етдиләнеүҙәре, олоғайыуҙары бәйән ителә.

Яҙыусының күпселек очерктары хәрби хеҙмәттә, фронтта булған хәл-ваҡиғаларға арналған. Ғибрәтлелек йәһәтенән "Ер өсөн" очеркы ла бүтәндәренән айырымланыбыраҡ тора. Һуғыш тамамланыуға барған осорҙа авторҙың хеҙмәт иткән батареяһы күпмелер ваҡыт Австрияла була. Шул заман уларҙың часына һуғышҡа тиклем тегенселек менән шөғөлләнгән Василь исемле бер поляк егете эйәләп ала. Батареяла "үҙ кеше" булып киткәс, ниндәй ҙә булһа хәрби миҙал менән бүләкләнеү өсөн ул бер нисә тапҡыр һис ниндәй хәүеф-хәтәргә ҡарамай немецтарҙы пленға төшөрөп, часҡа килтерә һәм һөҙөмтәлә моратына ирешә - уны хәрби миҙал менән бүләкләйҙәр. Был миҙал иһә уға, тыуған төйәгенә ҡайтҡас, шәхси милеккә ер алыу өсөн кәрәк булған икән! Алыҫ йәшлек йылдарында фронтта булып үткән был ваҡиғаны автор илебеҙҙә Ер реформаһы айҡанлы барған ҡыҙыу бәхәстәргә бәйле хәтеренә төшөрә һәм әҫәренең аҙағын түбәндәге һүҙҙәр менән тамамлай: "Ер - кешенең төп байлығы, йәшәү, көн итеү сығанағы. Ул кешене туйындыра, кейендерә, һыйындыра. Ер булмаһа, ил дә булмай, кешегә ысын азатлыҡ та килмәй. "Пролетариаттың сыныйҙан башҡа юғалтыр нәмәһе юҡ!" - тип ҡоро ҡуналтаҡ шапырыныуҙар заманы үтте. Ергә талау, байыҒыу өсөн ситтән килгән килмешәктәр түгел, үҙебеҙ хужа булырға тейешбеҙ. Ергә кем хужа - донъяға шул хужа икәнлеген онотоорға ярамай. Ә иң аяныслыһы - ерҙе һатып, ата-олатайҙар төйәгенән яҙып, яҙмышы былай ҙа ҡыл өҫтөндә генә торған милләтебеҙҙе лә юҡҡа сығарыуыбыҙ ихтимал. Сөнки ереһеҙ-илһеҙ милләт булмай ҙа, тыумай ҙа. Еребеҙҙе ҡурсалап ата-бабаларыбыҙҙың хәләл ҡаны аҙ түгелмәгән. Ерле булыу өсөн генә, әле мин һөйләп үткән эпизодтағыса, ҡурҡаҡ тигәндәрен дә баш китерлек эштәргә бара. Ерҙең ҡәҙерен белә ул кеше..." Замандаштарыбыҙ, бигерәк тә йәштәр өсөн бик фәһемле һүҙҙәр был.

Шулай итеп, бер нисә әҫәренә генә күҙ һалыу ҙа Әмир Моратовтың әҙәби ижадта үҙ йөҙө, үҙ юлы булғанлығын таныта. Милли публицистикабыҙҙың һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙағы йылдам үҫешендә һәм бигерәк тә унда Бөйөк Ватан һуғышына бәйле теманың көслө яңғыраш алыуында, һис шикһеҙ, уның да тос өлөшө бар.

**Миңлеғәли НӘЗЕРҒОЛОВ, филология фәндәре докторы.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Йылға беҙелдәге, сырылдаҡ турғай

**(Речной сверчок)**



Килейектәр ғаиләһенә ҡараған был ваҡ ҡына ҡоштар беҙелдәктәр тип атала. Ҡойроҡтары баҫҡыслы, бейек үлән араһында йәшәйҙәр, оялары ла йышыраҡ ерҙә. Уларҙың үҙен күргәнсе, йырын ишетеүе еңелерәк. Был йыр сиңерткә сыңлауын да хәтерләтеп ҡуя.

Йылға беҙелдәгенең өҫкө яғы ҡара, бер аҙ йәшкелт, аҫҡы өлөшө иһә һорораҡ, муйыны һәм түшендә ҡара төҫтәге таптары бар, боғаҙ тирәһе - аҡ. Йылға-күлдәр ярҙарында, дымҡыл яландарҙа, һыу баҫҡан урындарҙа үҫкән ҡыуаҡтарҙа көн итә. Йыры буйынса таный алаһығыҙ: бер көйгә һалып, оҙаҡ итеп "дзе-дзе-дзе-дзе" тип йырлай. Хатта уны сиңерткә сыңлай тип уйларға мөмкин. Йырлаған саҡта кәүҙәһен туп-тура тота.

## Беҙелдәк, сиңерткә турғай

**(Обыкновенный сверчок)**



Йәшкелт-һоро, буй-буй арҡыры һыҙыҡтары бар, ҡашы аҡ. Йәш ҡоштар һарғылт төҫтә. Үлән ҡуйы булып үҫкән ерҙәрҙәге ҡыуаҡтарҙа йәшәй. Шиңгәккүлдә уларҙы йөҙәп йөрөгән утрауҙарҙа күрә алаһығыҙ.

Йыры оҙон, юғары тонда, тигеҙ генә итеп "зирррр" тип һайрай.

## Йырсы беҙелдәк

**(Соловьиный сверчок)**



Йылға беҙелдәгенә оҡшаған, тик өҫкө яғы асығыраҡ, ерәнерәк. Аҫҡы яғында таптар юҡ.

Шүлгәнташта 1999, 2000 йылдарҙа еүеш бер яланда йырсы беҙелдәк йәшәй ине. Кемдер бесәнлеген уратып ултыртып сыҡҡан булған бағаналарға ҡунып һайрағанын ҡарап торҙоҡ. Бер нисә минут буйына әҙәлмәйенсә "дзе-дзе-дзе" тип һайраны. Аҙаҡтан да йырсы беҙелдәк Ағиҙел үҙәндәрендә (2001 й.), Нөгөш һыуһаҡлағысында (2004 й.) осраҒыланы.

1999 йылда йырсы беҙелдәктең Ырымбур өлкәһендә оя ҡороп йәшәүе рәсми рәүештә дәлилләнгәйне. Йөмортҡа һалынға оя Тоҙтүбә районының Ивановка ауылы эргәһендә тап булалар.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# БИҘӘКТӘРҘЕ ЯЛҒАП БИҘӘККӘ...



**Ҡорама ҡорау - халҡыбыҙҙың борондан килгән шөғөлө. Элек-электән һәр ауылдың үҙ оҫтаһы булған. Уның уңғанлығы менән ауыл йорттары күркәмләнгән, тормошҡа сығырға әҙерләнгән йәш ҡыҙҙарҙың бирнәһе тулыланған.**

БыҒаса күптәр хәтерендә ҡорама ҡорау өләсәй кәсебе булараҡ ҡына һаҡланһа, һуңғы ваҡытта уны тергеҙеүгә тотонған оҫталарҙың артыуы ҡыуандыра. Шундайҙарҙың береһе Әлмира Носратуллина Мәләүез районының Иштуған ауылында йәшәй. Ҡул эшенең ниндәйенә генә тотонһа ла, ҡойоп ҡуйған оҫтабикә ваҡытында шәлен дә бәйләгән, сигеүен дә сиккән, үҙенә кейемде лә тегеп кейгән. Бөгөн ул үҙ ҡулдары менән халҡыбыҙҙың милли биҙәүестәрен дә эшләй.

Ҡорамаға Әлмира Әхмәҙулла ҡыҙы хаҡлы ялға сыҡҡас тотона. Артып ҡалған тукыма киҫәктәренән нимәләр тегеп ҡарауҙан башланып киткән шөғөл тора-бара күҙҙең яуын алырлыҡ, күҙҙәр ҡыҙыҡтырып әйберҙәр тыуҙыра. Тәүге ҡоймаҡ - төйөрлө, тигәндәй, оҫтабикәнең тәүге эштәре лә үҙенә әллә ни кәнәғәтлек килтермәй. "Былай булмай әле, тинем дә, биҙәктәрҙе ныҡлап өйрәнә башланым. Минең өйрәнеү теләгемде, ныҡышмаллығымды күрептер, һеңлем махсус журнал алып ҡайтып бирҙе. Шулай башланып киткән эшемдең күңелемә кәнәғәтлек биреүенә биш йылдан ашыу ваҡыт үтеп киткән", - тип яраткан кәсебенә тотонған тәүге көндәрен иҫкә ала Әлмира апай.

Бөгөн Иштуған ҡорамасыһының күнел йылыһын ҡушып теккән әйберҙәре күптәрҙең йортон биҙәй: уларҙы бүләккә, кәләшлеккә киткән ҡыҙҙар бирнәһенә алыусылар ҙа бар. Оҫтабикә үҙе белгәненә башҡаларҙы ла өйрәтергә тырыша. Шул теләк менән ауылда ҡатын-ҡыҙҙар өсөн ҡул эше түңәрәге лә ойошторған. Был хуплауға лайыҡ күренеш: халҡыбыҙҙың быуаттар төпкөлөнән килгән кәсебенең киләсәк быуынға тапшырылыуы тап ошондай алтын ҡуллы кешеләрҙең тырышлығына бәйле.

Бер туҡыманы икенсеһенә ялғау ғына түгел бит ул ҡорама ҡорау. Иң мөһим талаптарҙың береһе - төҫтәрҙе дөрөҫ һайлап урынлаштырыу. Улар бер-береһен тулыландырып торғанда ғына әйбер матур һәм сағыу килеп сыға. Икенсенән, төҫтөң генә түгел, туҡыманың да бер-береһенә тап килеүе кәрәк. Ситен бер, уртаһын икенсе төрлөнән текһән, ул сифатлы булмаясаҡ.

Борон өләсәйҙәр был эште бер-береһенә ярҙамлашып, ҡышҡы оҙон кистәрҙә башҡарған. Әлмира апай ҙа уға күпселек кистәрен тотона. "Касандыр күңел өсөн башланған шөғөл бөгөн ниндәйҙер кимәлдә бер "сир"гә әйләнеп китте. Йоҡларға яткас та, баштан сыҡмай әле ул. Әүен баҙарына киткәнсе, уйланып, әлеге шул биҙәктәрҙе, төҫтәрҙе үҙ-ара килештереп ята бирәм, - тип көлә күркәм эштәр хужабикәһе. - Иртән торғас, береһенән-береһе сағыу киҫәктәрҙе теҙеп һалып, кисен уйымда ҡораған өлгө буйынса эшкә тотонам. Күңелемә тыныслыҡ, әйтеп аңлатмаҫлыҡ рәхәтлек бирә ошо шөғөл..."

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**



## 4 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 0.50, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.40, 14.20, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "В парке Чаир". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Несмотря ни на что". [16+]
0.50 Т/с "Мастер и Маргарита". [16+]
3.30 Т/с "Контригра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Соло на минном поле". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Материнство и детство. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Д/с "Вопрос науки". [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/с "Города-герои". [16+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Ҡүстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Отряд Светлячков". [12+]**
**2.00 Спектакль "Что там, за холмом?" [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 5 МАЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "В парке Чаир". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Несмотря ни на что". [16+]
0.50 Т/с "Мастер и Маргарита". [16+]
3.30 Т/с "Контригра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Соло на минном поле". [12+]**
**10.45 Материнство и детство. [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Формула здоровья. [12+]**
**18.15 Дознание. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**0.00 Х/ф "Катя-Катя". [12+]**
**1.45 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**3.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 6 МАЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "В парке Чаир". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Несмотря ни на что". [16+]
0.50 Т/с "Мастер и Маргарита". [16+]
3.30 Т/с "Контригра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Соло на минном поле". [12+]**
**10.45, 20.15 Полезные новости. [12+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Формула здоровья. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00, 16.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Деловая среда. [12+]**
**21.15 Территория женского счастья. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2026". [12+]**
**0.00 Д/ф "Связь времен". [12+]**
**1.45 Спектакль "Помилование". [12+]**
**3.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 7 МАЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "В парке Чаир". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1 Башҡортостан (Уфа)
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Несмотря ни на что". [16+]
0.50 Т/с "Мастер и Маргарита". [16+]
3.30 Т/с "Контригра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Соло на минном поле". [12+]**
**10.45, 20.15 Материнство и детство. [12+]**
**11.00 Моя планета - Башҡортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Сулпылар. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Навигатор истории. [12+]**
**16.15 Уралым. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Формула здоровья. [12+]**
**20.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Край". [16+]**
**2.00 Спектакль "Ульмасбай". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 8 МАЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 18.40 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.20, 14.20 "Время покажет". [16+]
16.15 "Давай поженимся!" [16+]
17.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. Праздничный концерт ко Дню Победы. [0+]
0.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Т/с "Несмотря ни на что". [16+]
0.50 Х/ф "Завтра будет новый день". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/ф "Танкист номер один". [12+]**
**10.50 Светлой Памяти павших в борьбе против фашизма. Республиканская минута молчания.**
**11.30, 17.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Победы.**
**17.15 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 Формула здоровья. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Подвиг Одессы". [12+]**
**2.15 Спектакль "Шаймуратов генерал". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 9 МАЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.00, 11.00, 11.50 Новости.
5.10 Д/ф "Война священная". [12+]
6.10, 11.10 "День Победы". Праздничный канал.
9.30 Х/ф "В бой идут одни "старики". Легендарное кино в цвете. [12+]
12.00 Москва. Красная площадь. Парад, посвященный Дню Победы.
12.50, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.20 Премьера. Праздничный концерт ко Дню Победы. [0+]
15.50, 17.20 Х/ф "Любовь Советского Союза". [16+]
18.30 Х/ф Премьера. "Август". [16+]
18.55 Светлой памяти павших в борьбе против фашизма. Минута молчания.
19.00 Х/ф "Август". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Х/ф Премьера. "Малыш". [16+]
23.50 Х/ф "Белорусский вокзал". [0+]
1.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

4.10 Х/ф "Спасение капитана Максимова". [16+]
7.20 Большой праздничный концерт, посвящённый Дню Победы.
9.00, 12.50 "День Победы". Праздничный канал.
12.00 Москва. Красная площадь. Парад, посвящённый Дню Победы.
13.00, 17.30, 20.00, 21.30 Вести.
14.20, 2.50 Х/ф "Т-34". [12+]
18.00, 19.00, 22.10 "Песни от всей души" в День Победы. [12+]
18.55 Светлой памяти павших в борьбе против фашизма. Минута молчания.
21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
0.15 Х/ф "Праведник". [12+]
5.51 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Генералы Башҡортостана. [12+]**
**8.45 Навигатор истории. [12+]**
**9.00, 11.55, 13.00, 15.00, 15.45, 17.00 Телемарафон "От Победы к Победе!"**
**11.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**12.00 Москва. Красная Площадь. Парад, посвященный Дню Победы.**
**13.30 Новости (на рус. яз)./. [12+]**
**14.00 Торжественное прохождение военнослужащих и военной техники.**
**14.45, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**18.55 Светлой Памяти павших в борьбе против фашизма. Минута молчания.**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Х/ф "Аты-баты, шли солдаты.". [12+]**
**20.45 Торжественное шествие военнослужащих и военной техники. [6+]**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 "Башҡорт йыры представляет"... [12+]**
**1.15 Х/ф "Военно-полевой роман". [16+]**
**3.00 Спектакль "Керчь". [12+]**
**4.15 Письма солдатам. [12+]**
**4.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 10 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.45 "Часовой". [12+]
7.15 "Здоровье". [16+]
8.20 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 Д/ф Премьера. "Жизнь как выстрел". К 70-летию со дня рождения Влада Листьева. [12+]
11.10, 12.15 Д/ф "Час пик Влада Листьева". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.20 Т/с "Диверсант. Конец войны". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.55, 1.40 Х/ф "Девятаев". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.50 Х/ф "Пальма". [6+]
14.35 Х/ф "Пальма-2". [6+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Победы. [12+]**
**9.45 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "День Победы". Детский концерт. [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып!" [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15, 3.00 Д/ф "Знаменосец Победы". [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.45 Дорога к храму. [6+]**
**16.15 Честно говоря. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Спектакль "Зайтуна". [12+]**
**19.30 Д/с "Города-герои". [16+]**
**20.00 Генералы Башҡортостана. [12+]**
**20.30, 4.15 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Д/ф "Яблоневый цвет. Мечта Хасана Ахтямова". [6+]**
**23.00 Х/ф "Аты-баты, шли солдаты.". [12+]**
**0.30 Спектакль "Звезда Героя". [12+]**
**2.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**3.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**4.45 Әлләсе. [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Май (Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (17) дүшәмбе | 3:46 | 5:31 | 13:30 | 18:26 | 20:54 | 22:39 |
| 5 (18) шишәмбе | 3:44 | 5:29 | 13:30 | 18:27 | 20:56 | 22:41 |
| 6 (19) шаршамбы | 3:42 | 5:27 | 13:30 | 18:28 | 20:58 | 22:43 |
| 7 (20) кесе йома | 3:40 | 5:25 | 13:30 | 18:29 | 21:00 | 22:45 |
| 8 (21) йома | 3:38 | 5:23 | 13:30 | 18:30 | 21:01 | 22:46 |
| 9 (22) шәмбе | 3:32 | 5:21 | 13:30 | 18:31 | 21:03 | 22:48 |
| 10 (23) йәкшәмбе | 3:27 | 5:19 | 13:30 | 18:32 | 21:05 | 22:49 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

ИҒТИБАР!

# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!



**Өфө Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 81 йыллығын билдәләргә әҙерләнә.**

● Йола буйынса, төп тантаналар 9 майҙа иртән Ватанды һаҡлаусылар һәйкәленә сәскәләр һалыуҙан башлана. Көндөҙгө 12-лә ҡала Советы алдындағы майҙанда хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең тантаналы йөрөшө, көндөҙгә 1-ҙән киске 10-ға тиклем Рус дәүләт академия драма театры алдында ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн Өфө мәҙәниәт учреждениелары артистары сығыш яһай. Ҡала райондарында концерт программалары көндөҙгө 2-нән киске 8-гә тиклем дауам итә. "Ҡашҡаҙан" паркында киске 9-сы яртыла патриотик тематикаға кинофильм күрһәтеү планлаштырылған.

● Быйыл Өфөлә һәм Башҡортостанда "Үлемһеҙ полк" онлайн форматта үтә. Ойоштороусылар "Еңеү йөҙө", "Хәтер тәҙрәләре", "Хәтер стенаһы", "Мин һинең менән ғорурланам" акциялары ярҙамында Ватанды һаҡлаусыларҙы хөрмәтләргә саҡыра. "Үлемһеҙ полк" онлайн-маршы 9 майҙа көндөҙгө 12-лә башлана. Уны тәүгеләрҙән булып Чукотка һәм Алыҫ Көнсығыш халҡы күрә, шунан һуң трансляция Себер, Урал һәм Үҙәк Рәсәй аша үтә һәм Калининград өлкәһендә тамамлана.

"Фашизмға ҡаршы көрәштә һәләк булғандарҙың яҡты иҫтәлегенә" дөйөм республика йәмәғәт гражданлыҡ-патриотик тантанаһы 8 майҙа үтә. Бер үк ваҡытта бөтә республика буйынса иртәнге 11-ҙә бер минут тынлыҡ башлана. Акция урындағы ойошмалар һәм учреждениелар биләмәһендә: эш урындарында, уҡыу кабинеттарында, тамаша һәм спорт залдарында, асыҡ майҙансыҡтарҙа хәүефһеҙлек талаптарын иҫәпкә алып үткәреләсәк. Тантанала ҡатнашыусыларға кейем өҫтөнә Еңеүсе һалдатының фотоһы менән бейджик һәм георгий таҫмаһы кейергә кәңәш ителә. "Еңеү йөҙө" федераль проекты башланды ла инде. Был һуғыш геройҙары тураһында ғаилә тарихтарын һаҡлау инициативаһы. Проектта ҡатнашыусылар Еңеү музейы сайтындағы ҙур архивҡа Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында нацизмға ҡаршы көрәшкән миллионлаған кешенең фотоһүрәттәрен, документтарын һәм хәтирәләрен урынлаштыра.

● Теләгән һәр кем депозитарийға туғандары, таныштары йәки яҡташтары тураһында мәғлүмәт индерә ала. Бының өсөн кешенең фотоһы (йәки уның электрон күсермәһе), уның йәшәү йылдары, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы осоронда нимә менән шөғөлләнеүе (унда һуғышҡан йәки эшләгән) тураһында мәғлүмәттәр кәрәк. "Еңеү йөҙө" проектына ҡушылырға һәм ғаилә архивынан тарихи депозитарийға материалдарҙы сайт, мобиль ҡушымта, музей адресына йәки шәхси килеп, почта аша ебәрергә мөмкин. Проект халыҡ-ара статусҡа эйә: һәр илдең граждандары Еңеү музейының тарихи депозитарийына яҡындары тураһында мәғлүмәт индерә ала.

● "Еңеү тәҙрәләре-хәтер тәҙрәләре" республика йәмәғәт гражданлыҡ - патриотик акцияһы 1-9 майҙа үтә. Проект кешеләрҙе мәктәп, йорт, учреждение тәҙрәләренә Бөйөк Ватан һуғышы һалдаттарының һәм геройҙарының фотоларын ҡуйырға саҡыра. Улар фронтовиктар, тыл хеҙмәтсәндәре, блокадасылар, һуғыш балалары, концлагерь тотҡондары, подпольщиктар һәм партизандар булыуы мөмкин. Портреттар форматы А3 йәки А4. Шулай уҡ социаль селтәрҙәрҙә рәхмәт һүҙҙәре, тематик текстар, #ОкнаПобеды102 хештегы менән биҙәлгән тәҙрәләрҙең фотоларын урынлаштырырға тәҡдим ителә. Төп талап - тәҙрәләрҙә уйлап сығарылған персонаждар түгел, ә ысын һуғыш геройҙары һүрәтләнһен.

● "Хәтер стенаһы" акцияһы 4 майҙан 9-на тиклем дауам итә. Фронтовиктарҙың портреттары белем биреү учреждениелары, ойошмалар, предприятиелар, музейҙар, театрҙар, китапханалар эсендә урынлаштырыласаҡ. Шулай уҡ фотолар асыҡ урындарҙа: урамдарҙа, парктарҙа, ихата биләмәләрендә, бина фасадтарында, билбордтарҙа урынлаштырыла, шулай итеп уларҙы мөмкин тиклем күберәк кеше күрә ала.

● "Мин һинең менән ғорурланам" акцияһы 1-9 майҙа иғлан ителде, унда һәр кем ҡатнаша ала. Бының өсөн Бөйөк Ватан һуғышы ветеранының фотоһы менән бейджды һәм кейемгә георгий таҫмаһы менән беркетергә кәрәк. Был илдең нацист агрессияһынан һаҡлаған быуындың батырлығы, ҡаһарманлығы тураһында онотмауын символлаштыра.

● 2026 йылда, Еңеүҙең 81 йыллығы йылында 9 майҙа "Үлемһеҙ полк" цифрлы маршы үтәсәк. Онлайн-акцияға теркәлеү башланған да инде. Башҡортостанда йәшәүселәргә акцияла ҡатнашыу өсөн сайтта, Бәйләнештә, Класташтар йәки МАКС-тың мини-ҡушымталарында ғариза бирергә мөмкин. Шәхси кабинетта Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, тыл хеҙмәтсәне, шулай уҡ Ватан өсөн көрәшкәндәр тураһында фото һәм мәғлүмәт урынлаштырырға кәрәк. Фотоһүрәтте яҡшыртыу функцияһы менән файҙаланып, уны төҫлө итергә мөмкин. Социаль селтәрҙәрҙә үҙенең геройы тураһында хикәйә менән уртаҡлашыу мөһим. Ғаризалар 6 майға тиклем ҡабул ителә.

Онлайн-йөрөш 9 майҙа урындағы ваҡыт буйынса көндөҙгө 12-лә Бөтә Рәсәй сайтында һәм экрандарында башлана.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 май "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, инсц. Ш. Ғилманова), трагедия. 16+

**5 май "Кеше булып ҡалырға"** (Е.Коллегова, Х. Үтәшев). 12:00. 12+

**5 май "Балам"** (В. Емелева, И. Мөхөтдинов), спектакль-терапия. 19:00. 16+

**6 май "...Ат уйнатып алдан бара...",** (З.Бураҡаева, Х. Үтәшев), театрлаштырылған тамаша. 12:00. 12+

**7 май "Кейәүҙәр"** (Х.Вәхит, Ф.Ғарипов), музыкаль комедия. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**1 май "Седина в бороду или невеста из Имеретии..."** (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 18:00. 12+

**2 май "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев, М. Күлбаев), әкиәт. 12:00. 0+

**3 май "Мәйсәрә мутлыҡтары"** (Х. Ниязи, Р. Хәкимов), музыкаль комедия. 18:00. 16+

**5 май "Сказание о семи батырах"** (Д.Йосопов, Р.Хакимов), фэнтези. 11:00. 6+

**6 май "Пеппи длинныйчулок"** (А. Линдгрен, О. Пронин). 11:00. 0+

**7 май "Капитанская дочка"** (А.Пушкин, И. Сакаев). 19:00.12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**1 май "Гуси-лебеди"**, рус халыҡ әкиәте. 12:00. 0+

**2 май "Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары"** (К. Чуковский). 12:00. 0+

**3 май "Вот так репка!"**, рус халыҡ әкиәте. 12:00. 0+

**7 мая "О героях былых времен"** (М. Батурин). 19:00. 12+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**2 май Фларид Бирғалиндың** концерты. 6+

**4 май "Бейеү тулҡынында"** "Сибай ынйылары" халыҡ бейеүҙәре ансамбленең отчет концерты. 6+

**5 май "Без пяти десять"** "Индиго" бейеү студияһының отчет концерты. 6+

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# ЯНҒЫНДАН ҺУҢ НИ ҠАЛА?

**"Янғын сығарыу анһат, һүндереү ҡыйын", ти халыҡ мәҡәле. Эйе, беҙ янғын хәүефе тыуҙырыр мәлдәргә ваҡытында иғтибар итмәйбеҙ һәм берәмтекләп өйгән донъябыҙҙан көл-күмер генә ҡалғас, терһәкте тешләрҙәй булабыҙ ҙа - һуң була. Янғын хәлдәре тураһында әленән-әле мәғлүмәт биреүебеҙҙең маҡсаты ла ошо бит: хәүефте алдан иҫкәртегеҙ.**

❖ Мәҫәлән, был көндәрҙә Өфө янындағы яланда 2 гектар майҙанда ҡоро үлән янып киткән, тип хәбәр итәләр Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетынан. Янғын һүндереүселәр ярҙамға килеп, утты тиҙ арала һүндергән. Ләкин был да бөгөн үҙенең йорто баҡсалары участкаларында сүп-сар яҡҡан кешеләргә иҫкәртеү һымаҡ ҡабул ителһен ине.

❖ Ҡуйы ҡара төтөнө менән Өфө халҡын ҡурҡытҡан янғын дүрт машинаны көлгә әйләндергән. БР Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығынан әйтеүҙәренсә, 27 апрелдә ашығыс хеҙмәткә шәхси эшҡыуарлыҡ территорияһында янғын сығыуы хаҡында хәбәр килә. Уттан дүрт машина зыян күрә. Янғын тиҙ арала һүндерелгән, сәбәптәре асыҡлана. Һәләк булғандар һәм йәрәхәт алғандар юҡ.

❖ Бишбүләк районының Ҡунаҡкол ауылында ағас йортта янғын сығыу сәбәпле 64 йәшлек ҡатын һәләк була. Ут ирекле янғын һүндереү командаһы һәм Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы бригадаһы тарафынан һүндерелә. "Эшләп торған электроприборҙарҙы һәм мейестәрҙе ҡарауһыҙ ҡалдырмағыҙ, электр сымдарының төҙөк булыуын күҙәтегеҙ, ҡулдан яһалған йылытҡыстар ҡулланмағыҙ", - тип киҫәтәләр ведомствонан.

❖ Хәбәр итеүҙәренсә, 28 апрелдә Булгаков ауылында күп фатирлы йортта янғын сыға. Уттан йорт мөлкәте зыян күргән. Утты һүндереүгә оператив рәүештә Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының һәм БР дәүләт комитетының янғын һүндереүселәре юллана. Янғын урынын тикшергән ваҡытта 70 йәшлек ирҙең кәүҙәһе табыла. Янғын сәбәптәре асыҡлана.

❖ 26 апрелдә Хәйбулла районының Степное ауылында ағас йорт янып китә. Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрылығы һәм БР Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетының янғын һүндереүселәре утты тиҙ арала һүндерә. Ваҡиға һөҙөмтәһендә 31 йәшлек ир һәм ҡул суҡтары һәм табандары бешкән бәләкәй бала йәрәхәттәр алған. Улар медицина учереждениеһына тапшырылған. Шул уҡ районың Сәйғәфәр ауылында ла ике фатирлыҡ торлаҡ йортта янғын сығыуы хаҡында хәбәр ителә. Янғын һүндереүселәр килгәнсе ут ағас йортто, йәйге аш бешереү урынын һәм мунсаны ялмап алған була. Янғын һүндреүгә Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы һәм Йомаш ауыл советының ирекле янғын һүндереү командаһы көстәре йәлеп ителә. Конструкцияларҙы һүткән саҡта һәләк булыусы яҡынса 70 йәштәрҙәге ирҙең кәүҙәһе табыла.

❖ Шулай итеп, "Рослесхоз"дың тикшереү йомғаҡтары буйынса Башҡортостан янғын хәүефе миҙгеленә әҙер тип танылды. "Экология именлеге" милли проектының (национальный проект "Экологическое благополучие") "Урмандарҙы һаҡлау" федераль проекты сиктәрендә техник базаны яңыртыу әҙерлектең мөһим өлөшө булып тора, тип хәбәр иттеләр республиканың Урман хужалығы министрлығында. Ағымдағы йылда был маҡсатҡа 91 миллион һум самаһы аҡса йәлеп ителгән. Әлеге ваҡытта ете берәмек махсус техника һатып алынған, улар республикаға майҙың тәүге көндәрендә килеп етәсәк. Бынан тыш, "Урман һаҡсыһы" системаһын көсәйтеү буйынса эш алып барыла - тағы ла 35 видеокүҙәтеү камераһын ҡуйыу планлаштырыла.

**Айһылыу ДАУЫТОВА әҙерләне.**

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ХАЙРАН ИТЕР ТАМАША

**Өфөлә "Берҙәмлек ауазы" шоуының хедлайнеры булып AY YOLA төркөмө сығыш яһай.**

Күләмле "Берҙәмлек ауазы" шоуы 15 майҙа "Өфө-Арена" сәхнәһендә була. Был гәҙәти форматтағы концерт түгел, ә иммерсив шоу, тип хәбәр итте ойоштороусылар. Проектта 100-ҙән ашыу артист, шулай уҡ популяр артистар Олена УУТАй, Zventa Sventana, Ника Дубик, Добрыня Сатин һәм "Тодош" төркөмө, Вахтанг, "Братство Атома" һәм башҡа артистар ҡатнаша.

"Шоуҙа донъяның иң яҡшы сәхнәләрендә ҡулланылған бер нисә визуаль һәм техник алымдар күрһәтелә. Тамашасыларға ҡыҙыҡлыраҡ булһын өсөн әлегә әйтмәй торабыҙ. Кемдәр килә, уларҙы яҡшы сюрприз көтә", - тип һөйләне "Берҙәмлек ауазы" проектының генераль продюсеры Искәндәр Вәлиев.

Проекттың идеяһы президент Владимир Путин иғлан иткән Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылы контекстында барлыҡҡа килде. Рәсәйҙә бер флаг аҫтында тиҫтәләгән халыҡ йәшәй. Улар төрлө булһа ла, берләштергән нәмәләр бар, музыка - шуларҙың береһе. Продюсер һүҙҙәренсә, Өфө шоуҙы уҙғарыу урыны итеп осраҡлы һайланмаған. Ҡала ике ҙур мәҙәни һәм географик зонаны - Волга буйы менән Уралды берләштерә. Бында мәҙәни традициялар ныҡ үҫешкән һәм шул уҡ ваҡытта заманса музыка форматтарына ҡыҙыҡһыныу ҙур.

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ДИЛАРА!



**Опера йырсыһы, Башҡорт һәм Түбәнге Новгород опера һәм балет театрҙары солисы, Башҡортостандың халыҡ артисы Дилара Иҙрисова BraVo халыҡ-ара профессиональ музыкаль премияһы лауреаты булды.**

Уға "Иң яҡшы классик ҡатын-ҡыҙ вокалы" номинацияһында статуэтка тапшырылды. Алып барыусылар уны "Башҡортостандың алтын сопраноһы", "Үҙ быуынының иң уңышлы йырсыларының береһе" тип иғлан итте һәм наградаларын иҫкә төшөрҙө: Рәсәйҙең "Алтын битлек" милли театр премияһы лауреаты, ике тапҡыр "Онегин" премияһы лауреаты һәм башҡалар. "Был матур сараны ойоштороусыларға рәхмәт һүҙҙәрен әйтергә теләйем, жюри ағзаларына ҙур рәхмәт. Профессор Миләүшә Ғәли ҡыҙы Мортазинаға рәхмәтемде белдерәм, уның ярҙамында сәнғәттә үҙ урыным бар. Шулай уҡ минә үҙемдә нығыраҡ ышанған әсәйемә рәхмәт", - тине Дилара Иҙрисова сәхнәлә һәм Моцарттың "Аллилуйя"һын йырлап ишеттерҙе. Премияны тапшырыу тантанаһы Рәсәйҙең Ҙур театрының тарихи сәхнәһендә үтте.

# ГАСТРОЛДӘР БАШЛАНДЫ

**15 апрелдән 30-на тиклем Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында сәхнәләштерелгән "Кеше булып ҡалырға" спектакле республикабыҙҙың ҡала-районларына юлланды. Уның премьераһы Бөрйән, Учалы районларында һәм Өфөлә үтте.**

Башҡортостандың мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарыусы Фәнүр Шәйхисламов бурыс, һайлау һәм ысын патриотизм темаһына арналған спектаклде ҡарарға кәңәш бирҙе. "Эш графигының тығыҙ булыуына бәйле, был спектаклде ҡарарға ваҡыт бүлә алманым. Сюжет нигеҙендә ысын герой - актер һәм МХО яугирының тарихы, - тип билдәләне Фәнүр Шәйхисламов. - Театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахмановҡа, спектаклдең режиссеры Хөрмәтулла Үтәшевҡа, актерҙарға һәм ижади төркөмгә ошондай мөһим тема хаҡында спектаклде сәхнәгә сығарыуҙары өсөн рәхмәт белдерәм. Барығыҙҙы ла уны ҡарау өсөн мөмкинлек табырға саҡырам. Был беҙҙең дөйөм хәтер һәм геройҙарҙың батырлығына хөрмәт билдәһе булып тора".

Хәбәр ителеүенсә, Елена Коллеговандың пьесаһы буйынса сәхнәләштерелгән спектакль реаль ваҡиғаларға нигеҙләнгән һәм Луганск актерҙарына - МХО-ла ҡатнашыусыларға арналған.

# СИБАЙ ЙЫРСЫҺЫНА...



**Баймаҡ районының Күсей ауылы егете өлөшләтә мобилизацияға эләккәнгә тиклем Сибай концерт-театр берекмәһе вокалисы булып эшләнө.**

Ленинград хәрби округы йыр һәм бейеү ансамбленең 1-се фронт ижади бригадаһы Рәсәй Федерацияһы Оборона министрлығының мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһенең "Музыкаль сәнғәт" номинацияһында премия лауреаты булып танылды. Бригада составында хеҙмәт итеүсе ир-егеттәргә, шул иҫәптән яҡташыбыҙ, Баймаҡ районының Күсей ауылы егете, Сибай концерт-театр берекмәһе вокалисы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Әлфир Вафир улы Замановҡа Рәсәй Оборона министрлығының премияһы тапшырылды. Алдан хәбәр итеүебеҙсә, Махсус хәрби операция башланғас та Сибай концерт-театр берекмәһенең бер төркөм артистары өлөшләтә мобилизацияға эләкте.

# ЙЫРЛАТА "ТАМЫР"...



**"Башҡортостан" дәүләт концерт залында республика балалары көтөп алған ваҡиға - "Тамыр" балалар-үҫмерҙәр телеканалының ҙур концерты булды. "Бергәләп" тип исемләнгән концерт Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылына, шулай уҡ Башҡортостанда Ҙур һәм татыу ғаилә йылына бағышланды.**

Телерадиокомпанияның матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, ҙур сәхнәлә "Тамыр" телеканалы йыр студияһының кескәй артистары, "Сулпылар", "Елкән" телеконкурстары еңеүселәре йырланы һәм ғаилә ҡиммәттәре, дуҫлыҡ, берҙәмлек, Тыуған илгә һөйөү хаҡында һөйләне. Балалар менән бергә башҡорт эстрадаһының билдәле артистары Заһир Иҫәнсурин, Артур Ғайсаров, Гәлсәр Байғусҡарова, Тимур Ямалов, Лиана Хәбибуллина, РНТ һәм Нәркәс Хәмитова сығыш яһаны. Концертты телеканалдың кескәй йондоҙҙары Байегет Шаһибалов, Асель Бадранова, балаларҙың яратҡан тапшырыуҙарын алып барыусы Фәрхәт Ғәйнетдинов алып барҙы.

Тәнәфестә йәш тамашасылар рәхәтләнеп уйнаны, бүләктәр алды, тәм-том менән һыйланды. Башҡортостандың мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарыусы Фәнүр Шәйхисламов концертҡа балалары менән килгәйне, ул үҫеп килгән быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләүгә, туған телде, мәҙәниәтте үҫтереүгә тос өлөш индергәне өсөн "Тамыр" телеканалы коллективына рәхмәт белдерҙе.

Концертҡа "Тамыр" балалар-үҫмерҙәр телеканалының Ҙур һәм татыу ғаилә йылы уңайынан ойошторған "Өйҙә" медиаконкурсы еңеүсеһенең ғаиләһе саҡырылғайны. Дыуан районының Т. Йосопов исемендәге Республика лицей-интернаты уҡыусыһы Алтынай Әхмәтйәнова төп бүләк - телевизор алды.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАРТЛЫҠ...

## рухи ҡеүәт алдында көсһөҙ...

Аҡыллы кеше үҙ-үҙенә генә талап ҡуйыр, аҡылһыҙ әҙәм башҡаларҙан талап итеп аптыратыр.

**(Ҡытай халыҡ мәҡәле).**

Кәрәк саҡта тәүәккәллек күрһәтмәгән кешене ул тиклем аҡыллы тип әйтеп булмай.

**(Генри Бичер).**

Хоҙайҙан һуң беҙ ҡатын-ҡыҙ алдында бурыслыбыҙ: тәүҙә ул беҙгә йәшәү бүләк итә, шунан йәшәүебеҙгә мәғәнә өҫтәү өсөн бар көсөн һала.

**(Каролина Бови).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике кеше осрашҡан һәм уларҙың беренсеһе икенсеһенә сәләм биреп, шулай тигән:**

**- О, аҡыл эйәһе, һиңә оҙон ғүмер теләргә рөхсәт ит!**

**- Мин оҙон ғүмерҙән баш тартам! - тигән икенсеһе.**

**- Улай булғас, аҡыл эйәһенә байлыҡ теләргә рөхсәт ит!**

**- Мин байлыҡтан да баш тартам! - тигән икенсеһе.**

**- Ярай, улай булғас, мин һиңә күп улдарың булыуын теләйем!**

**- Юҡ, мин улдарҙан да баш тартам! - була яуап.**

**- Ғәжәп хәл! Күптәр теләй оҙон ғүмерле лә, бай ҙа, күп уланлы ла булырға... - тип аптырай беренсе кеше.- Ә ниңә һин быларҙан баш тартаһың?**

**- Оҙон ғүмерҙең аҙағы - тыуған һәм хәлһеҙләнгән ҡартлыҡ. Байлыҡ - ул артыҡ ығы-зығы, мәшәҡәт, тыныслыҡ йоҡо. Күп уланлы булғандар өсөн дә, тыныс көндәр бөттө, тиғән һүҙ. Был өс теләкте тормошҡа ашырыуҙан ғына һин барыбер иң изге, иң аҡыллы кеше булып китмәйһең - шуға мин уларҙан баш тартам... - ти икенсе кеше.**

**- Мин һине тәүҙә аҡыл эйәһендер тип ҡабул иткәйнем, - ти беренсе кеше, тамам төңөлөп. -Ә хәҙер тәрән хаталанғанымды аңланым. Уйлап ҡара әле, тәбиғәт бит кешеләрҙе яралтҡан саҡта һәр береһенә ниндәйҙер шөғөл бүләк иткән. Әгәр һинең күп уландарың бар һәм уларҙың һәр береһе ниндәйҙер шөғөлгә эйә икән, улар тураһында борсолорға кәрәкме һуң? Әгәр ҙә байлығың күп икән, уны башҡалар менән бүлешергә, ниндәйҙер изге эштәр атҡарыу өсөн тотонорға була, ул саҡта байлыҡтан баш ауырымаясаҡ. Аҡыллы әҙәмдә байлыҡ камиллаштыра ғына һәм иң изгелекле кешегә әйләндерә. Ул саҡта иһә бындай кеше оҙаҡ йәшәүҙән дә ҡурҡмай, тузыу, хәлһеҙләнеү, файҙаһыҙға әйләнеү тигәндә лә белмәй. Ҡартлыҡ һинең тәнеңә бер ниндәй ҙә зыян килтерә алмай. Ҡартлыҡ рухи ҡеүәт алдында көсһөҙ...**

**Шулай ти ҙә беренсе кеше, аҡылһыҙ "аҡыл эйәһе" эргәһенән китеп бара..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 26017

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99
**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 29.04.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 29.04.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 30.04.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 755